ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2025

№51 (1195)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡыш бабай тирмәһенә... 3



Кеше һәм йыһан, йәки Яңы йыл алды фәлсәфәһе 8-10



Уҡыу аҡыллылыҡ бәләһеме? 11



Мин һөйләгәндәрҙе тыңлаһаң... хөрәфәт тимә, ҡоҙа 13



***Яңы йыл** алдынан әйтелгән ихлас теләктәр тормошҡа аша, ти. Уның сере нимәлә, беләһегеҙме? Тап **Яңы йыл** байрамы алдынан еткерелгән теләктәрҙе беҙҙең үҙебеҙҙең ҙә ихлаһлап, уларҙың ысынлап та бойомға ашырына ышанып, мөғжизәләй күреп ҡабул итеүебеҙҙә. Шуның өсөн **"Ихлас теләктәргә йөрәктәрҙе асайыҡ!"** тип әйҙәләйбеҙ һеҙҙе. Ҡотлауселарҙың **Ихласлығы**, **Йөрәк нуры**, **һөйөүе** һәм **Хөрмәте** күңелдәрегеҙҙе яҡтыртһын, донъяларығыҙҙы биҙәһен!*

ШАҒИР һҮҘЕ

# ЙЫЛҠЫ ЙЫЛЫНА

*Уйҙарымда бик йыш осоп киләм
Ҡырағай ат-тарпан иленә.
Ҡылған тулҡынланған сал далаға,
Аҡбуҙаттың сыҡҡан күленә.*

*Меңәр йылдар хозур Уралында
Тарпан менән башҡорт йәшәгән.
Илен һаҡлап батыр ҡанын ҡойған,
Өйөр һаҡлап аҫау кешнәгән...*

*Әйәр һалған Ваҡыт тарпанға ла,
Башҡорт атын бәлә заманым.
Әллә шуға һәр саҡ йылҡы йылын
Башҡорт йылы, тиеп һананым.*



*Башҡорт аты һымаҡ әрһеҙ, сыҙам
Заман йөгөн тартҡан халҡыма,
Ошо йылда уңыш юлдаш булһын
Яҡты киләсәге хаҡына.*

*Тынып ҡалған дала буйлап елһен
Өйөр-өйөр башҡорт аттары.
Уңалһындар ерҙең яралары,
Юғалһындар илдең "аһ"тары.*

*Йылҡы йылы - Башҡортостан йылы,
Рәсәй йылы - быны беләбеҙ.
Өмөт, хыял, ҙур ышаныс менән
Киләсәккә бергә елабеҙ.*

**Тимер НИӘТШИН.**

МӨХӘРРИР һҮҘЕ

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!



**Рәхмәтлебеҙ ҡулдарына "Киске Өфө"беҙҙе алып, беҙҙең аҡҡа ҡара менән яҙғандарҙы күҙҙән дә, андан да үткәргән, уның биттәренән кәрәкле мәғлүмәт тиргән, аҡыл, кәңәштәрҙе ҡабул иткән, ҡабул итмәгәне буйынса бәхәс ҡорған хөрмәтле уҡыусыларыбыҙға. Рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе етеп килгән Яңы йыл менән ҡотлауҙарыбыҙға ҡушып оҙатабыҙ һеҙгә!**

Гәзитебеҙ аша беҙҙе ишеткән зыялы милләттәштәребеҙ, беләһегеҙ, беҙ һеҙҙе һәр ваҡыт "аңлы уҡыусыбыҙ" тип атайбыҙ. Берҙән, һеҙ туған телдәге баҫманы йәшәтеүгә үҙ өлөшөгөҙҙө индерергә кәрәк икәнен аңлайһығыҙ. Икенсенән, "Киске Өфө"ләге "Диалог", "Заман башҡорто" кеүек рубрикаларҙа сығыш яһаусы ҙур тормош тәжрибәһенә, оло дәрәжәләргә өлгәшкән, заман үҙгәрештәренә күҙҙәрҙе асҡан улдарыбыҙ һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың зиһенегеҙгә иң юғары ҡиммәттәр тураһында уй һалған, аҡыллы фекерҙәргә ылыҡтырған, һығымталар яһатҡан, аңығыҙҙы уятҡан, рухландырған төплө һүҙен тыңларға, шул һүҙ менән күңел һауыттарығыҙҙы тултырырға теләйһегеҙ. Ә был иң мөһиме, моғайын. Бер риүәйәттә һүрәтләнгәнсә, борон һәр кемдең күҙгә күренмәҫ "һауыты" булған. Ул һауытҡа алтын-көмөш түгел, ә изге ғәмәлдәр һәм һүҙҙәр генә тултырылған. Ниндәйҙер ауыр һынауҙар килгәндә, кеше шул "һауыт"ҡа тултырылғандар ярҙамында артабан йәшәргә көс тапҡан... Был кинәйәнең мәғәнәһен аңлағанһығыҙҙыр. Беҙ ҙә үҙ уҡыусыларыбыҙға шулай тибеҙ: һин дә күңел һауытыңды "Киске Өфө" биттәренән уҡыған фәһемле һүҙҙәр менән тултырып, матур йәшәү өлгөләренә, һыналған тәжрибәләргә эйәреп, тормоштоң ваҡ-төйәктәренә иғтибар итмәйенсә, алға, маҡсатыңа табан ынтылып, юғарыға ҡарап фекер итеп, булғанына шөкөр итеп йәшә!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЙЫЛ ОРАНЫ БУЛҺЫН:

## изгелектәр эшләп ярышайыҡ!

**Тормошта рәхмәтле изгелектәрҙең, миһырбанлыҡтың төрлө өлгөләре менән осрашырға тура килә. Изгелек төшөнсәһен һәр кем үҙенсә аңлағанын, үҙенең күңел торошонан, эске халәтенән, тормош тәжрибәһенән сығып баһалауын да беләм.**

Мәҫәлән, ҡасандыр үҙе финанс ауырлығын кисергән кеше мохтаждарға бағыусы ярҙамын күрһәтеүҙе иң изге ҡылыҡ тип иҫәпләй. Ә ҡасандыр ҡаты ауырып түшәктә ятҡан кеше үҙен аяҡҡа баҫтырырға бөтә көсөн һалған медицина хеҙмәткәрҙәрен изге фәрештәләргә тиңләй. Бер ниндәй сәбәпһеҙ яҡынына бүләк тәҡдим итеүҙе лә, автобуста оло йәштәгеләргә урын биреүҙе лә, белмәгән кешегә юл өйрәтеп ебәреүҙе лә, әсә-атаһына ярҙам итеүҙе лә изге эштәр рәтенә индерәләр.

**(Дауамы 4-се биттә).**

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

(Башы 1-се биттә).

Әммә был мөрәжәғәтте барыһы ла ишетмәй - шуныһы ҡыҙғаныс. Ишеткәндәр кәмей бара. Быны беҙ ҡағыҙ баҫмаларҙың тираждарына ҡарап та беләбеҙ. Мин тағы шул бер үк "йырҙы йырлайым" инде: һуңғы йылдарҙа кешеләр гәзит, китап һүҙен ишетмәҫкә күнекте ләбаһа. Эйе, бер-береһен ишетеү, бер-береһен тыңлау һәләте юйыла төштө һымаҡ кешеләрҙә. Беҙ йыл әйләнәһенә уҡыусыларыбыҙҙы "Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!" тип тә, " Әйҙәгеҙ, аңлы, рухлы, уңышлы, сәләмәт, иманлы булайыҡ!" тип тә әйҙәләйбеҙ. "Әйҙәгеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнәйек!" тип, төрлө тарихи сығанаҡтар тәҡдим итәбеҙ. "Әйҙәгеҙ, һаҡланайыҡ!" тип, сирҙәрҙән, тәбиғәт ҡазаларынан, аяҡ аҫтында булған бәләләрҙән генә түгел, һуңғы йылдарҙа ҡоторонған алдаҡсыларҙан, муттарҙан һаҡланырға ла саҡырабыҙ. Әйҙәләйбеҙ шулай. Бер-беребеҙҙе ишетеүгә өмөт итәбеҙ, әммә өмөттәр аҡланмай. Гәзиттәр ябылыу сигендә, китаптар китапханаларҙа саң йыйып ята... Әммә теләһә ниндәй хәбәрҙәргә, төрлө икеләнеүҙәр, шикләнеүҙәр, үпкәләүҙәр, үсәүҙәр, үсегеүҙәр, ҡурҡыу-шөбһәләнеүҙәр, көнләшеүҙәр кеүек сүп-сар хәбәрҙәргә күңел ишектәре шар асыҡ...

Ошоға бәйле тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Будда эргәһенә бик белемле, мәҙәниәтле ғалим килгән һәм һорау биргән. Будда хәҙер генә уның һорауына яуап бирә алмауы тураһында белдергән. Ғалим бик ныҡ аптырап:"Ни өсөн яуап бирә алмайһығыҙ, ваҡытығыҙ тармы?" - тип һораған. "Юҡ, ваҡытым етерлек минең, - тигән Будда, - һеҙ минең яуапты хәҙер генә ҡабул итә алмаҫһығыҙ, тип уйлайым". "Ни өсөн?" - тип ныҡышҡан ғалим. "Өс төрлө тыңлаусы була, - тип һүҙен дауам иткән Будда. - Беренсеһе баштүбән әйләндереп ҡуйылған көршәк кеүек: күпме генә һөйләһәң дә, уның башына бер ни ҙә инмәй. Икенсе төрлө тыңлаусы төбө тишек көршәк кеүек: уны мәғлүмәт менән тултыраһың, ләкин тишек көршәктә һыу тотҡарланмаған кеүек, һөйләнгән һүҙ ҙә башҡа һеңмәй, файҙаһыҙға елгә осоп бөтә. Өсөнсө тыңлаусы иһә төрлө сүп, ҡалдыҡ-ҡолдоҡтар менән тулы көршәк кеүек: уға һыу һалаһың, һыу бысранып, ағыуланып тик тора..."

Ғәфү, уҡыусыларыбыҙға адресланған рәхмәт һүҙҙәренә ялғанды ла китте был әйткәндәрем. Әммә гәзитебеҙҙе уҡыусылар танһығын ҡандырырҙай итеп ижад итергә һәләтле хеҙмәткәрҙәребеҙгә лә, авторҙарыбыҙға ла рәхмәт әйтергә онотмайбыҙ. Йылдағыса, кемдәрҙелер айырым билдәләп тә китәбеҙ. Билдәләүҙәр исемлегендә бер үк кешеләр исемдәре яңғырай инде, беләһегеҙ, хәҙер редакцияларға суҡтин-суҡ хат-хәбәрҙәр еткереүселәр ҙә юҡ тиерлек: тоғро авторҙарыбыҙ Хәлил Һөйөндөков, Әғләм Шәрипов, Зәкирйән Әминев, Радик Өмөтҡужин, Лена Абдрахманова, Хәйҙәр Тапаковҡа оло рәхмәтлебеҙ. "Киске Өфө"лә нисәмә йылдар арымай-талмай эшләүсе Фәүзиә Мөхәмәтшина, Вәлиәхмәт Бәҙретдинов, Артур Батыршин, Ләйсән Нафикова-Вәлиева, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайға ла, беҙҙең коллективҡа күптән түгел килеп ҡушылған Рәсүл Байгилдин, Фәрзәнә Аҡбулатоваға ла рәхмәттәр яуһын.

Әйткәндәй, нисек кенә әрнеүле булһа ла бында яҙғандар, Яңы йыл менән ҡотлауҙарҙы ихлас ҡабул итегеҙсе. Ана, Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡотлай һеҙҙе, үҙебеҙҙең Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров ҡотлай. Яңы йыл ишек ҡаҡҡанда бар ҡотлауҙар ҙа күңел һауыттарығыҙға ҡот, именлек, уңыштар, изгелектәр булып барып инһен!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

КӨН ТЕМАҺЫ

**Үткән аҙнала "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" тип аталған тура бәйләнеш һәм ҙур матбуғат конференцияһын берләштергән сара үтте. Уның сиктәрендә дәүләт башлығы журналистарҙың һәм ил халҡының һорауҙарына яуап бирҙе. Быйыл тура бәйләнеш 4 сәғәт тә 27 минут дауам итте, Президент 80-дән ашыу һорауға яуап бирҙе. Тура эфирға бөтәһе 3 миллиондан ашыу, шул иҫәптән Башҡортостандан 43 меңдән ашыу мөрәжәғәт килгәйне.**
**Программаны быйыл билдәле журналистар Павел Зарубин һәм Екатерина Березовская алып барҙы. Сарала Башҡортостандан "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәрсеһе Ләйсән Закирова, Башҡортостан юлдаш телеканалы журналисы Илдар Байбулатов һәм видеооператор Артур Хөснөтдинов, "Башҡортостан Республикаһы" мәғлүмәт агентлығы медиаредакторы Марсель Байдәүләтов һәм "Әбйәлил" гәзите мөхәррире Таңсулпан Йомағужина ҡатнашты. Ләйсән Закирова ил башлығына һорау бирә алды. Артабан - "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары"ның ҡайһы бер тезистары:**

# ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!



***Махсус хәрби операция тураһында:*** Владимир Путин журналистар һәм халыҡ менән аралашыуҙы һуғыш һәм тыныслыҡ мәсьәләһенән башланы. "Шулай ҙа, һуғышмы әллә тыныслыҡмы? Махсус хәрби операция маҡсаттарына ниндәй юл менән мотлаҡ өлгәшә алырбыҙ?" - тигән тәүге һорауын бирҙе Екатерина Березовская.

• Әлегә Украинаның тыныслыҡҡа ынтылыуын һәм территорияһын бирергә әҙер икәнен күрмәйбеҙ.

• Стратегик инициатива тулыһынса РФ Ҡораллы көстәре ҡулына күсте. Бөтә йүнәлештәр буйынса дошман сигенә. Йыл аҙағына Рәсәй Ҡораллы көстәренең фронт һыҙығында яңы уңыштары көтөлә.

• Аляскалағы саммит алдынан Рәсәйгә ҡайһы бер компромисҡа барырға тәҡдим итәләр. "Анкориджда мин тәҡдим ителгән компромистар менән риза булыуыбыҙҙы әйттем. Нимәнелер кире ҡағабыҙ, тип әйтеү дөрөҫ түгел", - тине Президент. Рәсәй низағты былтыр июндә тәҡдим иткән принциптар нигеҙендә тыныс юл менән тамамларға әҙер.

• "Геройҙар ваҡыты" федераль кадрҙар программаһына ингән Махсус хәрби операция яугирҙары ҙур потенциалға эйә. Программа эшләй һәм үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәтте.

***МХО хәлдәренә байҡау яһағас, Президент, килгән мөрәжәғәттәргә яуап бирә башлар алдынан, ил иҡтисады торошона туҡталды:*** Эске тулайым продукттың үҫеше быйыл 1 процент тәшкил иткән. Өс йыл эсендә дөйөм үҫеш - 9,7, ә Европа илдәрендә 3,1 процент булған.

• Йыл аҙағына инфляция 5,7-5,8 процентҡа тиклем төшөүе ихтимал. Бюджет дефицитының өс йыллыҡ күрһәткесе 1,5 проценттан артмаҫҡа тейеш.

• Эшһеҙлек кимәле, былай ҙа түбән булһа ла, тағы ла 2,2 процентҡа кәмегән. Ҡулға алған эш хаҡы үҫә, бер йылда ул, инфляцияны алып ташлап, 4,5 процентҡа артҡан.

• Бюджеттың баланслы булыуына өлгәшеү бурысы ҡуйыла. Уға өҫтәлгән хаҡҡа һалымды (НДС-ты) 22 процентҡа тиклем арттырыу ярҙамында өлгәшеү бурысы тора. Һалым йөкләмәһе артҡанда, ғәҙәттә, уны түләүҙән ситләшергә ынтылыу күҙәтелә. Быны булдырмау өсөн иҡтисадтың "күләгәгә" китеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

***Демография тураһында:*** Билдәләнгән мохтажлыҡ күрһәткесенән саҡ ҡына тайпылышҡа бәйле күп балалыларға дәүләт ярҙамы сараларын тәғәйенләмәү осраҡтары - дөрөҫ түгел.

• Баланы ҡарау буйынса пособиеларҙы 3 йәшкә тиклем оҙайтыу бюджетҡа бәйле. Министрҙар Кабинетына был мәсьәләне киләсәктә хәл итеү тураһында уйларға кәрәк.

• Рәсәйҙә тыуым коэффициентын 1,4-тән 2-гә тиклем күтәрергә кәрәк. Илдә бер ҡатынға кәмендә ике бала булырға тейеш. Ҡайһы бер төбәктәрҙә тыуымды көйләүгә һуңғы бер нисә йылда 75 миллиард һум аҡса бүленгән, дөйөм алғанда, 25 төбәктә ыңғай демографик динамика күҙәтелә.

• 2026 йылдың 1 ғинуарынан балалы ғаиләләргә яңы ярҙам төрө индерелә. Түләнгән 13 процентлы һалымдың 7 проценты ғаиләгә кире ҡайтарыла.

***Башҡортостан тәжрибәһе файҙаланыласаҡ:*** "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисы Ләйсән Закирова Тажикстанда индустриаль парк булдырыуҙа Башҡортостандың халыҡ-ара хеҙмәттәшлеге һәм тәжрибәһе тураһында һорау бирҙе. "Хәҙер Тажикстанда Рәсәй - Тажикстан индустриаль паркы булдырыла. Рәсәй яғынан был проекттың операторы булып Башҡортостан сығыш яһай. Беҙ бер нисә йыл инде Мысырҙа, Нил зонаһында, ошондай структура менән шөғөлләнәбеҙ. Унда бик яҡшы майҙансыҡ бар. Беҙҙең Хөкүмәт, Сәнәғәт министрлығы һәм Мысырҙағы коллегаларыбыҙ, дуҫтарыбыҙ быға ҙур иғтибар бүлә. Был, минеңсә, Рәсәй өсөн дә, Мысыр өсөн дә етди иҡтисади һөҙөмтәләргә килтерергә тейеш. Беҙ башҡа бер нисә партнер-дәүләттәрҙә ошондай проекттарҙы ҡарайбыҙ. Һәм, һис шикһеҙ, Башҡортостан тәжрибәһе файҙаланыласаҡ", - тип яуап бирҙе һорауға Владимир Путин.

**Шулай итеп,** тура эфирҙа бирелгән һорауҙар дәүләт башлығының киләһе быуындарға теләге, мобиль интернетты сикләү, Президенттың эш режимы, сит илдәр етәкселәре менән мөнәсәбәттәре һәм башҡа бик күп темаларға ҡағылды. 200 йылдан һуң илдең киләсәге тураһында күҙаллап, Президент: "Илебеҙ юғары белемле һәм юғары технологиялы булыр һәм технологиялар ярҙамында алдында торған бөтә бурыстарҙы хәл итер, тыныслыҡ һәм именлек шарттарында йәшәр, тип уйлайым", - тине. Һөйләшеү Ҡаҙанға тиклем тиҙ йөрөшлө экспресс-поезд ебәреүгә ҡағылышлы Татарстан журналисына яуап менән тамамланды. "Хәҙер проект эштәре бара. Улар Мәскәү - Петербург линияһына ҡағыла. Әлбиттә, Мәскәү - Ҡаҙан йүнәлеше лә ғәмәлгә ашырыласаҡ", - тине Владимир Путин.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Рәсәй Президенты менән тура бәйләнеш ваҡытында һуңғы йылдарҙа халыҡ өсөн тағы бер афәткә әйләнгән мутлашыу тураһында ла һорау булды. Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, мутлашыу менән бәйле енәйәттәр һаны быйыл - 7 процентҡа, ә зыян 33 процентҡа кәмегән. "Кем генә, ниндәй тауыш менән генә телефондан шылтыратмаһын, аҡса тураһында һүҙ сыҡҡан ыңғай, шунда уҡ трубканы һалығыҙ. Аҡсаға йә мөлкәткә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе бер кем менән дә телефон аша тикшермәгеҙ", - тип кәңәш бирҙе В. Путин..

✔ 2025 йылдың 19 декабрендә Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы йылына 16 процентҡа тиклем түбәнәйтергә ҡарар итте. Үҙәк банктың рәсми белдереүенән күренеүенсә, иҡтисад баланслы үҫеш траекторияһына кире ҡайта. Ноябрҙә хаҡтарҙың артыу күрһәткестәре кәмене. Кредит әүҙемлеге юғары булып ҡала. Үҙәк банктың фаразы буйынса, 2026 йылдың аҙағына инфляция йәйлап 4-5 процентҡа тиклем төшөргә тейеш.

✔ Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Дөрөҫлөк. Яуаплылыҡ. Ҡаһарманлыҡ" премияһының әһәмиәте хаҡында һөйләне. "Был төп конкурс була тип һөйләштек, һәр хәлдә, уны абруйлы итергә ынтылабыҙ, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Йыл һайын иң талантлы, иң яуаплы журналистарҙы бүләкләйбеҙ. Йылъяҙма алып барырға һәм журналистарҙың ошондай ҡатмарлы төрлө бурыстарҙы үтәүе тураһында һөйләргә кәрәк".

✔ Краснокама районы хакимиәте етәксеһе Алексей Горбачев "Йәштәр ваҡыты" Бөтә Рәсәй премияһының 10 финалсы иҫәбенә инде. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һөйләне. Билдәле булыуынса, яҡташыбыҙ Грозный, Екатеринбург, Пермь һәм илдең башҡа ҙур ҡалалары мэрҙары менән бер рәттән "Йәштәр лидеры" номинацияһында иң яҡшыларҙың береһе тип танылды.

✔ Республиканың хәрби комиссариаты сираттағы ялған мәғлүмәтте кире ҡаҡты. Башҡортостанда бер нисә предприятие директоры республика хәрби комиссарының запаста булған граждандарҙың исемлеген бирергә тигән күрһәтмәһе булған хат алған. Башҡортостандың хәрби комиссариатында билдәләүҙәренсә, был хат ялған, бындай номер менән бер ниндәй ҙә хат ебәрелмәне, тип, тип хәбәр итте Башҡортостандың хәрби комиссары полковник Михаил Блажевич.

✔ Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы эшкә алыу өсөн квота билдәләү тураһында" закон ҡабул итте. "Закон Махсус хәрби операция зонаһында бурыстарҙы үтәгәндән һуң өйҙәренә ҡайтҡан хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә урынлаштырыуға булышлыҡ итергә тейеш", - ти Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ДЕПУТАТТАРҒА РӘХМӘТ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышының 28-се пленар ултырышында депутаттарға конструктив һәм яйға һалынған эш өсөн рәхмәт белдерҙе.**

"Башҡортостандың депутаттар корпусы республика ҡануниәтсеһе генә түгел, федераль хоҡуҡи көн тәртибен формалаштырыуҙа ҡатнашыусы булараҡ үҙенең статусын нығыта. Быйыл беҙҙең 17 закон сығарыу башланғысы Закон сығарыусылар советына ебәрелде. 15 федераль закон проекты - Дәүләт Думаһына. 2025 йылдың ике сессияһында Дәүләт Йыйылышы 222 закон проектын ҡараны, уларҙың 151-е закон статусын алды. Быйыл Дәүләт Йыйылышы үҙенең 30 йыллығын билдәләне, - тип иҫкә төшөрҙө республика етәксеһе. - Был юбилей - республика тарихында мөһим этап, Башҡортостандың төп закондар сығарыу органы эшенең абруйын һәм сифатын раҫлау. "10 айҙан һуң, 2026 йылдың сентябрендә, 9-сы саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаттарын, шулай уҡ 6-сы саҡырылыш Өфө ҡала Советы депутаттарын һайлау була. Ошо мөһим сәйәси ваҡиғаларға әҙерлек ҡатмарлы шарттарҙа алып барыла. Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн барыһын да эшләрбеҙ", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

# ЯҢЫ БИНАЛА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды филиалының Совет урамында урынлашҡан яңы бинаһында булды. Объектты асыуҙа Рәсәйҙең оборона министры урынбаҫары, "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды рәйесе Анна Цивилева ла ҡатнашты.**

Майҙаны 515 квадрат метрлыҡ бинала көтөү зонаһы, белгестәр, шул иҫәптән психолог һәм юрист кабинеттары, архив һәм техник реабилитация саралары өлгәләре бүлмәһе урынлашҡан. Бында ДНК анализдарын алыу бүлмәһе, шулай уҡ Рәсәй Оборона министрлығының Хәрби-социаль үҙәге белгестәренең ғәмәлдәге МХО яугирҙарын ҡабул итеү өсөн кинлек бар. Ингән ерҙә пандустар, инвалидтар өсөн парковка урындары эшләнгән. Филиалдың конференциялар залында Радий Хәбиров МХО ветерандары менән осрашты һәм уларға генерал Шайморатов миҙалдары, шулай уҡ инвалид хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн ҡул менән идара ителгән биш автомобиль асҡысы тапшырҙы. "Яңы бинаның урыны уңышлы, эргәлә генә Совет майҙаны, Рәсәй Геройы Миңлегәле Шайморатов һәйкәле. Ир-егеттәребеҙ ошо майҙандан Махсус хәрби операцияға китте, - тине Радий Хәбиров. - Яугирҙар үҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе бер урында хәл итергә мөмкин. Был бик мөһим. Ә муниципалитеттарҙа беҙ МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм ветерандарға ярҙам үҙәктәрен асабыҙ. Әлегә улар 10, әммә эште дауам итәбеҙ".

# ЭШ ХАҠЫНА ӨҪТӘМӘ

**Башҡортостан Башлығы башланғысы менән 2024 йылда республиканың полилингваль мәктәптәре хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡына 20 процент күләмендә өҫтәмә түләү индерелде.**

Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев хәбәр итте. Шулай уҡ, уның һүҙҙәренсә, 2023 йылдан алып Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең иң яҡшы башҡорт һәм рус теле, әҙәбиәте уҡытыусыларына билелгән аҡсалата дәртләндереү күләме 50-нән 100 меңгә тиклем арттырылды. Республика полилингваль мәктәптәренең 20 педагогы һәм 20 туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы 50 мең һум аҡса алыусылар иҫәбенә индерелде. Өс йыл эсендә полилингваль мәктәптәрҙең 55 уҡытыусыһы аҡсалата дәртләндереүгә лайыҡ булды. Бынан тыш, йыл һайын полилингваль мәктәптәрҙең етәкселәре һәм уҡытыусылары тәжрибә уртаҡлашыу өсөн башҡа төбәктәргә бара. Әйткәндәй, Башҡортостанда бөтәһе 11 полилингваль мәктәп эшләй. Башҡортостанда 2030 йылға тиклем тағы ла биш полилингваль мәктәп асырға планлаштырыла.

# ҠЫШ БАБАЙ ТИРМӘҺЕНӘ...

**Ишембай районының "Торатау" этнокомплексында Ҡыш бабай тирмәһе асылды.**



Этнокомплекс ҡунаҡтары 11 ғинуарға тиклем башҡорт Яңы йыл тылсымсыһы менән осраша, шулай уҡ ҡышҡы уйындарҙа ҡатнаша ала, тип хәбәр итә "Торатау" геопаркының матбуғат хеҙмәте. Байрам программаһында: урамда шыршы янында яңы йыл программаһы, байрам концерты, әйлән-бәйлән, оҫталыҡ дәрестәре, уҡтан атыу, ҡаргиҙәрҙә, бананда, атта һыбай йөрөү, сана шыуыу. Сәғәт 5-тә шыршы янында киске байрам программаһы башлана. Ҡунаҡтар Ҡыш бабай һәм уның ейәнсәре Ҡарһылыу менән ҡупшы шыршы тирәләй әйлән-бәйлән уйнай, санала шыуа, ҡаргиҙәрҙә һәм атта йөрөй ала. Байрамса биҙәлгән тирмәлә балаларҙың да, өлкәндәрҙең дә Башҡортостандың төп Яңы йыл тылсымсыһы менән яҡынданыраҡ аралашыу, шиғыр һөйләү, бейеү һәм фотоға төшөү мөмкинлеге бар.

Башҡорт фольклорында Ҡыш Бабай - һыуыҡты көүҙәләндергән ҡышҡы персонаж. Ейәнсәренең исеме Ҡарһылыу.

# БҮЛӘК ҺОРАҒАН

**Башҡортостандан Әмир Билалов "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" программаһы редакцияһына мөрәжәғәт иткән.**

"Мин "Теләктәр шыршыһы"на яҙырға теләгәйнем, әммә өлгөрмәнем. Шуға күрә туранан-тура Владимир Путинға мөрәжәғәт итергә булдым һәм ҡышҡы балыҡ тотоу өсөн бырау, спиннинг һораным, сөнки мин балыҡ тоторға яратам. Башлыса мин Белорет районының Сермән ауылында, ә атайым менән Әбйәлил районының Ташбулат ауылында балыҡ тотам", - ти Әмир. Уҡыусының мөрәжәғәтен Халыҡ фронты вәкилдәре яуапһыҙ ҡалдырмаған. Улар малайҙың хыялын боймоға ашырған: ҡышҡыһын балыҡ тотоу өсөн бырау һәм спиннинг бүләк иткән. Әмир Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатында белем ала. Ул валторнала уйнай, китап уҡырға ярата.

ҠЫҪҠАСА

# КИЛӘҺЕ ЙЫЛ ҠАҘНАҺЫ...

**Етенсе саҡырылыш республика Дәүләт Йыйылышының 28-се пленар ултырышында депутаттар икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа киләһе өс йылға Башҡортостан бюджетын ҡабул итте.** Башҡортостандың финанс министры вазифаһын башҡарыусы Светлана Малинская һүҙҙәренсә, беренсе уҡыу менән сағыштырғанда республиканың 2026 йылға бюджетының килем һәм сығым өлөшө 2,1 миллиард һумға артҡан. Был федераль бюджеттан аҡсаны арттырыу (түләүһеҙ керемдәр) һәм нефть продукттарына акцизлар буйынса юғарыраҡ прогноз иҫәбенә мөмкин булды. Башҡортостан бюджетының килеме - 316,2 миллиард һум, сығымы 338,7 миллиард һум, дефицит 22,5 миллиард һум кимәлендә планлаштырыла. Светлана Малинская билдәләүенсә, милли иҡтисадҡа, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа, мәғарифҡа, һаулыҡ һаҡлауға һәм социаль өлкәгә сығымдар арта.

✓ **Башҡортостандан 120 бала Мәскәүҙә Кремль шыршыһында ҡатнаша.** "Башҡортостандан илебеҙҙең баш ҡалаһына яңы йыл байрамдарында ҡатнашыу өсөн ҙур делегация - 120 бала һәм 19 оҙатыусы бара. Уларҙың күбеһе - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары", - тип хәбәр иттеләр республика Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Шулай уҡ ошо көндәрҙә республиканан 20 бала Түбәнге Новгородҡа Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле шыршыһына юллана, тип өҫтәнеләр министрлыҡта. Башҡортостан балаларының сәфәрен ойоштороу мәсьәләләре менән республика Башлығы хакимиәте шөғөлләнә. Быйыл Мәскәү Кремлендә йәш ҡунаҡтарҙы "Заветные Куранты" спектакле - хыялдар, дуҫлыҡ һәм ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу тураһында матур әкиәт көтә.

✓ **Респиратор инфекциялар һәм грипп менән ауырыусылар күбәйә. Уҙған аҙнала республикала ОРВИ йоҡтороуҙың 29 мең осрағы теркәлгән, Өфөлә генә 12 068 осраҡ.** Сирлеләрҙең 52 проценты - 14 йәшкә тиклемге балалар. Һалҡын тейҙереүселәрҙең артыуына бәйле, Өфөлә 15 мәктәптең 33 класы карантинға ябылған. "Дүрт аҙна инде лабораторияла A H1N1 киҙеүе вирусы асыҡлана, әммә Гонконг киҙеүе өҫтөнлөк итә. Шулай ҙа төп массаны риновирустар, парагрипп, пневмовирустар һәм COVID-19 ҡуҙғытыусылары тәшкил итә", - тип билдәләне мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә Роспотребнадзорҙың республика буйынса етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Гонконг киҙеүенең үҙенсәлектәре: температура 40 градусҡа тиклем күтәрелә, тән һыҙлай, баш ауырта, ҡоҫтора, эс китә. Сирленең хәле насарлана.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2025 йылда Башҡортостанда 12 милли проект сиктәрендә 42 федераль проект өҫтөндә эш алып барылған. Был маҡсатҡа 50 миллиард һум йүнәлтелгән, шунаң 35,6 миллиарды - федераль аҡса. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Премьер-министр урынбаҫары - республика Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Азамат Абдрахманов хәбәр итте. "Милли проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа муниципалитеттар әүҙем ҡатнаша. Урындарҙа биләмәләр төҙөкләндерелә, белем биреү учреждениелары ремонтлана", - тине ул.

✓Республиканың Йәмәғәт палатаһы ултырышында Ынйы Әхмәҙуллина ижтимағи ойошманың яңы рәйесе итеп һайланғайны. Йәмәғәт палатаһының яңы етәксеһе менән Хөкүмәт ағзаларын Башҡортостан Башлығы дүшәмбелә үткән оператив кәңәшмәлә таныштырҙы. "Һеҙ барығыҙ ҙа Ынйы Рәүил ҡыҙын беләһегеҙ. Ул мәктәп уҡыусыларын туҡландырыу өлкәһендә күп эшләй. Йәмәғәт палатаһын да шулай ихлас етәкләп алып китер, тип ышанам", - тине Радий Хәбиров.

✓Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары һигеҙенсе саҡырылыш Йәштәр палатаһы ағзалары исемлеген раҫланы. Улар - МХО-ла ҡатнашыусы Алмаз Хөсәйенов, Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллеге бүлеге начальнигы Дмитрий Коннов, Республика Мәшғүллек үҙәгенең йәштәр менән эшләү бүлеге начальнигы урынбаҫары Влада Сәйфуллина, йырсы Заһир Ғәлиәкбәров, юғары уҡыу йорттары студенттары Анна Спивак, Арсен Ғәзизуллин, Юрий Горбачев һәм башҡалар.

✓5-11-се класс уҡыусылары "Минең геройым кем?" Бөтә Рәсәй иншалар конкурсында ҡатнаша ала. Эштәр 2025 йылдың 30 декабренә тиклем ҡабул ителә. Конкурс шарттары буйынса, герой тураһында ижади эш менән бергә уның ҡыҫҡаса биографияһын һәм портретын ҡушып ебәрергә кәрәк. Еңеүселәр 2026 йылдың мартында Мәскәүҙә Рәсәй Мәғариф министрлығында тәбрикләнә.

✓"Ғаилә" үҙәктәре һәм Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарында күп балалы ғаиләләргә Яңы йыл бүләктәре тапшырыла. Был хаҡта министрлыҡтың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итәләр. Ярҙамдың был төрө күрһәтелгәндә ғаиләнең килем кимәле иҫәпкә алынмай. 14 йәшкә тиклемге балаларға тәғәйенләнгән барлығы 19765 бүләк әҙерләнгән.

✓1 ғинуарҙан пенсиялар арта. Ул декабрҙә 80 йәше тулған оло йәштәгеләргә, шулай уҡ ошо айҙа беренсе төркөм инвалид тип табылғандарға ҡағыла. Страховка пенсияһына билдәләнгән түләү икеләтә арттырыла. Шуға ярашлы, 1 ғинуарҙан был төр пенсиялар бер юлы 9584,69 һумға арта.

✓ *Эшҡыуарҙың төп һыҙаттары - сумартлыҡ һәм шул уҡ ваҡытта байлыҡҡа ынтылыу ҙа. Әгәр эшҡыуар һалым түләмәй, хәйер-саҙаҡа бирмәй, мохтаждарға ярҙам итмәй икән, уның кәсебе йылдам алға китеүенә шик тыуа.*



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЙЫЛ ОРАНЫ БУЛҺЫН:
## изгелектәр эшләп ярышайыҡ!

(Башы 1-се биттә).

Бер саҡ бер йәш егет менән ошо темаға әңгәмә ҡорорға тура килгәйне. Уның яуабы бик тә оҡшаны миңә: "Кемгәлер ярҙам иткәне өсөн кеше аҡса һорамаһа йәки башҡа төрлө иғтибар, бүләк, хатта рәхмәт һүҙе өмөт итмәһә - шул изгелек була. Юғиһә, йыш ҡына, хатта рәхмәт тә әйтмәне, тигәнде ишетергә тура килә. Тимәк, ул ярҙамы өсөн ниҙер көткән булып сыға. Бындай әҙәмдәр рәхмәт һүҙенең ни тиклем ҙур көскә, оло мәғәнәгә эйә булғанын белмәй ҙә булһа кәрәк. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара, тип, атай-олатайҙарыбыҙ юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Ысынлап та, ябай ғына ошо һүҙҙе ишетһәң, күңел яҡтырып, донъя нурланып, еңел булып киткән һымаҡ, ошо ваҡытта ихлас әйтелгән рәхмәт ҡабул булалыр, тип уйлайым", - тигәйне ул.

Кеше мөнәсәбәттәре лә баҙар иҡтисадына күсеп барған мәлдә йәшәйбеҙ шул. Бәләкәй генә йомош өсөн дә бүләк өмөт итәбеҙ, кемдер ярҙам иткәне өсөн үҙебеҙ ҙә аҡса һонорға әҙербеҙ. Яңыраҡ күҙәткән бер ваҡиға: автобусҡа ингәндә сумкаларын мендерергә ярҙам иткән үҫмергә оло йәштәрҙәге ханым аҡса һуҙҙы. Егет эргә-тирәһендәгеләрҙең ғәжәпле ҡарашын тойһа ла, ҡағыҙ киҫәген йомарлап кеҫәһенә тыҡты. Ҡатын да, үҫмер ҙә ҡәнәғәт ҡалды, әммә иң мөһим ғәмәл башҡарылманы - рәхмәт һүҙе әйтелмәне. "Изгелектең әжере - изгелек бит, ярҙамы өсөн аҡса түләп, егетте шунан мәхрүм иттегеҙ ", - тинем. "Бирһен, бирергә ҡулымдан килә, бер түгел, ике пенсия алам. Минең рәхмәтте кеҫәһенә һала алмай бит ул", - тине ханым эре генә ҡиәфәттә.

Һәр кемебеҙҙең йыл һайын иҫке йылды оҙатҡанда, яңы йылдан яңыса йәшәй башлайым, тигән йәшерен ниәте була. Унда беҙ төрлө теләктәребеҙҙе, маҡсаттарыбыҙҙы иҫкә төшөрәбеҙ. Мәҫәлән, яңы йылдан спорт менән даими шөғөлләнәсәкмен, ваҡытымды төрлө сериалдарға бүлмәйәсәкмен йәки тренажерҙарға йөрөйәсәкмен, туғандарыма ваҡытты күберәк бүләсәкмен, һ.б. Ошондай уйҙарыбыҙ араһында яңы йылда изге эштәр күберәк ҡыласаҡмын, тигән маҡсатыбыҙ ҙа урын алһын ине.

Беҙҙең арабыҙҙа һәр беребеҙҙең йылы ҡарашына, яҡшы һүҙенә, ярҙамыбыҙға, иғтибарыбыҙға, яратыуыбыҙға мохтаждар бик күп. Бәйғәмбәребеҙ, ярҙам итер өсөн зәғифтәрҙе (ауырыуҙарҙы) эҙләп кенә йөрөгөҙ, арағыҙҙа шундайҙар булып тороуы сәбәпле, һеҙгә ярҙам да, йәшәр өсөн ризыҡ та бирелеп тора, тигән. Ул шулай уҡ, әҙәм балаһы саң бөртөгө тиклем йәки унан да кесерәк изгелек ҡылған булһа ла, ул юғалмай; кем дә кем кескәй генә насарлыҡ эшләй икән, ул да онотолмаясаҡ, уның да язаһы буласаҡ, тигән һәм кешеләргә күберәк изгелек эшләргә бойорған. "Изгелектәрҙә, хәйерле эштәрҙә бер-берегеҙ менән уҙышығыҙ, ярышып йәшәгеҙ", - тигән. Әйҙәгеҙ, шулай итәйек, изгелектәр эшләп ярышайыҡ!

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ӘЙҘӘ, ТҮЛӘ ЛӘ ТҮЛӘ!

**Ғәҙәттә, беҙ йыл ахырында түгел, ә яңы йылдан ниндәйҙер яңылыҡтар көтәбеҙ, ләкин тормош бөгөн йыш үҙгәреп тора, элекке закондар яңыса шарттарға яраҡлаштырыла, үҙгәртелә-төҙәтелә; һалым, штраф төрҙәре арта бара һәм был аңлашыла: халыҡҡа ғына түгел, ҡаҙнаға ла аҡса кәрәк - йылды буш кеҫә менән оҙатыу яраған эш түгел, уның эҙемтәһе киләсәккә айҙарҙа сағылыш алыуы бар бит, юғиһә.**

Шулай итеп, декабрҙә лә беҙ ҡайһы бер закон үҙгәрештәренә шаһит булдыҡ. Мәҫәлән, РФ торлаҡ закондарына үҙгәрештәрҙең береһе күп фатирлы йорттарҙың дөйөм милкенә контролде көсәйтеү мәсьәләһенә һәм ошо йорттарҙа йәшәүселәрҙең хоҡуҡтарына ҡағыла. Күп ҡатлы йорттарҙың архитектура йөҙөн һаҡлау маҡсатында уларҙың фасад өлөшөнә кондиционер, антенналар һәм башҡа шундай ҡорамалдарҙы йорт милексeләре йыйылышы һәм күпселек рөхсәте менән генә ҡуйырға мөмкин буласаҡ. Был шулай уҡ ҡыйыҡ аҫты сарҙаҡтарын һәм подвалдарҙы файҙаланыуға ла ҡағыла. Декабрҙән шулай уҡ цифрлы паспорт системаһын индереүҙең икенсе этабы башланды. Уның ярҙамында граждандар банктарҙа йә башҡа финанс ойошмаларында үҙ шәхестәрен таныта ала. Шул уҡ ваҡытта цифрлы паспорт әлеге документтың ҡағыҙ нөсхәһен барыбер тулыһынса алыштыра алмаясаҡ һәм ҡайһы бер осраҡтарҙа талап ителгәнсә, ҡағыҙ паспорт та кәрәк буласаҡ.

1 декабрҙән шулай уҡ автомобилдәрҙе үтилләштереү йыйымын иҫәпләүҙең яңы ҡағиҙәләре ғәмәлгә ашырылды. Был йәһәттән төп яңылыҡтарҙың береһе - шәхси файҙаланыуҙағы 160 ат көсөнән ҡеүәтлерәк двигателле машиналарға үтилләштереү йыйымы ташламаларының бөтөрөлөүе. Хәҙер бындай машина хужаларына үтиль йыйымы 1-1,5 млн һәм унан да ҡиммәтерәккә төшәсәк. Мәҫәлән, әлегә тиклем Geely Monjaro моделе өсөн 3 400 һум түләнгән булһа, 1 декабрҙән 842 000 һум сығарып һалырға тура киләсәк. Toyota RAV4 автомобиле өсөн 1 декабрҙән 2 002 000 һум һәм киләһе йылдың ғинуарынан - 2 402 400 һум; 4,4 литрлыҡ BMW X5 M өсөн декабрҙән - 3 818 000 һум, ә киләһе йылдың 1 ғинуарынан 4 581 600 һум өҫтәмә түләргә кәрәк буласаҡ. Автобаҙар белгестәре бындай хаҡтарҙан һуң яңы ҡиммәтле машиналарға һорауҙың бермә-бер кәмейәсәген күҙаллай.

1 декабрҙән алып 2026 йылдың 30 июненә тиклемге осорҙа ил сиге пункттарында Рәсәйгә инеү йәки сығып китеү ваҡытында сит ил граждандарының бармаҡ эҙҙәре өлгөләре һәм фотоһүрәттәре алып ҡалынасаҡ.

Былары инде, ярай, һәр кем мәнфәғәтенә ҡағыла торған үҙгәрештәр ҙә түгел, мәғлүмәт һәм хәбәрҙар булыу өсөн генә әйтеп кителде. Ә бына киләһе йылдың 1 ғинуарынан коммуналь хеҙмәттәргә тағы ла ҡиммәтерәк хаҡтар яҙылған квитанциялар ала башларһығыҙ, тигән хәбәр һәр кемдең яңы йыл кәйефен боҙорлоҡ булғандыр. Бер яҡтан, дөрөҫ, кемдәрҙеңдер ғәзиздәре ил һаҡлап яуҙа айҡашҡанда, яңы йыл кәйефе ҡайғыһымы... Йәшәү хаҡтары туҡтауһыҙ арта барған шарттарға күнегеп тә барыла инде, тик шулай ҙа коммуналь түләүҙәр өсөн, мәҫәлән, ҡарттар пенсияларының ҡап яртыһын түләй башлаһа ла ауыр хәл бит әле... Ошо йыл эсендә генә лә граждандарҙың фатир өсөн түләүҙә бурыстары 72 миллиардҡа артҡан. Ә һуңғы йылдарҙа тупланып киткән дөйөм бурыс 876,4 миллиард һумға барып баҫты, тип яҙа "Известия" гәзите. Эксперттар билдәләүенсә, был йәһәттән тарифтар үҫешен тотҡарлау ҙа хатта ярҙам итмәйә-

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЙҮНСЕЛ БУЛАЙЫҠ!

**Совет осоронда тыйылған шәхси йүнселлеккә үткән быуаттың 90-сы йылдар башында яңынан юл асылды. Ҙур-ҙур сумкалар, төйөнсөктәр менән тәүге эшҡыуарҙар Мәскәүҙән, хатта Төркиә кеүек сит илдәрҙән әйбер ташыны, ҡытлыҡ заманда халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерҙе, үҙҙәре өсөн тәүге капитал тупланы. Башлап юл ярыусыларға еңел тура килмәне. Хәүефле һаналды был шөғөл. Таланып, аҡсаһыҙ ҡалғандар, башын һалғандар ҙа булманы түгел. Бөтә ауырлыҡтарҙы йырып сыҡҡандар бөгөнгө бәҫле эшҡыуарҙарҙың төп өлөшөн тәшкил итә.**

Шәхси кәсепкә, эшҡыуарлыҡҡа тотоноу бер ҡасан да һуң түгел. Мин үҙем был юлға 2000 йылдар башында баҫтым. Уның өсөн ниндәй сифаттар кәрәк һуң?

Иң элек - тәүәккәллек. Шунан - яуаплылыҡ. Үҙ эшен асырға йөрьәт иткән кеше үҙе, ғаиләһе, ҡул аҫтындағы эшселәре, дәүләт (һалым һәм башҡа түләүҙәр мәсьәләһенә ҡағылышлы), йәмғиәт (әйтәйек, экология ҡанундарын боҙмау йәһәтенән) алдында яуаплы.

Ниндәй генә шарттарҙа ла эшҡыуар күңел тыныслығын юғалтырға, төшөнкөлөккә бирелергә тейеш түгел. Уны көн оҙонона көсөргәнешкә дусар иткән эреле-ваҡлы ваҡиғалар һағалап тора. Улар йоғонтоһона бирелә икән, ауырлыҡтарҙан арына алмаясаҡ. Бер мәл, тамам хәлһеҙләнеп, һаулығын юғалтып, эшен ябырға мәжбүр булыуы ихтимал.

Ниндәйҙер тауар етештереү, һатыу ойоштороу өсөн илһам, дәрт (энтузиазм) талап ителә. Күңел биреп, ихласлап эшләгәндә генә уңышҡа өмөт итергә мөмкин.

Эшҡыуарлыҡ менән уңышлы шөғөлләнер өсөн маҡсат ҡуйырға һәм унан тайпылмай, бер йүнәлештә генә торорға кәрәк. Йыйнаҡ, һәр йәһәттән теүәл булыу еңел бирелмәй, тип баҫым яһап әйтер инем.

Эшҡыуарҙың төп һыҙаттары - сумартлыҡ һәм шул уҡ ваҡытта байлыҡҡа ынтылыу ҙа. Әгәр эшҡыуар, тик үҙ кеҫәмә эшләйем, тип уйлай, һалым түләмәй, хәйер-саҙаҡа бирмәй, мохтаждарға ярҙам итмәй икән, уның кәсебе йылдам алға китеүенә шик тыуа. Алам тиһәң, иң элек бирергә кәрәк!

Һанап үтелгән сифаттарға бөтә кеше лә эйә түгел, әлбиттә. Шуға ла эшҡыуарлыҡ һәр кемдең ҡулынан килмәй. Дөйөм халыҡтың тик 6 проценты ғына был өлкәлә эшләй, уңыштарға өлгәшә ала. Мәҫәлән, 600 кеше йәшәгән уртаса ауылды алһаҡ, унда 36 эшҡыуар булыуы ихтимал. Был аҙ ҙа түгел, әлбиттә. Уйлап ҡарағыҙ, бәлки, һеҙ шул алты процент эсенә ингән кешеләргә хас үрҙә әйтелгән сифаттарға эйәһегеҙҙер. Улай икән, Яңы йылдан тормошоғоҙҙо үҙгәртә алаһығыҙ!

Әйҙәгеҙ, йүнселдәр рәтенә дәррәү баҫайыҡ! Тик бер ҡасан да, бер ниндәй шарттарҙа ла, ҙур байлыҡ хаҡына ла үҙ асылыбыҙҙы юғалтмайыҡ.

**Айбулат УРАЗБАХТИН,**
**эшҡыуар.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2025 йылдың ноябрендә Башҡортостан халҡы банктарҙан 16,2 миллиард һумға 4,13 мең ипотека кредиты юллаған. Ипотеканың уртаса хаҡы 3,9 миллион һум самаһы булған, кредиттың уртаса ваҡыты - 23 йылдан саҡ ҡына күберәк. 2024 йылдың ноябре менән сағыштырғанда, банктар аша фатир алыу күләме ике тапҡырға тиерлек артҡан (+97 процент). Бер йыл элек кредит ставкаһы 21 процент булһа, уҙған ноябрҙә - 16,5.

✓Бөрйән районында бүреләрҙең ауылдарға яҡынлауы күҙәтелә. Күптән түгел Мәһәҙей ауылында сылбырҙа бәйле торған этте ашап китеүҙәре тураһында яҙҙы киң мәғлүмәт саралары. Хакимиәт башлығы Рәмил Абдуллин хәбәр итеүенсә, Экология министрлығы 14 ғинуарға тиклем түләүһеҙ бүре аулауға рөхсәт биргән. Һунар лицензияһы булған осраҡта, һәр атып алынған йәнлек өсөн 2500 - 3000 һум күләмендә премия түләнәсәк.

✓Ишембай районының Яңы Әптек ауылында яңы амбулатория файҙаланыуға тапшырылды. Ул Яңы Әптек, Һайран, Арлар, Биксән, Кесе Мәксүт, Әптек һәм башҡа ауылдарҙа йәшәгән ике меңдән ашыу кешене хеҙмәтләндерәсәк. Ә Баймаҡ районының Юлыҡ ауылында ошо көндәрҙә эшләй башлаған дөйөм практика табибы офисы медицина ярҙамын Ишбирҙе, Йомаш, Йылым, Бөрйән Йылға, Крепостной Йылайыр ауылдары халҡына - барлығы 1500 кешегә күрһәтә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәлә поликлиникалар төҙөлөшөн йыл аҙағынаса тамамларға ҡушты. Объекттарҙы тантаналы шарттарҙа асыу мөһим, тип билдәләне ул. "Әлеге ваҡытҡа төҙөлөш тамамланған поликлиникаларҙы асырға кәрәк. Кешеләр көтә. Алты поликлиниканы файҙаланыуға тапшырыу - республиканың һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә ҙур ваҡиға", - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров республиканың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Роберт Иштуковҡа.

✓"Башинформ" мәғлүмәт агентлығына яңы топ-менеджер итеп Рауил Вилсор улы Зариповты тәғәйенләнеләр. Уның менән коллективты Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Искәндәр Әхмәтвәлиев һәм Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Максим Ульчев таныштырҙы. Рауил Зарипов 20 йылдан ашыу технология, медиа һәм идара итеү өлкәһе менән шөғөлләнә. Ҙур коллектив менән етәкселек итеү тәжрибәһенә эйә. 2000-се йылдар башында ул Өфөлә тәүге веб-студияларҙың береһен ойоштора, ТВ һәм Radio Manhattan FM-радиостанцияһын аса, "Российская газета" баҫмаһының Өфө филиалының беренсе директоры була.

сәк, сөнки коммуналь түләүҙәр күләме рәсәйҙәр килеменә ҡарағанда шәберәк арта бара. Дәүләт Думаһы депутаты Роман Лябихов әйтеүенсә, коммуналь хеҙмәттәргә сығымдар ғаилә килеменең 10 процентынан да ашып китергә тейеш түгел дә бит... Индексация йылылыҡ менән тәьмин итеүҙән алып, сүп-сар сығарыуға тиклем ҡағыласаҡ. Яңы йылдың 1 ғинуарынан тарифтар 1,7 процентҡа, ә 1 октябрҙән төрлө төбәктәрҙә төрлөсә: 8-ҙән алып урыны менән 22 процентҡа тиклем арттырыласаҡ.

Әбына Башҡортостанда киләһе йылдың октябренән тариф 10,7 процент кимәлендә билдәләнгән, ләкин айырым муниципалитеттарҙа ул индекстан 2,1 процентҡа тирбәлеүе мөмкин. Шуныһы ла мөһим: беҙ түләгән аҡсалар ҡайҙа китеп тора һәм нисек файҙаланыла һуң? Был йәһәттән ресурс хужалары адресына һәр ваҡыт тәнҡит һүҙҙәре ишетергә тура килә. Эксперт, Рәсәй Торлаҡ союзы рәйесе Константин Крохин фекеренсә, аҡсаларҙың коммуналь инфраструктураны модернизациялауға тотонолмауы билдәле, сөнки быныҙ өсөн тейешле механизм юҡ. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар ұҙаллы рәүештә аҡсаларҙы үсеш һәм системаны яңыртыуға инвестициялай алмай, бының өсөн сумма ла етерлек түгел. Торлаҡ-коммуналь инфраструктураһын яңыртыу өсөн аҡсаны йә инвесторҙар, йә дәүләт бирә. Былтыр, мәҫәлән, ошо маҡсаттарҙа инфраструктураны яңыртыу программаһы сиктәрендә дәүләт (1,5 трлн) һәм инвесторҙар (3 трлн) тарафынан аҡса күсереү хаҡында һүҙ булып алһа ла, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһы бер тин дә ала алманы, ти Крохин. Иҫкергән торбалар шартламаһын, ваҡытында ремонт эштәре башҡарылһын, граждандарға сифатлы хеҙмәт күрһәтелһен өсөн ҡулланыусы икеләтә түләргә тейеш булып сыға түгелме? Хеҙмәттәрҙән файҙаланған өсөн дә, коммуналь предприятиелар банкротҡа ҡалып, ябылып бөтмәһен өсөн дә.

Уның ҡарауы, йылылыҡ, электр энергияһы, һыу һәм газ менән тәьмин итеүсе ресурс компаниялары иркенгә сыкты: ҡулланыусы түләгән аҡсаларҙың күпселек өлөшөн улар ҡайырып ала. Тарифтар индексацияһы, дөрөҫөн генә әйткәндә, уларҙың аппетитына бәйле. Мәҫәлән, киләһе йыл ил буйынса электр энергияһына тарифтың 11,3 процентҡа артыуы көтөлә, был башҡа төр ресурстар араһында иң юғары кимәл буласаҡ. Ә бит йылылыҡ һәм һыу менән тәьмин итеү тарифтары тап ана шул электр энергияһы менән газ хаҡтарына туранан-тура бәйле. Газға ла хаҡ артасаҡ: зәңгәр яғыулыҡ киләһе йыл 9,6 процентҡа ҡиммәтләнә. Шул уҡ ваҡытта матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларында билдәләнеүенсә, Рәсәй G20 илдәре араһында иң арзан электр энергияһы өс ил иҫәбендә тип танылды, тик бынан ҡулланыусыға бер ниндәй ҙә файҙа юҡ: уның кеҫәһе йоҡара ғына барасаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# КИЕВ КҮГЕНДӘ - РӘСӘЙ ФЛАГЫ

**Ишеттегеҙме, күрҙегеҙме әле был видеоматериалды: Киев күгендә - Рәсәй флагы елберҙәне! 20 декабрҙә билдәһеҙ кешеләр Рәсәй флагын таҡҡан квадрокоптер осорған. РФ Сит ил эштәре министрлығының рәсми вәкиле Мария Захарова уйынлы-ысынлы был фактты тап ошо көн билдәләнеүсе Рәсәй Хәүефһеҙлек советы хеҙмәткәрҙәре көнө менән бәйләп, уларҙы байрам менән ҡотланы һәм, Украинала был байрамды киң билдәләнеләр, тип шаяртты.**

Ләкин ҡотлау өсөн сәбәптәре лә бар ине шул: РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, 20 декабрҙә Рәсәй ғәскәрҙәренең төркөм подразделениелары Сумы өлкәһенең Высокое һәм Донецк Халыҡ Республикаһының Светлое тораҡ пункттарын яуланы. Быларҙың тәүгеһе бәләкәй ауыл булһа, уның ҡарауы, Мирноград ҡала советы составындағы Светлое ауылында мендән ашыу кеше йәшәй һәм ул Димитров (Мирноград) ҡалаһына яҡында ғына ята, ә унда ошо көнгә тиклем Украина Ҡоралды көстәренең бер нисә батальоны ҡамауҙа ҡалып килә, уларҙың тәьминәт юлдары тулыһынса киҫелгән.

РФ Верховный Баш командующийының "Тура бәйләнеш"тә әйткән һүҙҙәренә - ҡеүәт: Рәсәй армияһы фронттың бөтөн һыҙығы буйынса ла стратегик өҫтөнлөк менән файҙалана. Ни хәл итмәк: Украинаның мөҙҙәте сыҡҡан президенты Зеленский ҙа телгә килә башланы, бугай. "Бөгөн килешеү юҡ әле", - тиһә лә ул: "Килешеү лидерҙар документҡа ҡул ҡуйып, һуғыш туҡталһа ғына буласаҡ", - ти, ләкин һаман да үҙ "туҡһанын" ҡабатлауҙан туҡтамай. Киев режимы башлығы Украина Ҡоралды көстәрен Донбастан сығарыуҙың ике яҡлы барыуын шарт итеп ҡуя: йәнәһе, улар 5 саҡрымға сигенә икән, Рәсәй ғәскәре лә шунса уҡ территорияны ҡалдырырға тейеш. Беренсенән, Рәсәйгә ҡарата ниндәйҙер шарттар белдерергә батырсылыҡ итеүсе мөҙҙәте сыҡҡан был башлыҡтың вәкәләте үә хоҡуғы бар микән һуң әле?

Икенсенән, "Тура бәйләнеш"тә Владимир Путиндың тағы бер тапҡыр ҡабатлап китеүенсә, беҙ ҙә конфликтты уның тәү сәбәптәрен юҡ итеү шарттарында тыныс юл менән тамамларға әҙербеҙ. Әммә Харьков өлкәһе Купянск ҡалаһы янында енелгәндән һуң да Украина Ҡоралды көстәре командованиеһы был йүнәлештә контрһөжүмде туҡтатмай һәм был ергә сит ил ялланыусыларын туплай. Ә беҙҙең егеттәр үҙ эштәрен яҡшы белә һәм фәҡәт алға ынтыла. РФ Президенты "Тура бәйләнеш"тә Украина Ҡоралды көстәренең, асылда, стратегик резервтары ҡалмауы хаҡында әйтеп киткәйне. Бынан сығып, Владимир Путин Киевтың конфликтты көйләүгә аҙым яһаясағына ышаныс белдерҙе.

Үткән аҙнаның күңелгә ятышлы тағы бер хәбәре - Европа лидерҙарының Рәсәй активтарын Киев режимын финанслауға йүнәлтеү ниәтенән баш тартыуы. Был мәсьәлә буйынса бәхәс Евросоюзды ике лагерға бүлде. Бельгия премьер-министры Барт Де Вевер Рәсәй аҡсаһын билдәһеҙ ваҡытҡа тотҡарлау яҡлы булһа ла, уны Украинаға күсереү планының хәүефлеген аңлай һәм был ниәткә ҡаршы сыҡты, ул хатта Евросоюздың юғары башҡарма власть органы менән судлашырға лә әҙер булыуы хаҡында белдерҙе. Ә бына Италия премьеры Джордж Мелони менән Франция президенты Эммануэль Макрон Евросоюздың Рәсәй аҡсаларын талау планын өҙөүҙә төп ролде башҡарҙылар. Financial Times баҫмаһы яҙып сығыуынса, Макрон ҡаршы булған хәлдә лә күберәк өндәшмәй ултырҙы. Уның ҡарауы, итальянка Мелониҙың тауышы хәл иткес көскә эйә булды һәм Рәсәй аҡсаһын тотоноу кәйефен үҙгәртеп ебәреүгә өлгәште. Шул арҡала Мелониҙы хатта "үлтереүсе" тип тә атанылар - Евросоюз планын, әлбиттә. Һеҙөмтәлә 19 декабрҙә, 17 сәғәт буйы бәхәсләшкәндән һуң, Евросоюз (ЕС) илдәре етәкселәре Украинаны финанслауға 2026-2027 йылдарға үҙҙәренең дөйөм бюджетынан 90 млрд евро күсерергә ҡарар итте һәм Рәсәй активтарын файҙаланыуҙан баш тартты.

Шулай итеп, Евросоюз лидерҙарының талау планы был юлы барып сыҡманы, киреһенсә, улар үҙ илдәренең һалым түләүсе халҡын финанс ауырлығы алдына ҡуйҙы. Ләкин, Бельгия премьеры Веверҙың журналистарға белдереүенсә, ЕС барыбер Рәсәй аҡсаһын кире ҡайтарыу уйында түгел. Үткән аҙнала Үҙәк Банк, киң мәғлүмәт каналдары яҙып сығыуынса, Рәсәйҙең 193 млрд евро аҡсаһы һаҡланған Euroclear Бельгия депозитарийын Арбитраж судҡа бирҙе. Бынан тыш, Рәсәй аҡсаһын Украина файҙаһына тотоноуҙан баш тартыуына ҡарамаҫтан, Үҙәк Банк шулай уҡ активтарҙан юғалтылған килемде ҡаплатыу өсөн Европа банктарына ҡаршы ла суд юлдауы әҙерләй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ШЫРШЫЛАРҘЫ ҠЫРҠМАЙЫҠ!

**Яңыраҡ бер иптәш менән Яңы йылда өйгә ширшы ултыртыу тураһында бәхәсләшеп киттек. Икебеҙ ҙә шыршы ултыртып, матур итеп биҙәп, балаларҙы шатландырыуға ыңғай ҡараштабыҙ. Тик беребеҙ - тере шыршы, ә икенсебеҙ - уйынсыҡ, йәғни яһалма ҡупшыҡай ултыртыу яғында. Танышым, ылыҫлы ағастың хуш еҫе тын юлдары өсөн файҙалы, тип ауыҙ һыуын ҡоротһа, мин үҙемдең дәлилдәрем менән ҡаршы сығам: "Улар урманда ултырырға, үҫергә тейеш!" - тим. Шулай итеп, оҙаҡ ҡына ваҡыт уртаҡ фекергә килә алманыҡ. Ахырҙа, мин бала саҡтағы бер хәлде һөйләп бирҙем.**

Урта синыфтарҙың береһендә булғандыр, Ноғман Мусиндың "Мәңгелек урман" романын уҡып сыҡҡас, йәшел дуҫтарыбыҙға ҡарашым ҡырҡа үҙгәрҙе. Быға тиклем йыл да атайымдың хуш еҫле шыршы алып ҡайтыуын көтһәм, ул йылды был эшкә ҡаршы төштөм. Атай менән әсәйҙе өгөтләү артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырманы, ә бына кескәй туғандарымды был фекергә күндереү еңелдән булманы. Шулай ҙа әсәй үҫтергән ҙур рауза гөләң ялтыр таҫмалар менән биҙәгәс, өй буйлап гирляндалар элгәс, шыршы юҡлыҡҡа иғтибар итеүсе ҡалманы. Мин үҙемде бер шыршыны булһа ла һаҡлаусы итеп тойоп, сикһеҙ ҡыуандым. "Быйыл бер шыршы һатылмай ҡалһа, икенсе йылды уны берәүгә аҙыраҡ ҡырҡасаҡтар", - тип уйланым...

Өйләнгәс, хәҙер инде үҙем ғаилә башлығы булғас, атай һымаҡ уҡ, Яңы йыл шыршыһын үҙем хәстәрләүҙән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерәм. Әлбиттә, тере шыршы һатып алыу башҡа ла инеп сыҡмай - яһалмаһын ҡорабыҙ. Балаларҙың шыршы уттары емелдәшкәнен донъяларын онотоп ҡуҙәткәнен ҡарап торорға яратам. Улар ҙа тере шыршыларҙы һаҡлаусы булып үҫер, тигән өмөт уяна. Яңы йылда магазин шыршыларын ҡулланайыҡ, тигән саҡырыу менән мөрәжәғәт иткем килә башҡаларға ла.

**Артур ХИСМӘТУЛЛИН.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары студенттарына ҡала хакимиәте башлығы стипендиялары тапшырыла. Стипендиялар 2025-2026 уҡыу йылына тәғәйенләнгән. Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиевтың тейешле ҡарары мэрияның рәсми сайтында баҫылған. Өфөлә урынлашҡан һөнәри белем биреү ойошмаларында һәм юғары белем биреү ойошмаларында уҡыған етем, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға түләүҙәр ҡаралған, тиелә документта. Стипендиялар тәғәйенләү һәм тапшырыу өсөн ҡаланың опека һәм попечителлек идаралығы яуаплы.

✓Өфөлә өсөнсө йыл рәттән "Азимут" ҡунаҡханаһы алдында Ҡыш бабай резиденцияһы асылды. Был турала баш ҡала хакимиәтендә белдерҙеләр. Шул уҡ көндә киске сәғәт 5-тә Ленин исемендәге майҙанда ҡала шыршыһы уттарын ҡабыҙыу тантанаһы булды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр Яңы йыл геройының төп резиденцияһы 12 ғинуарға тиклем эшләне. Байрам осоронда уға бөтәһе 165 мең кеше килде.

✓Башҡортостанда Яңы йылға 573 боҙ ҡаласығы төҙөлгән. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова ошо хаҡта һөйләне. Өфөлә 18 байрам майҙансығы әҙерләнгән, уларҙың икеүһе - Ленин исемендәге майҙанда һәм "Торатау" конгресс-холы янында урынлашҡан. Һауа торошона бәйле ҡайһы бер муниципалитеттарҙа боҙ һындарын эшләү һәм ҡоймаларҙы ҡуйыу оҙаҡҡараҡ һуҙылды, эш дауам итә, тине Ирина Голованова.

✓Өфө ҡалаһында һәм Өфө районында, шулай уҡ ҙур ҡалаларҙа йәшәүселәр өсөн 4G селтәре киңәйҙе. Мобиль интернет сифаты шәхси секторҙа һәм күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәр өсөн дә яҡшырҙы. "Элемтә операторҙары төбәгебеҙҙең ҡала һәм ауылдарында үҙҙәренең селтәрен әүҙем рәүештә киңәйтә. Электрон сервистарын ҡулланыуға мөмкинлеге - бөгөнгө көндә тормошта кәрәкле мөһим әйберҙәрҙең береһе", - ти Башҡортостан дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин.

✓Өфөнөң "Ҡаланы йыйыштырыу буйынса махсус автохужалыҡ" ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса төбәк операторы өс яңы сүп-сар ташыусы машина һатып алды. Был хаҡта мэрияның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Автохужалыҡ паркын яңыртыу коммуналь хеҙмәттәрҙең эш һөҙөмтәлеген яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ

# ШАРЛАУЫҠТАР МОҢО

## Ғәҙелша

Баймаҡ районында Ирәндек ҡаяһынан ағып төшкән Төйәләҫ йылғаһындағы Ғәҙелша шарлауығы - Башҡортостанда иң бейеге. 1965 йылдан тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан ителгән һәм дәүләт тарафынан һаҡлана. Өс һикәлтәле. Уларҙың дөйөм бейеклеге, төрлө баһалар буйынса, 20 метрға тиклем етә. Беренсе ҡутәрмәһе яҫы ялғаш кеүек, бейеклеге 1,2 метрҙан артмай. Икенсе һәм өсөнсө ҡутәрмәләре 7-шәр метр бейеклектә, икеһе лә текә. Һыу ағымы йыл миҙгеленә ҡарап үҙгәрә. Яҙ көнө урғылып ята. Был ваҡытта шарлауыҡ иҫ киткес матур була. Йәй һәм көҙ айҙарында һыу сығымы кәмәй. Ҡышын туңа.

Ғәҙелшаның кинлеге лә ярайһы уҡ ҙур, шуның арҡаһында шарлауыҡ матур ғына түгел, әмәһабәт тә күренә, тирә-яҡ тәбиғәте лә һоҡландырғыс. Шарлауыҡҡа Иҫке Сибай ауылы аша шоссе юлынан барып була.

## Күперле

Күперле шарлауығы Мәләүез районындағы "Башҡортостан" милли паркында, туристар араһында киң популяр Нөгөш һыуһаҡлағысы янында, Нөгөш йылғаһы ағымы буйлап өҫтәрәк урынлашҡан. Бер нисә һикәлтәнән тора. Иң ҙурының бейеклеге яҡынса 15 метр төшкил итә, ҡалғандары бәләкәйерәк. Өҫкө һәм аҫҡы ҡутәрмәләр араһы - 100 метр самаһы.

Алыҫ түгел, тарлауыҡ өҫтөндә, карст күпере урынлашҡан. Карст арҡаһының бейеклеге яҡынса - 20, дөйөм оҙонлоғо - 35, ә аркалы өлөшө - 10 метр. Күпер элек ер аҫтынан аҡҡан Күперле шишмәһе йыуған мәмерйә урынында барлыҡҡа килгән. Күперҙән ғәжәйеп пейзаж панорамаһы асыла. Тик уның аша үтеү хәүефле һанала.

Шарлауыҡҡа барып етеүе еңел түгел, шулай ҙа унан туристар өҙөлмәй. Ғәҙәттә, күп көнлөк йәйәүле походтар менән йәки Нөгөш йылғаһы буйлап һыу сәйәхәте ваҡытында барып була.

## Атыш

Белорет районындағы ер аҫты шарлауығы. 1965 йылдан тәбиғәт ҡомартҡыһы. Ләмәҙ йылғаһының уң ярында, Елмерҙәк һырты армыттарында урынлашҡан.

Ҡаяға барып терәлгән Атыш йылғаһы артабан ер аҫтына китә һәм унда Агуй уҙған йылғаһы менән ҡушыла. Барлыҡҡа килгән һыу ташҡыны, Ләмәҙ йылғаһы кимәленән 4 м бейеклектә урынлашҡан мәмерйәнән урғылып кире ер өҫтөнә сыға. Шарлауыҡ ҙур түгел, әммә матурлығы менән туристарҙы ылыҡтыра. Йәй уртаһында уның тирә-яғы Көньяҡ Азияның джунгли уртаһындағы юғалған мөйөшкә оҡшаған.

## Күк-Ҡарауыҡ

Күк-Ҡарауыҡ шарлауығы Ишембай районы Маҡар ауылынан 7 километр ситтә урынлашҡан. Дөйөм бейеклеге 12 метрға барып етә, бер-нисә һикәлтәнән тора. Шарлауыҡты барып күреү өсөн иң яҡшы ваҡыт - яҙ айҙары, сөнки был миҙгелдә шарлауыҡ гөрләп аға, ә йәйен һыу кәмей, бәләкәй тау шишмәһе төҫөн ала.

Йылғаның һул яҡ ярында боронғо таш күпер ҡалдыҡтары бар . Был - батша заманынан ҡалған тарихи ҡомартҡы, Екатерина II заманында төҙәлгән. Юлды һәм күперҙе башҡорттар һалған тигән фараздар бар. Икенсе сығанаҡтар буйынса, уны төҙөүҙә каторжандар ҡатнашҡан.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# КЕШЕ БУЛЫП ҠАЛАЙЫҠ...

**Былтыр ауыл клубында үткән шыршы байрамында бер егет йоратының маскарадта маскаһыҙ көйө йөрөүе, аҙаҡ асыҡланыуынса, уның Кеше булып кейенеп йөрөүе хаҡында яҙып үткәйнем. Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, ысынлап та, беҙ кем генә булып кейенмәйбеҙ ҙә, тик кеше булырға ғына онотабыҙ. Был мәҡәлә гәзиттә баҫылып, уҡыусыларҙың иғтибарына лайыҡ булғайны.**

...Батшаның ожмах баҡсаһына тиң биләмәһенә янылыш барып ингән бер фәҡир ныҡ арыуҙан һәм асығыуҙан талсығып, ҡаты йоҡоға тала. Төшөндә ул үҙен ошо биләмәнең хужаһы, батша итеп күрә. Имеш, ул иң бай йыһаздар менән биҙәлгән тәхеттә ултыра. Ағас баштарындағы ожмах ҡоштары батшалыҡты сихри моңға күмгән, көйсөләр төрлө музыка ҡоралдарында күңелле көйҙәр башҡара, тәхет янында хур ҡыҙҙары тәндәренең барлыҡ нәфислектәрен күрһәтеп, батшаның күңелен күтәрә, гәйрәтен ҡуҙғыта. Батша алдына ҡуйылған тәғәмдәрҙең ниндәйҙәре генә юҡ, ауыҙ һыуың ҡорорлоҡ...

Барлыҡ ноталарҙың иң юғары нөктәһенә еткәндә генә фәҡир көтмәгәндә уянып китә. Үҙенең ысынбарлыҡтағы хәлен аңлауҙан ул йән тетрәүе кисерә. Алдындағы тәғәмдәрҙең юҡҡа сығыуына уғата йәне көйә уның, ирекһеҙҙән, күҙен йомоп, әле генә күргән төшөндәге гүзәллектәрҙе күҙ алдына килтереп тамшанырға ғына ҡала уға. "Исмаһам, уянғансы бер туйғансы ашап өлгөрмәнем", тип ҡайғыра ул.

Ирекһеҙҙән көнөнән төшөндә күргәндәрен кеше күп йыйылған урындарға барып бәйән итеп, шулар менән генә күңел йыуатырға ҡала уға. Тиҙҙән фәҡирҙең был сығыштары хаҡындағы хәбәр батшаға барып ишетелә. Имеш, ниндәйҙер ялған батша хасил булған һәм ул туҡтауһыҙ кешеләрҙең башын бутай, уның тәхетенә дәғүәһен белдерә. Батша ярандарына фәҡирҙе янына алып килергә һәм башын сабып өҙөргә бойора.

Бына бер мәл фәҡирҙе елтерәтеп батша һарайына һөйрәкләп килтерәләр. Язалау урынында батша фәҡиргә:

- Үлер алдынан үҙеңдең гәйебеңде танып, тәүбәгә кил, әҙәм аҡтығы, - тип аҡыра.
- Минме әҙәм аҡтығы, белгең килһә, беҙ икебеҙ ҙә батша затынан булабыҙ, гәле йәнәптәре, - ти фәҡир батшанан һис тә ҡурҡып тормайынса.
- Иң тәүҙә телен ҡырҡып алығыҙ, - тип ҡуша батша ярандарына, - теге донъяға барғас, бында күргәндәрен һөйләй алмаһын...
- Телемде ҡырҡһағыҙ, мин әле был донъяла уҡ үҙемдең ни өсөн батша икәнемде һинә аңлата алмайым, гәле йәнәптәре, - тигән фәҡир уның ауыҙын астырып маташыусыларҙы ситкә этәреп.
- Ебәрегеҙ үҙен, әйтһен һуңғы һүҙен, - тип бойорған батша тағын да.
- Беҙ икебеҙ ҙә батша ролен башҡарыусылар ғына, гәле йәнәптәре, тик айырма шунда ғына: минең спектакль йоҡонан уянғас, һинеке баҡый донъяға күскәс кенә тамамлана, - тигән фәҡир.

Фәҡирҙең һүҙҙәрен ишеткәс, имеш, батша уны үҙенең һарайына индереп, үҙе кейгән кейемдәрҙе кейҙереп, үҙе туҡланған ризыҡтар менән ауҡатләндереп, баҡый донъяға күскәнсе һарайында йәшәткән, тиҙәр.

...Ниндәй генә йорттарҙа йәшәһәк тә, кем генә булып эшләһәк тә, күпме генә эш хаҡтары алһаҡ та, ниндәй генә диңгеҙ ярҙарында ҡыҙынһаҡ та, ниндәй генә илдең президенты ҡыҙына өйләнһәк тә, ниндәй генә машиналарҙа йөрөһәк тә, нисек итеп кенә кейенһәк тә, ниндәй генә ризыҡтар менән туҡланһаҡ та - фанилыҡ ҡапҡаһын уҙғас, барыбыҙ ҙа бер сүрәттә ҡалабыҙ.

Әйҙәгеҙ, фани донъяла Кеше булып йәшәйек, дуҫтар!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠЫМЫҘ ЭСӘЙЕК!

**Бөгөн беҙҙе уратып алған ер, һыу, һауабыҙ ааһыҙ бысраныуға дусар ителгән заманда көн дә тәғәм ҡылған икмәгеңә ҡәҙәр уйланыбыраҡ, шикләнеберәк ҡарарға тура килә. Был һүҙҙәр өсөн изге икмәккәй рәнйемәһен, гәфү итә күрһен инде, гәйеп ризыҡта түгел, беҙҙең үҙебеҙҙә.**



Тирә-яҡ мөхит, экологияны һаҡламау, уға ҡороҡсослоҡ ҡылыу ахырҙа гәҙел яза рәүешендә кешелектең үҙенә кире ҡайта. Үҫемлекселек продукттары фәҡәт нитраттан тора кеүек хәҙер, айырыуса үҙең үҫтермәгән һәм һатып алынғаны, ситтән килтерелгәне пластилин уйынсыҡтарға оҡшаш: хуш еҫе лә, тәме лә булмаған ялтыр алмалар, башҡа шундай емеш-еләк. Уларҙың файҙаһынан зыяны күберәктер, моғайын. Әсәр һыуыбыҙ сифаты тураһында һөйләп торорға ла түгел.

Хас та ғибрәтле әкиәттәге кеүек: ризыҡ күп, шөкөр, баҙар, магазин кәштәләре һығылып ята, ә шулай ҙа уларҙы һатып ала һалырға күңел тартмай. Кем нисектер, мин үҙем матур натюрмортлы картина эргәһенән үткәндәй, ҡарап ҡына китәм былдай рәттәрҙе. Һатып алыусы хәҙер барыбер тауар, ризыҡ ярлыҡтарын ентекләп уҡырға тырыша (ундағы мәғлүмәттең дөрөҫлөгөнә бер кем дә гарантия бирә алмай, әлбиттә).

Былдай шарттарҙа иң яҡшыһы - үҙебеҙҙең республикала етештерелгәнде һәм тағы ла һәйбәтерәге - шәхси хужалығында үҫтерелгәнде ҡулланыу. Үкенескә ҡаршы, һәр кемдең дә былдай мөмкинлеге юҡ, айырыуса ҡала халҡының. Шулай ҙа аптырап ҡалырға ярамай. Организмды даими рәүештә шлак һәм токсиндарҙан таҙартып, матдәләр алмашыныуын көйләп, витамин һәм микроэлементтарға бай аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк биреп йәшәгән осраҡта әлегә буйтым ғүмер һөрөргә мөмкин әле, күңелегеҙҙе төшөрмәгеҙ һис тә.

Әле генә әйтеп киткән ошо өс ҡағиҙәне бер юлы хәл итеү мөмкинлеге барлығын да беләһегеҙҙер, моғайын? Был хаҡта әлегерәк "Киске Өфө" биттәрендә ҡымыҙ һәм ҡымыҙ менән дауалау эшенә 50 йыл ғүмерен бағышлаған төплө белгес-ғалим Әмир Шамаев сығыш яһағайны. Уның һөйләгәндәрен тыңлағас, миндә: "Их, ҡымыҙ һына эсеп торһаң, ашамай йәшәргә лә була икән дәһә!"-тигән фантастик уй тыуғайны башта. Ләкин бында бер ниндәй фантастика ла юҡ, ҡымыҙ - хаҡһыҙ (енәйәттәрсә!) онотолған үҙе бер фантастика! Башҡорт далаларына килеп ҡымыҙ менән дауаланыусы XIX быуат ғалимдарының береһе шулай тип яҙып ҡалдырған: "Ҡымыҙға бер өйрәнһәң, уны башҡа төр эсемлектәр менән алыштырыу мөмкин түгел. Ул һыуһынды ҡандырып ҡына ҡалмай, асығыуҙы ла баҫа, тик шул уҡ ваҡытта ҡымыҙ эсһәң, аҙаҡ күпме телһәң дә, шунса ашарға ла була, гәмүмән, ашамай ғына торорға ла мөмкин - асыҡтырмай".

Табип-ғалим булараҡ, Әмир Ғабдрахман улы Шамаев ҡымыҙҙың түбәндәге шифалы үҙенсәлектәрен билдәләгәйне: "Бейә һөтө һыйырҙыҡынан аҡһым һәм углевод составы буйынса ныҡ ҡына айырылып тора. Ошо ике компоненттың нисбәте яғынан бейә һөтө ҡатын-ҡыҙ - әсә һөтөнә яҡын тора. Әлеге көндә Ер шарында йәшәүсе халыҡтарҙың күпселеге аҙыҡты үҙләштереүҙә булышлыҡ итеүсе триптофан, лизин һәм метионин тигән өс төр аминокислотаға мохтажлыҡ кисерә. Ҡымыҙ тап бына ошо алыштырғыһыҙ аминокислоталарҙың ифрат бай сығанағы булып тора ла инде".

Бына ошо һүҙҙәрҙән һуң нисек итеп милләттәштәргә, әйҙәгеҙ, ҡымыҙ эсеп кенә йәшәйек, тип өндәшмәҫһең! Ҡымыҙҙың организмды ғына түгел, тотош йәшәйешебеҙҙе сәләмәтләндерерлек ҡеүәте бар. Араҡынан ағыуланып, күҙҙәре тонған, мейеләре шыйыҡланған, нервылары ҡаҡшаған алкоголиктарҙы үлемесле һәләкәт ҡосағынан тартып алыуҙа, уларҙы таҙарындырыуҙа, дауалауҙа бер ҙур ярҙам һәм ысын мәғәнәһендә тәбиғи шифа була алыр ине ул - ҡымыҙ!

Халҡыбыҙ сәләмәт һәм һәр саҡ айыҡ булһын, тиһәк, әйҙәгеҙ, ҡымыҙ эсеп кенә йәшәйек!

**Фәйрүзә ИШБИРҘИНА.**

ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**




***Светлана Воробьева:*** Бында урта быуаттарҙың һүңғы осорона ҡараған әйберҙәр табылған. Мәҫәлән, ураҡ, бысаҡ кеүек көнкүреш әйберҙәренең урта быуаттарҙан аҙағыраҡ булған осорҙарҙа ҡулланылыуы раҫланды. "Чертово городище" ҡомарткыһында табылған йоҙаҡтар һәм уларҙың аҫкыстары типтары буйынса үҫешкән урта быуаттарҙа ҙур һандыҡтарҙы бикләү өсөн ҡулланылған, был артефакттарҙы XII-XIV быуаттар менән даталап була, ә был тап Алтын Урҙа осоро менән тап килә.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Иң сағыу табылдыҡтарҙан Өфө-2 ҡаласығы территорияһында Алтын Урҙаның көмөш дирхемдары серияһын атап була. Өфөнән 20 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Подымалово торағында бәләкәйерәк металл аҡсалар - баҡыр пулдар табыла. Тағы ла бер археологик ҡомарткы - "Чертово городище"нан йыраҡ булмаған Дудкин торағында Өфө ярымутрауына рус администрацияһы килгәнгә тиклем осорҙа ла кеше эшмәкәрлегенә дәлил булған артефакттар һаҡланып ҡалған.

***Светлана Воробьева:*** Бында табылған бер көмөш балдаҡ XVI быуаттан да иртәрәк яһалмаған. Ә был ныҡ үҫешкән урта быуаттар осоро, ғәмәлдә Яңы заман менән тап килә.

***Фларит Сөнғәтов:*** Балдаҡтарға килгәндә, уларҙы башҡорттар менән бәйләп аңлатып була, сөнки шундай табылдыҡтар Өфөнән ситтә, башҡорттар йәшәгән урындарҙа ла осрай. Бындай дәлилдәр яңыраҡ асыҡланды, уларҙы иртә урта быуаттарҙан алып һуң урта быуаттарға тиклемге осор ҡомартҡылары һаҡлап ҡалған.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Үрҙә бәйән ителгәндәрҙән сығып, һуң урта быуаттар эпохаһында даими, стационар йәшәү урындары хәҙерге Өфөнөң төрлө өлөштәрендә - Өфө-1 һәм Өфө-2 ҡаласыҡтары, Дудкин торағы территорияһында һәм, моғайын, Усол тауында, йәғни Туратауҙа урынлашҡан, тип әйтеп була.

***Фларит Сөнғәтов:*** Өфө ярымутрауы кешеләре уның көнкүреш өсөн ҡулайлаштырылған айырым участкаларында йәшәгән, һәм улар барыһы бергә ярайһы уҡ ҙур булған урта быуаттар ҡалаһын хасил иткән. Хәҙерге тел менән әйткәндә, уны агломерация тип атап булыр ине.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Әлегә урта быуаттарға ҡараған Өфө ҡомартҡыларының йәшәү ваҡытын аныҡ ҡына билдәләп булмай. Ниндәйҙер бер мәлдә бындағы тораҡтар бөлгөнлөккә төшә башлай, Рычков бының сәбәптәренең береһе итеп мифологик риүәйәтте күрһәтә: йәнәһе, ниндәйҙер бер аждаһа йылан үҙенең тыны менән ҡала кешеләрен ағыулаған.

***Владимир Агте:*** Был риүәйәттең артында нимә тора? Мин бында ҡасандыр ҙур эпидемия, йә иһә пандемия булып, кешеләр үлеп бөткәндәр, тип фараз итәм. 1346 - 1352 йылдарҙа чума эпидемияһынан Европа халыҡтарының яртыһы ҡырылып бөтә. Күрәһең, был сир көнсығыштан, беҙҙең тарафтарҙан Европаға тиклем таралып киткәндер. Шуның арҡаһында бындағы ҡала ла юҡҡа сыҡҡан, һуңынан башҡа кешеләр чумалы тораҡ урынына килеп йәшәүҙән ҡурҡҡандыр. Ә ҡала ошо тауҙа урынлашҡан була, әммә унан күп нәмә ҡалмаған, сөнки беҙҙең климат шарттарында ағас тиҙ сереп бөтә.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Ҡаланың бөлгөнлөккә төшөүе Тамерлан (Аҡһаҡ Тимер) ғәскәрҙәренең һөжүм итеүе менән бәйле булыуы мөмкин. Илбаҫарҙар 1391 йылда Башҡортостан территорияһы аша Ҡондорса йылғаһы буйындағы Туктамыш хан ғәскәрҙәре менән яуға үтеп барышлай күп тораҡтарҙы яндырып, халҡын ҡырып ташлай. "Аҡһаҡ Тимер" походтары осоронда барса Волга буйы ҡалаларының инфраструктураһы юҡ ителә, бынан һуң Алтын Урҙа, үҙ-ара дошманлашҡан тарҡау күсмә политияларға бүленеп, һәләкәткә дусар була. Шуға ҡарамаҫтан, хатта ошондай катаклизмдарҙан һуң да Өфө ярымутрауында кешеләр йәшәгән, тип фекер йөрөтөргә була.

**(Дауамы. Башы 37-44-се, 46-50-се һандарҙа).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТАРИХЫБЫҘҘЫ ӨЙРӘНӘЙЕК!

**Күптәр тарих - "ул ҡоро факттарҙан, сәйәси осорҙарҙан, бер хакимдың икенсе хакимға алмашыуынан ғына тора" тип фекер йөрөтәләр. Ләкин тарихты комплексы процесс рәүешендә аңлау дөрөҫөрәк булыр. Тарих фәнендә лә, башҡа өлкәләрҙәге һымаҡ, бер ябай ҡанун йәшәй: барҙан юҡ булмай, юҡтан бар булмай.**

Тарихтың иң төп асылы - ул тәжрибә. Тәжрибә, үҙ сиратында, кешенең мәҙәни үҫешендә һәм уның менталитетында сағыла. Шул уҡ ваҡытта тарихта сәйәси етәкселәрҙең эшмәкәрлеге төрлө яҡтан өйрәнелә. Әйтәйек, Рәсәй императоры Александр Беренсенең бөйөк сәйәсмән булып формалашыуына уның бала саҡ тәрбиәсеһе йоғонто яһай. Йәмғиәт үйлап сығарған төрлө сәйәси-стратегик технологиялар, алдынғы фекер йөрөтөү, ғилми асыштар, техниканың алға китеүе хатта ҡайһы бер илдәрҙә боролоштарға алып килгән. Былар барыһы ла бик ҡыҙыҡлы.

Башҡортостан тарихына уның географик урынлашыуы, ҡаҙылма байлыҡтары булыуы ла ҙур йоғонто яһай. Элегерәк башҡорттарҙың ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуҡын алыуы һәм ошо хоҡуҡты яҡлап көрәшеүе уларҙы халыҡ булараҡ формалаштыра. Башҡортостан тарихында 1917-1920 йылдар ҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Был көсөргәнешле осорҙа алдынғы ҡарашлы йәштәр Башҡорт автономияһын төҙөүгә өлгәшә. Башҡортостан тарихында иң сағыу осор - ул XVIII быуаттың 30-сы йылдарындағы башҡорт ихтилалдары. Ниндәй күренекле етәкселәр булған! Ихтилалдар, әлбиттә, хужалыҡтарға ҙур зыян килтергән. Ләкин улар иҙеү, эҙәрлекләүгә ҡаршы дәрәү күтәрелгән. Халыҡ үҙенең ергә булған аҫаба хоҡуҡтары өсөн көрәшкән. Йәғни улар менән иҡтисади мотив идара иткән. Батша администрацияһының да маҡсаттары бик үҙенсәлекле. Беренсенән, башҡорт өлкәһен тулыһынса яулап алыу һәм һалымға ултыртыу. Икенсенән, Урал ерҙәре - Урта Азияның киң биләмәләрен, сауҙа юлдарын һәм ҡаҙылма байлыҡтарын баҫып алыу буйынса бер плацдарм ролен башҡарырға тейеш була. Әйтергә кәрәк, Уралдағы ер байлыҡтары байтаҡ рус металлургтарының ҡыҙыҡһыныуын уята.

Тимәк, әйтелгәндәрҙән сығып фекер йөрөткәндә лә, тарих - ул көнүҙәкте өйрәнеү, йәшәйеш, сәйәси мәсьәләләрҙең иҡтисади юҫыҡтарға бәйләнешен, етәкселек итеү алымдарын анализлау. Тарих халыҡтың ауыҙ-тел ижадында, йыр-моңонда сағылыш тапҡан, был иһә мәҙәнилектең айырылмаҫлыҡ өлөшө. Ә инде ҡалыплашҡан, әммә бер заманда ла актуаллеген юғалтмаған фекергә килгәндә, тарих - ул беҙҙең шанлы ла, данлы ла тарихыбыҙ, уны, тамырҙарыңды белмәйенсә, киләсәккә барып булмай. Шуның өсөн, әйҙәгеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнәйек!

Рәсих ЗӘЙТҮНОВ.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Бесәнгә башҡорттар июнь башында төшкән һәм бар ғаилә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла индереп, салғы менән сапҡан. Сабылған һәм киптерелгән бесәнде түҙҙә күбәләргә, һуңынан кәбәнгә өйгәндәр (һүрәт). Ауылға уларҙы сана юлы буйлап көҙгөнән йәки ҡышын алып ҡайтҡандар. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш һәм таулы райондарҙа йәшәгән башҡорттарға, малдары ул тиклем күп булмаһа ла, бесәнде күп итеп әҙерләргә тура килгән. Көньяҡ Урал тауҙарында, бигерәк тә уның көнбайыш битләүҙәрендә ҡар иртә ята һәм бигерәк тә тәрән була. Унда тибенгә сығыу мөмкин түгел һәм ҡыш оҙайлы булғанда башҡорттарға бесән етмәй ҡала. Был осраҡта улар малдарға яҙғыһын ҡарама, йыла, йүкә һәм башҡа япраҡлы ағастарҙың йәш ботағын ашатҡан.



Башҡорттарҙа малды тәрбиәләү тигән төшөнсә булмай. Аттар яланда һәм урманда, һыйырҙар һәм һарыҡтар кеүек үк, өйөрө менән йөрөй. Табундар бер нисә өйөрҙән һәм ҡолонло бейәләрҙән тора. Уларҙы өйөр айғыры көтә һәм һаҡлай. Ул үҙ өйөрөндәге бейәләр артынан игтибарлап күҙәтә, уларҙы өйөрҙән ситкә сығармай һәм сит айғырҙарҙы яҡын килтермәй. Эре мөгөҙлө мал һәм һарыҡтар көтөү менән йөрөгән.

Һауым бейәләрен тотоу өсөн ҡороҡ файҙаланғандар. Нәҙек, 3-4 метр оҙонлоғондағы ҡаҙыҡтың уртаһына һәм алғы осона ялдан үрелгән тоҡон бәйләнә. Тоҡон аттың муйынына кейҙерелә лә инде.

Һәр иртән башҡорттар һыбай килеш малдары артынан барып, уларҙы йәйләү урынына ҡыуып килтергән. Ҡолондар әсәһен иммәһен өсөн уларға шалтыраҡлы нуҡта кейҙерәләр (һүрәт) һәм ер өҫтөнән һуҙылған елеләргә бәйләп ҡуялар (һүрәт). Быҙауҙарға шул уҡ маҡсаттан морондарына махсус туҙ моронсалар - борғаҡтар кейҙергәндәр (һүрәттәр). Ҡолонло бейәләрҙе һәм быҙаулы һыйырҙарҙы көтөүгә киске яҡҡа ғына сығарғандар.







Себен-серәкәйҙәр малдарҙы ныҡ ыҙалатҡан урманлы урындарҙы башҡорттар малдарҙы бөжәктәрҙән һаҡлау өсөн төтөн менән ыҫлатҡандар. Ә ҡояштан һаҡланыу өсөн махсус тупалыҡтар ҡуйғандар.



Миңә билдәле булыуынса, көтөү эттәрен башҡорттар яланда ла, урманда ла тотмаған. Башҡорттар хатта малдарына билдә лә һалмаған. Аттарға ғына тамға һалғандар (һүрәт). Ҡыҙҙырылған тимер тамға бер йәшлек һәм ике йәшлек аттарға баҫылған. Ат бесеүсе үҙенең эшен башҡарыу өсөн үткер бәке һәм ҡыҫа файҙаланған. Айғырҙарҙы өс-дүрт йәштәрендә бескәндәр. Ике-өс көндән ҡыҫаны алғандар. Бер йәшлек үгеҙҙәрҙе бескәндән һуң, яраһына тоҙ һипкәндәр.

**(Дауамы бар).**

***✓ Дүртенсе үлсәмдә һыу өҫтөнән атлап йөрөп була. Бына Тәүратта Ғайса бәйғәмбәрҙең шулай уҡ һыу өҫтөнән батмайынса атлап барыуы үҙе бер мөғжизә рәүешендә бәйән ителә.***

# КЕШЕ ҺӘМ

## йәки Яңы йыл алды

**Мөғжизәләргә ышанып, мөғжизәләр көтөп йәшәйбеҙ. Һәр Яңы йыл алдынан беҙҙең ошо хыял уттай баҙлап китә, күңелдәрҙә көтөү, өмөт ялҡыны дөрләй. Ләкин ул мөғжизәне ысынға әйләндереү өсөн кеше үҙе ниҙер ҡылырға тейештер бит инде? Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - космоэнергетика тип аталған тәғлиматте һәм ғәмәлиәтте өйрәнеп, кешеләргә ярҙам итергә һәр саҡта ла әҙер торған замандашыбыҙ Рауфан МОРТАЗИН менән мөғжизәләр ғәмәлиәте хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Оҙаҡламай кешелек сираттағы 2026 йылды ҡаршылай, был дата Ғайса бәйғәмбәр (Иисус Христос) тыуған йылдан алып билдәләнә. Әлбиттә, ваҡыт төшөнсәһе - мәңгелек, әммә кешеләр өсөн ул абсолют түгел, уның үлсәмдәре лә төрлөсә: һәр эпоха765ның үҙ календары булған. Рәсәйҙә йыл иҫәбе 1700 йылға тиклем юлиан календарына ярашлы - донъя яратылғандан башлап алып барыла (донъя б.э. тиклем 5508 йыл әүәл башланған, тип алына, шулай иҫәпләһәң, 2026 йылдың сентябренән 7535 йыл башлана. Мосолмандарҙың да үҙ календары бар: һижри буйынса 1447 йылда йәшәйбеҙ, киләһе йылдың мөхәррәм айынан 1448 йыл башлана. Эйе, беҙ барыбыҙ ҙа билдәле бер ваҡытта һәм арауыҡта йәшәйбеҙ, был тәбиғәт, йәғни Космос ҡануны. Һеҙ - космоэнергет, ваҡытты ни рәүешле йыһан менән бәйләп аңлатып була?**

- Ер шары - космостың бер үтә бәләкәй генә нөктәһе, Оло Йыһан менән сағыштырғанда, туҙан бөртөгөләй генә. Фән күҙлегенән ҡарағанда, ул бынан 4,5 млрд йыл әүәл барлыҡҡа килгән. Ә кешелеккә килгәндә, уның "йәше" хаҡында төрлө фараздар бар: бер нисә тиҫтә мең йылдан алып әлеге 7,5 мең йылға тиклем ваҡыт бирелә. Космоэнергетика кешелектең бер нисә раса булыуын раҫлай, беҙ, хәҙерге кешеләр, бишенсе расала йәшәйбеҙ. Тәүге 4 раса кешеләре ерҙә төрлө катастрофик шарттар хасил булыуы һөҙөмтәһендә юҡҡа сыҡҡан, тип иҫәпләнә.

**Әйткәндәй, билдәле офтальмолог Эрнст Мулдашев та кешелектең 5 расаһы хаҡында бик ҡыҙыҡлы китаптар яҙған шәхес.**

- Эйе, ул Тибетҡа бер нисә тапҡыр сәйәхәт ҡылған, уның фараздары кешелектең боронғо эпохалары хаҡында бар донъяла ҡыҙыҡһыныу уята алды. Хәҙерге кешелеккә тиклем лемурийҙар һәм атланттар тип нарыҡланған расалар тураһында ла күп мәғлүмәттәр тупланған. Әлбиттә, был фараздарға ышанмаған кешеләр ҙә бар, улар ошо мәғлүмәтте тик миф тип кенә ҡабул итә. Шул уҡ ваҡытта атланттар расаһына ҡараған кешеләрҙең һөйәктәре табылыуы хаҡында ла хәбәрҙәр булды.

**Билдәле булыуынса, 922 йылда Булғарға ғәрәп хәлифе Әл Мөҡтәдир илселеге килә. Илселек сәркәтибе Ибн Фаҙлан Булғар ханлығындағы ғәжәп хәлдәр тураһындағы яҙмаларында бында әүәл бик ҙур кәүҙәле, кешегә оҡшаған алпамышалар йәшәгәне хаҡында мәғлүмәт килтерә...**

- Бындай заттар Башҡортостан территорияһында ла булған. Арҡайымдан йыраҡ түгел Чека тигән тау бар. Шунда атланттарҙың ташта ҡатып ҡалған эҙҙәре һаҡланып ҡалған, уларҙы үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Уң аяҡтың эҙе менән һулыныҡы араһы 3 метр тәшкил итә. Рулеткам бар ине, шул эҙҙәрҙе үлсәп ҡараным - 48 см оҙонлоғонда улар. Ни ғәжәп менәндер, ул эҙҙәр гранит таշта уйылып ҡалған. Хәҙерге кеше менән сағыштырғанда, уларҙың буйы 3,5 метрға еткән.

**Кешеләр ваҡыт үлсәмдәрен уйлап тапҡан, уларҙың бер төрлө булмауын беләбеҙ. Ваҡыт ағышы ла бер төрлө генә булмай, тип һығымта эшләргә булалыр...**

- Ер шарында ваҡыт бар дәүерҙәрҙә лә бер төрлө үтмәгән. Айырым кешеләр ҙә төрлө осраҡтарҙа ваҡыттың үтеүен төрлөсә тоя ала. Ошо айҡанлы йәш сағымда үҙем менән булған бер хәл иҫкә төшә. Институт тамамлағас, Белорет леспромозында эшләй башланым. Йәй көндәрен стадионда еңел атлетика буйынса ярыштар уҙғарыла торғайны. Шулай бер көндә минең менән бергә эшләгән егет, ҡала спортсылары менән ярышып ҡарайыҡ, тип тәҡдим итте, ул үҙе бик шәп йүгерә ине. Леспромхоздан 4 егет эстафета ярышында ҡатнашырға булдыҡ. Мине өсөнсө этапҡа ҡуйҙылар. Ҡаланыҡылар бик шәп спортсмендар бит инде, уларҙың өсәүһе алға сығып китте. Мин нисек итеп булһа ла уларҙы ҡыуып етергә ниәт иттем. Шул саҡта ғәжәп бер хәлгә тарыным: ваҡыт туҡтап ҡалғандай булды бит. Минән алда барған егет шул тиклем аҡрынайҙы, хатта йүгермәгән дә һымаҡ. Үҙем, ул ни эшләп йүгерә алмай икән, тип уйлайым. Алда барған икенсе бер егет тә, өсөнсөһө лә шундай халәттәләр, миңә туҡтап ҡалғандай күренделәр. Уларҙы яйлап ҡына, бик аҡрын һәм шыма ғына уҙып киткән кеүек булдым. Үҙемә ҡалһа, йүгереүем бик яй, бик аҡрын барғандай ине. Егеттәребеҙ ҙә аптырап ҡалған: "Һин, Рауфан, ен һымаҡ йүгерҙең бит!" - тиҙәр миңә.

***Шул саҡта ғәжәп бер хәлгә тарыным: ваҡыт туҡтап ҡалғандай булды бит. Минән алда барған егет шул тиклем аҡрынайҙы, хатта йүгермәгән дә һымаҡ. Үҙем, ул ни эшләп йүгерә алмай икән, тип уйлайым. Алда барған икенсе бер егет тә, өсөнсөһө лә шундай халәттәләр, миңә туҡтап ҡалғандай күренделәр. Уларҙы яйлап ҡына, бик аҡрын һәм шыма ғына уҙып киткән кеүек булдым. Үҙемә ҡалһа, йүгереүем бик яй, бик аҡрын барғандай ине. Егеттәребеҙ ҙә аптырап ҡалған: "Һин, Рауфан, ен һымаҡ йүгерҙең бит!" - тиҙәр миңә.***

**Киноға төшөргәндә пленканың тиҙлеген арттырып төшөрһәләр, аҙаҡ экранда спортсылар бик аҡрын һәм һалмаҡ ҡына хәрәкәт иткән кеүек була бит...**

- Эйе, кинематографта ошо ысулды ҡулланып, ваҡыттың оҙаҡҡараҡ һуҙылып, хәрәкәттең аҡрынайыуы эффектын күрһәтә алалар. Ә иҫкә алынған осраҡҡа килгәндә, мин уның сәбәбен хәҙер бөтөнләйгә икенсе төрлө аңлатам: ул саҡта мин, быны үҙем дә һиҙмәйенсә, дүртенсе үлсәмгә күскәнмендер, тип фараз итәм. Ул үлсәмдә ваҡыт та икенсерәк аға. Дүртенсе үлсәмдә һыу өҫтөнән атлап йөрөп була, сөнки аяҡтар хәрәкәте барышында улар һыу эсенә инеп өлгөрмәй, батмай ҡала. Бына Тәүратта Ғайса бәйғәмбәрҙең шулай уҡ һыу өҫтөнән батмайынса атлап барыуы үҙе бер мөғжизә рәүешендә бәйән ителә.

**Беҙ көн һайын радио-телевидение дикторҙарынан "Мәскәү ваҡыты менән шунса сәғәт", йә иһә "Өфө ваҡыты менән шунса сәғәт", тигәнде ишетәбеҙ. Дөйөм Йыһан ваҡыты буламы икән?**

- "Йыһанда ваҡыт нисек була?"тигән һорауға яуап ошондай: унда үткән, хәҙерге һәм киләсәк ваҡыт араһында айырма юҡ, улар барыһы бергә бер субстанцияны, бер бөтөнлөктө хасил итә. Ул Ер ваҡытына тура килмәй. Йыһанда үткән заманда булған хәл-ваҡиғаларҙы берәмләп, ентекләп ҡарап булған кеүек, киләсәкте лә алдан күрә алыу мөмкинлеге бар. Әммә киләсәк күп вариантлы була, сөнки һәр кем үҙе күрәсәген үҙе һайлай. Ерҙә кешеләр араһында күрәҙәселәр булыуы билдәле, улар киләсәктә ниндәй хәл-ваҡиғалар булыу мөмкинлеген алдан күрә ала. Уларҙың иң оҫталары хатта ки 7-се үлсәмгә күсеп, меңәр йыл алдараҡ буласаҡ ваҡиғалар хаҡында мәғлүмәткә эйә булыуы мөмкин.

**Боронғо дини китаптарҙа, Библияла, Ҡөрьән-Кәримдә Әҙәм һәм Һауа тоҡомдарының ғүмер оҙайлығының 9 быуаттан ашыу булыуы хаҡында мәғлүмәт теркәлгән. Башҡорт мәғрифәтсеһе һәм дин әһеле Тажетдин Ялсығолдоң "Тарих намә -и Булғар" китабында ла ошондай уҡ мәғлүмәттәр килтерелә: Әҙәм ғәләйһи әс-сәләм 1 000 йыл (Иҫке Ғәһед буйынса 930 йыл), уның улы Шәйҫ - 910, ейәне Әнүш - 520, бүләһе Ҡайнан - 800, уның улы Мәла - 900 йыл ғүмер һөрә. Билдәле Нух бәйғәмбәр ерҙә 1000 йыл йәшәп, баҡыйлыҡҡа күсә. Быны булыуы мөмкинме һуң?**

- Мин дини сығанаҡтарҙа килтерелгән мәғлүмәттәргә ышанам. Хәҙерге кешелеккә тиклем дә Ер шарында тиҫтә мең йылдар дауамында йәшәгән раса кешеләренең ғүмер оҙайлығы бик ҙур була. Мәҫәлән, атланттарҙың - 2 000, лемурийҙарҙың 2 - 3 мең йылға тиклем йәшәй алыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар. 2-се раса кешеләре хатта 10 мең йыл йәшәй алған. Ә иң тәүге расаға килгәндә, улар үлемһеҙ заттарҙан булған, ожмах баҡсаһында йәшәгән.

**Әйткәндәй, "Урал батыр" эпосында ла ошондай мәғлүмәттең ҡайтауазы сағыла. Уралға меңйәшәр, үлемһеҙ ҡарт осрай һәм ул батырға үлемһеҙлектең ерҙә йәшәгән кеше затына һис бер кәрәге юҡлығы хаҡында зарланып һөйләй. Урал батыр үҙе лә үлемһеҙлек сығанағын - Йәншишмәне эҙләп, сәйәхәт ҡылырға сыға бит. Тимәк, үтә боронғо эпохаларҙа йәшәгән ата-бабаларыбыҙ ҙа ниндәйҙер беҙгә билдәле булмаған мәғлүмәттәргә эйә булғандыр...**

- Мин Леонард Орр авторлығындағы бер китапты уҡығайным, ул "Бросьте привычку умирать" тип атала. Ул ғәҙәттәгенән күпкә оҙағыраҡ йәшәй алған кешеләрҙе эҙләй һәм йәштәре 300 йылдан ашып киткән 8 кешене осрата. Улар араһында Бабаджи тигән кеше лә була. Уның тураһында мин совет осоронда яҙылған бер мәҡәләне уҡыным. Ошо Бабаджиға СССР-ҙан делегация бара, уны табып, һөйләшә башлайҙар. Ул үҙен кинокамераға төшөрөүҙе тәҡдим итә һәм, артабан ни генә булмаһын, пленкаға төшөрөүҙе туҡтатмаҫҡа ҡуша. Ни ғәжәп, бер мәл ул зым-зыя күҙҙән юғала. Оператор киноаппаратының тотҡаһын өйөрөлтөүен дауам итә. Күпмелер ваҡыт үткәс, Бабаджи яңынан кеше күрерлек хәлдә пәйҙә була. Уны Һиндостанда бик күптәр үҙҙәренең рухи уҡытыусыһы (гуру) тип иҫәпләй.

**Ә был хәлдең ысынбарлыҡта булыуы мөмкинме һуң?**

- Бабаджи кеүек кешеләр үҙҙәренең физик тәнен - организмын йыһан нурҙарын ҡулланып таҙарта ала. Улай ғына түгел, уларҙың ДНК-һында ғүмер оҙайлығын программалау механизмы юҡ. 5-се расаға ҡараған кешеләрҙең ДНК составында хромосомаларҙың теломер тип аталған өлөштәре бар, улар күҙәнәктәр бүленеше менән идара итә. Улар ҡыҫҡара бара һәм юҡ була, был осраҡта күҙәнәк башҡаса бүленә алмай, кешенең ағзалары туҙа, ҡартая башлай. Әгәр беҙ күҙәнәктәрҙе, ағзаларҙы туҙыуға дусар иткән программаны контролдә тота алһаҡ, күпкә оҙағыраҡ йәшәр инек.

**Йыһан көстәре ерҙә йәшәгән кешеләргә ярҙам итә аламы?**

- Кеше организмы Ер шары һәм барса йыһан объекттары менән бәйләнештә йәшәй. Бөтә донъя билдәле бер электромагнит тирбәлеше (вибрация) ритмына ярашлы ҡоролған, әммә ул да үҙгәрә бара. Ерҙең тирбәлеше шулай уҡ күтәрелә бара, был мәғлүмәт иң элгәре Крайон тигән рухи йыһан заты менән бәйләнешкә инә алған кешеләргә төшөрөлгән. Крайондың белдереүенсә, уны Аллаһы Тәғәлә ергә кешеләргә ярҙам итер өсөн ебәргән. Ерҙең магнит яланы бар, уның торошо ерҙәге тормошҡа бик ныҡ йоғонто яһай. Крайон белдергәнсә, ул һәм уның ярҙамсылары Ер шарының магнит селтәрен төҙөкләндергән һәм уның үҙәгенең (күсәренең) торошон үҙгәртә биргән. Магнит яланының полюстары бар. Беҙгә гел, компастың магнит уғы төньяҡ полюсты күрһәтә, тип әйтә килделәр. Баҡтиһәң, ул полюс йыл һайын 55 километрға тиклем ситкәрәк күсә бара икән. Көньяҡ магнит полюсы ла Һинд океаны яғына күсә бара. Магнит полюсының Ер шарының төньяҡ полюсынан 11 градусҡа ситләшеүе хаҡында мәғлүмәт бар.

***✓ 2020 йылда бөтә донъяла ковид пандемияһы башланды. Тәүге айҙарҙа сирҙе йоҡторған кешеләр аҡрынлап һауыға ине, артабан сирлеләрҙе дауаханаларға һала башланылар - ә уларҙың бик күптәре һауыға алмайынса вафат булды.***

# ЙЫҺАН,

## фәлсәфәһе



**Тимәк, әлеге ваҡытта беҙҙең компастарыбыҙ төньяҡ тарафты аныҡ күрһәтмәй икән…**

- Тап шулай. Магнит полюсының "ҡыйшая" барыуының эҙемтәләре күп буласаҡ. Был ерҙәге тирбәлеш кимәлен үҙгәртә бара. 1987 йылға тиклем Ер шарындағы электромагнит тирбәлеше кимәле 7,8 Гц була, ул константа итеп ҡабул ителһә, хәҙер артҡандан-арта бара. Тирбәлеш үҙе бер тигеҙ генә артмай, ваҡыты-ваҡыты менән түбәнәйеп тә ала. Ер шарының электромагнитик торошо ҡояш менән дә бәйле, сөнки унда барған процестар Ер шарында магнит бурандарын барлыҡҡа килтерә. Йыһан масштабын ҡулланғанда, беҙ юғарыраҡ үлсәмгә күсеү этабына еткәнбеҙ. Яңы үлсәм кешеләре беҙгә ҡарағанда байтаҡҡа оҙағыраҡ йәшәйәсәк.

**Классик тарихта беҙ ни барыһы ике ҙур ваҡыт арауығын - беҙҙең эраға тиклемге замандарҙы һәм 2025 йыл дауам иткән беҙҙең эра дәүерен беләбеҙ, уныһы Ғайса бәйғәмбәр тыуған йылдан иҫәпләнә. Ысынбарлыҡта ошо ике эра ғына булғанмы?**

- Юҡ, әлбиттә. Мәҫәлән, индустарҙың Ведаларында Ер шарында ваҡыттың 4 югаһы, йәғни эраһы булыуы хаҡында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирелә. Ул эралар бик ҙур ваҡыт арауыҡтарынан хасил була, йөҙәр мең йылдар буйына дауам итә. Беренсеһе - Сатья-юга, алтын быуат, икенсеһе - Трета-юга, көмөш быуат, өсөнсөһө - Двапара-юга, баҡыр быуат, дүртенсеһе - Кали-юга, йәғни тимер быуат. Һуңғыһы - дәүерҙәрҙең иң ҡараңғыһы, ерҙә бәлә-ҡаза, төрлө сирҙәр, катастрофалар, һуғыштар, кешеләрҙең гонах ҡылыуының саманан ашҡан сағы. Ҡыҙғаныс, әммә ата-бабаларыбыҙға ла, үҙебеҙгә лә ҡара көстәр өҫтөнлөк итә барған эпохала йәшәргә тура килде. Әммә хәҙер кешелек яңы эраға, яҡты көстәр йоғонтоһо арта барған дәүергә күсә башлаясаҡ. Был күсеш оҙаҡ ваҡыттар буйына бара, сөнки яңы эпохала йәшәүселәр үҙгәрештәргә әҙер булырға тейеш. Йыһан үҙенең энергияһын кешеләргә тиҙ генә төшөрмәй, сөнки уларҙың организмдары тейешле кимәлдә үҙгәреш кисермәгән. Йыһандың үҙендә лә үҙгәреш процестары бара, мәҫәлән, 2013 йылда водород атомы протонының диаметры 1 процентҡа ҡыҫҡарыуы билдәле булды. Ә водород - йыһанда иң күп таралған химик элемент. Уның үҙгәреше барса тереклеккә тәьҫир итә. Кешеләрҙең ғүмер оҙайлығы ла һиҙелерлек арта бара: беҙ бәләкәй саҡта 50-60 йәшлек ағай-апайҙар ныҡ ҡарт булып күренәләр ине. Хәҙер ошо йәштәгеләрҙең күбеһенең энергиялы, дәрт-дарманлы булып ҡалыуын инҡар итеп булмай.

**Йыһан энергетикаһы йоғонтоһо кеше биологияһында сағылмай ҡалмай, тип һығымта эшләр өсөн ерлек бармы?**

- Бына беҙ төнөн йондоҙло күккә ҡараһаҡ, йыһандың икһеҙ-сикһеҙ булыуына төшөнә башлайбыҙ. Ә унда юғары цивилизацияларҙың күп булыуын ғалимдар ҙа инҡар итмәй. Йыһандың бер генә йондоҙ системаһы ла буштан- бушҡа барлыҡҡа килмәгән. Ерҙә йәшәгән кешелектән миллион йылдарға алға киткән йыһан цивилизациялары булыуы мөмкин. Бына үҙебеҙ йәшәгән 7 тиҫтә йылды ғына алып ҡарайыҡ. Мин Мәсетле районының Теләш ауылында тыуып үҫтем. Бала сағымда ауылда электр уты ла юҡ ине. Артабан көнкүрешкә радио, аҡлы-ҡаралы, төҫлө телевидение килеп инде, хәҙер интернет селтәрҙәренән, цифрлы гаджеттарҙан теләһә ниндәй мәғлүмәт табып була. Быларҙың барыһы ла бер кеше ғүмере барышында бар булды. Мин былай уйлайым: йыһандың алға киткән цивилизациялары Ер шарында йәшәүсе кешеләргә ярҙамға килергә әҙер. Тик беҙгә йыһандан килгән энергия көсөн ҡабул итергә һәм файҙалана белергә өйрәнергә кәрәк.

**Әңгәмәбеҙҙә космоэнергетика тип аталған тәғлимәтте һәм ғәмәлиәтте аныҡлап, асыҡлыҡ индереү урынлы булыр…**

- Космоэнергетикаға уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Рәсәйҙә нигеҙ һалына. Ни өсөн тап Рәсәйҙә? Барса осорҙарҙа ла ҡара көстәр Рәсәй дәүләтен юҡ итергә тырыша. Шуға күрә лә тап космоэнергетика аша беҙҙең йәмғиәтебеҙгә һәм дәүләтебеҙгә ярҙам итеү планы барлыҡҡа килә. Мәскәүҙә космоэнергетика институты бар, уны Эмиль Багиров етәкләй. Әлбиттә, космоэнергетика тәғлимәтенә һәм ғәмәлиәтенә ышанмаған, уға тәнҡит күҙлегенән ҡараусылар ҙа бар. Был осраҡта шулай ғына яуап ҡайтарырға була: Махсус психология һәм психоэнергетика институты Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) тарафынан танылған, ә бының өсөн файҙаланылған алымдарҙың һөҙөмтәле булыуын иҫбатлау талап ителә. Кешеләрҙең һаулығын нығытыу йәһәтенән космоэнергетика бик әһәмиәтле: Эмиль Багиров билдәләүенсә, йыһан нурҙары каналдарын һәр бер кешелә асып булған хәлдә барса сирҙәрҙе лә дауалап була.

**Хәҙерге заман медицинаһы ла дауалап булмай торған сирҙәр юҡ, тип белдерә бит…**

- Эйе, һәр сирле кеше дауаханаларға бара, унда билдәле бер дауалау процедураларын үтә. Уның һаулығы яҡшыра, быны бер кем дә инҡар итмәй. Әммә был кешенең тулыһынса һауығыуын аңлатмай. Бына, мәҫәлән, онкология сирҙәрен алып ҡарайыҡ. Дауалау алымдарын ҡулланып, ауырыуҙың ғүмерен оҙайтып була, әммә яман шештең кеше организмына яһаған кире йоғонтоһон барыбер тулыһынса юҡҡа сығарып булмай. Шул уҡ йөрәк-ҡан системаһы сирҙәре хаҡында ла ошолай тип әйтеп була. Сирленең йөрәге туҙған, ҡан юлдары тонған икән, операциялар, дарыуҙар менән уның ғүмерен оҙайта алалар, әммә сир барыбер үҙенекен итә - кеше был донъянан барыбер иртәрәк китә.

Быны үҙемдән дә беләм. 23 йыл элек мин бер бабай һымаҡ хәлдә инем. Органдарҙа эшләгәс, йыл һайын медицина тикшереүе үтә инек. Хроник гастрит менән яфаландым, был сир ҡасан бөтөр, тип докторҙарҙан һорайым. Ғүмерең буйына дауаланырға тура киләсәк һиңә, тиҙәр. Ангинамдан да ҡотола алманым, етмәһә, бауырымдың насар эшләүе беленде, уны "токсик" хәлдә, тинеләр. Аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә эшемдә микроинфаркт үткәрҙем. Бына бөгөн ошо сирҙәрҙең береһе лә минең организмымда юҡ. Был - минең космоэнергетик дауаланыуымдың һөҙөмтәһе. Космоэнергетикаға ярашлы, һәр кемебеҙҙең физик, матди тәненән башҡа, күҙгә күренмәгән тәндәре бар. Физик тәнгә иң яҡыны - эфир тәне. Унда кеше ағзаларының барыһының да күсермәһе, проекцияһы бар, эфир тәне менталь тән менән тығыҙ бәйләнештә тора. Һинең берәй ағзаңда, мәҫәлән, йөрәгеңдә етешһеҙлектәр хасил булып, тайпылышлы процестар башлана икән, былар йөрәгеңдең эфир тәнендәге сағылышында ла пәйҙә була. Әммә кешенең күҙебеҙгә күренмәгән каналдарын уның чакралары аша асып, уға космос нурҙарын йүнәлтә алһаҡ, уның барса сирҙәрен дауалау мөмкинлегенә эйә була алабыҙ. Мәҫәлән, инфаркт кисергән кешенең йөрәгендә үле күҙәнәктәрҙән йөй ҡала. Космоэнергетик дауалау сеанстарынан һуң улар юғала.

**Быны раҫлаусы факттар бармы?**

- 60 йәшем тулғас, Өфөлә уҙғарылған халыҡ-ара марафонда үҙемде һынап ҡарарға булдым, 10 саҡрымға йүгерергә кәрәк ине. Ошоға тиклем 35 йыл буйына бындай ярыштарҙа ҡатнашҡаным булманы. Йөрәккә ЭКГ эшләмәйенсә, бер кемде лә стартҡа сығармайҙар. Мин дә үттем: табиптар йөрәгең сәғәт кеүек эшләй тине. Ә мин бит микроинфаркт үткәргән кеше! Тимәк, ошоғаса йыһан нурҙары менән дауаланыуым бушҡа булмаған. Бына тағы ла бер миҫал. 2020 йылда бөтә донъяла ковид пандемияһы башланды. Тәүге айҙарҙа ошо алама сирҙе йоҡторған кешеләр аҡрынлап һауыға ине, артабан сирлеләрҙе дауаханаларға һала башланылар - ә уларҙың бик күптәре һауыға алмайынса вафат булды. Әгәр донъя кимәлендә космоэнергетика аша дауалау ойошторолһа, бындай фажиғә булмаҫ ине, тип уйлайым.

**Космос нурҙарының кешелеккә тағы ла ниндәй ыңғай йоғонтоһо бар?**

- Крайон тәғлимәте буйынса, кешелек яңы үлсәмгә күсеү барышында беҙ вундеркинд тип атаған бик һәләтле балалар күпләп тыуасаҡ. Беҙҙең бала сағыбыҙҙа кеше ҡанының 4 төркөмө билдәле ине, хәҙер 5-се һәм 6-сы төркөмгә ҡараған балалар тыуа башланы. Тимәк, яңы быуын вәкилдәрендә биологик, генетик үҙгәрештәр башланыуы бик мөмкин.

**Кешенең ДНК-һында, генетик кодында ла үҙгәрештәр башланасаҡмы?**

- Кешенең барса ағзаларында ла үҙгәрештәр, үҫеш процестары башланыуы ҡуҙаллана. Бына элегерәк мейенең оро һымаҡ биҙенә (шишковидная железа, эпифиз) артыҡ иғтибар бирелмәне. Космоэнергеттар белдереүенсә, был үтә бәләкәй ағза кешенең йыһан менән бәйләнешен көсәйтә ала, әммә ул шул уҡ йыһандың ҡара көстәре тарафынан томаланған көйө ҡала. Әгәр ошо биҙ тейешле кимәлдә эшләй башлаһа, беҙ үҙебеҙҙең Аллаһы Тәғәлә балалары икәнлегебеҙҙе тоясаҡбыҙ. Шулай була ҡалһа, беҙ илаһи ҡеүәткә эйә буласаҡбыҙ: кешеләргә фекерҙе матдиләштереү, оҙаҡ йәшәй алыу, башҡаларҙы дауалай алыу һәм әле фантастик тип иҫәпләнгән башҡа ғәмәлдәрҙе башҡарыу мөмкинлеге биреләсәк. Эпифиз эшмәкәрлеген тотҡарлаусы химик матдә - фтор. Уны һуңғы йылдарҙа кеше ҡулланған күп әйберҙәргә ҡушалар.

(Дауамы 10-сы биттә).

***Быны үҙемдән дә беләм. 23 йыл элек мин бер бабай һымаҡ хәлдә инем. Органдарҙа эшләгәс, йыл һайын медицина тикшереүе үтә инек. Хроник гастрит менән яфаландым, был сир ҡасан бөтөр, тип докторҙарҙан һорайым. Ғүмерең буйына дауаланырға тура киләсәк һиңә, тиҙәр. Ангинамдан да ҡотола алманым, етмәһә, бауырымдың насар эшләүе беленде, уны "токсик" хәлдә, тинеләр. Аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә эшемдә микроинфаркт үткәрҙем. Бына бөгөн ошо сирҙәрҙең береһе лә минең организмымда юҡ. Был - минең космоэнергетик дауаланыуымдың һөҙөмтәһе.***

*✓ Ата-бабаларыбыҙ мөғжизәләрҙән ваз кисмәгән, ерҙә лә, Йыһан киңлектәрендә мөғжизәле көстәр булыуына ышанып йәшәгән. Киләсәктә төрлө мөғжизәләр күрһәтә алған кешеләр күбәйә барасаҡ.*

# КЕШЕ ҺӘМ ЙЫҺАН,

## йәки Яңы йыл алды фәлсәфәһе

***Күренекле химик Менделеевтың элементтарҙың периодик таблицаһын тәүҙә төшөндә күреүе хаҡында бар донъя белә. Төш күрмәгән кеше юҡ. Ә төшкә һәр бер осраҡта ла ниндәйҙер бер мәғлүмәт һалына. Кемдер ниндәй төш күргәнен аныҡ ҡына һөйләп бирһә, күптәребеҙ күргән төштәрен иҫләй алмай.***
***Төш - үҙенә күрә ниндәйҙер бер кодҡа һалынған мәғлүмәт, әгәр кеше ошо кодтың шифрына төшөнә алһа, уға бик күп нәмә асылыуы мөмкин. Хатта киләсәктә ниҙәр булырын да төш аша асыҡлай алыу мөмкинлеге бар.***

**Ябай кеше йыһан кимәлендә барған үҙгәрештәрҙе һиҙә тоя аламы һуң?**

- Йыһан кешегә, уның менталь һәм башҡа төрлө тән формаларына бер өҙлөкһөҙ тәьҫир итеп тора. Был бигерәк тә кешенең йоҡлаған сағында ғына күргән төштәрендә сағыла. Кешенең хатта әле саҡ-саҡ йоҡоға китә башлаған мәлендә лә төш күреүе мөмкин. Бындай төш күргән кеше йоҡлап барған көйөнә аныҡ итеп фекерләй ала, уйлана, күргәнен баһалау мөмкинлегенә эйә. Ул хатта күргән төшөн үҙе теләгәнсә үҙгәртә лә ала: ниндәйҙер күрекһеҙ, бысраҡ урынды сәскәле туғайға алыштыра, ниндәйҙер әлегә тиклем хәл итә алмаған мәсьәләнең сиселеш юлын таба. Бына үҙемдең бер төшөмдә бер кеше янына килəм, ә ул күҙҙән юғала ла, икенсе бер урында пәйҙә була. Уға яҡынлашыу менән тағы юғала, шаҡылдатып, үҙе торған урынды миңә белдерә. Шуныһы ҡыҙыҡ, мин уның янына атлап түгел, осоп килә алдым: күрәһең, ошо төш аша миңә телепортацияның ысынбарлыҡта булыу мөмкинлеге хаҡында белдергәндәрҙер.

**Өфөлә йәшәгән күренекле башҡорт ғалимы, талантлы химик Нәжип Вәлитов 1997 йылда донъя күргән ғилми хеҙмәтендә Ер шарында булған бөтә хәл-ваҡиғаларҙың, шул иҫәптән һәр кешенең уй-кисрештәренең, йыһандың теләһә ҡайһы урынында, ул нисек кенә алыҫ булмаһын, шундуҡ билдәле булыуын электромагнит тулҡындары һәм гравитация бәйләнештәре аша башҡарылыуын теүәл формулалар ярҙамында раҫлай алды. Кеше мейеһенең һәм организмының электромагнит тирбәлеше ни тиклем генә бәләкәй булмаһын, ул күҙ асып йомғансы Йыһан киңлегенә тарала. Был асышты Йыһандың Абсолют Рухы, йәғни Аллаһы Тәғәләнең барса нәмәне белеп-күреп тора алыуын иҫбатлаусы факт, тип тә билдәләргә булыр ине. Бәлки, тап шуның өсөн католиктарҙың Рим Папаһы башҡорт ғалимына үҙенең Рәхмәт хатын ебәргәндер...**

- Күренекле химик Менделеевтың элементтарҙың периодик таблицаһын тәүҙә төшөндә күреүе хаҡында бар донъя белә. Төш күрмәгән кеше юҡ. Ә төшкә һәр бер осраҡта ла ниндәйҙер бер мәғлүмәт һалына. Кемдер ниндәй төш күргәнен аныҡ ҡына һөйләп бирһә, күптәребеҙ күргән төштәрен иҫләй алмай. Төш - үҙенә күрә ниндәйҙер бер кодҡа һалынған мәғлүмәт, әгәр кеше ошо кодтың шифрына төшөнә алһа, уға бик күп нәмә асылыуы мөмкин. Хатта киләсәктә ниҙәр булырын да төш аша асыҡлай алыу мөмкинлеге бар. Тибет монахтары Йыһан менән бәйләнешкә инеү һәм билдәле бер мәғлүмәт алыу өсөн медитация алымын ҡуллана. Боронғо замандарҙа медитация һүҙе тәрән уйҙарға батыу процесын аңлатҡан. Будда үҙе лә бер меңйәшәр ағас төбөндә медитатив халәткә инеп, Йыһандан күп төрлө мәғлүмәт алыуға өлгәшкән.

**Әйткәндәй, 2005 йылда 1927 йылда вафат булған Пандито Хама Лама Итигэловтың кәүҙәһен кедр ағасынан эшләнгән "табутынан" сығарып, төрлө тикшеренеүҙәр уҙғаралар. Уның үле кәүҙәһе, барса ағзалары тарҡалмайынса һаҡланып ҡалған. Ул теге донъяға китер алдынан уҡыусыларын йыйып алып, медитация барышында был донъянан китәсәге хаҡында һәм 75 йыл уҙғас кире ҡайтасағы хаҡында белдерә. Кешенең йәне икенсе үлсәмгә күсеп китә аламы?**

- Әлбиттә, бындай хәлдәрҙең булыуы бик мөмкин. Хатта икенсе үлсәмдәрҙә оҙаҡ йылдар йәшәп, бик күп мәғлүмәт туплап, яңынан тыуыусылар ҙа була. Ғөмүмән, кешенең физик тәне йәшәүҙән туҡтағас, 3 тәүлектән эфир тәне юғала, астраль, йәғни тойғолар тәне 7 - 9 тәүлек эшләй ала, менталь тәне 40 тәүлеккә тиклем йәшәй, ә кешегә хас булған барса мәғлүмәт юҡҡа сыҡмай, уның 7-се үлсәмдәге каузаль тәненә күсә, уны кешенең кармаһы, тип тә атайҙар. Унда һаҡланған мәғлүмәттәр хаҡында махсус методтар ҡулланып белеп була.

**Йәш регрессияһы методын (гипноз аҫтында) ҡулланып, пациенттарҙың элекке тормоштары хаҡында мәғлүмәт алып булыуын үҙ тәжрибәм аша уҙған быуаттың 80-се йылдарынан уҡ белә инем. Тәжрибәләрҙә ҡатнашҡан һәр кем әсә ҡарынына бала йәне рәүешле ингәнгә тиклем күктә, йәғни йыһан ҡатламдарында йәшәүҙәре хаҡында һөйләне. Улар ерҙә йәшәгән ҡәҙимге кешеләргә ярҙам итә аламы?**

- Мин уларҙың теге йәки был рәүешле ярҙам итә алыуына ышанам. Бына, үҙебеҙҙең тормошобоҙҙа кинәт кенә инде онотолоп, юғалып бөткән хәл-ваҡиғалар иҫкә төшә, шулай уҡ әруахтар төш күргәндә кешегә ниндәйҙер мәғлүмәт бирә ала, нимәнәндер киҫәтә, йүнәлтә алалар, тим. Бына интуиция тип аталған төшөнсә бар. Ул нисек хасил булалыр, әйтеүе ҡыйын. Бәлки, интуиция аша килә, тип иҫәпләнгән мәғлүмәттәрҙең дә ана шул беҙ фараз иткән 7-се үлсәмдән төшөрөлөүе бар бит. Һәм бында, һис шикһеҙ, йыһан нурҙарына билдәле бер код менән һалынған мәғлүмәтте аса белеү технологияһына өйрәнеү фарыз. Багиров институтында уҡығанда бер йөрәк сирле ҡатын үҙенең нисек итеп арыуланып китеүе хаҡында һөйләгән ине. Ул ике тапҡыр инфаркт кисерә, табиптар уның көндәре һанаулы ҡалғанын белдереп, өйөнә алып ҡайтырға ҡуша. Иң күбендә 4-5 көндән йөрәге туҡтаясағы хаҡында асыҡтан-асыҡ әйтәләр. Башҡа сара ҡалмағас, бик көслө космоэнергетты саҡыралар, ул бер-бер артлы сеанстар уҙғарып, ошо ҡатындың чакра каналдарын асыуға өлгәшә. Ошондай дауалау был ҡатынға килешә, ул үлмәй, бер аҙҙан үҙен бик яҡшы тоя башлай. Ярты йыл үткәс, кардиоүҙәккә тикшерелергә бара. Кардиологтар уның йөрәгендә инфарктан ҡалған йөйҙәрҙе тапмай һәм ҡасандыр инфаркт кисереүен инҡар итә. Әммә ошо ҡатындың медицина картаһын ҡарап, иҫтәре китә: унда ике тапҡыр киң күләмле инфаркт булыуы хаҡында диагноз теркәлгән була. Ҡайһы саҡта шулай ҙа була: космоэнергеттар дауалап һауыҡтырған кеше яңынан табиптарға мөрәжәғәт итһә, улары элек беҙ дөрөҫ диагноз ҡуя алмағанбыҙ, тип аҡлана башлай, сөнки сир эҙһеҙ юҡҡа сыҡҡан.

**Организмда регенерация процестары кеше тыуғандан алып бара, мәҫәлән, киҫелгән тире, мускулдар уңала, һынған һөйәктәр ҡайтанан йәбешә һ.б. Әммә ҡартая барған һайын был процестар көсһөҙләнә, аҡрыная бара. Космоэнергетика ысулдары менән ағзаларҙың регенерация мөмкинлектәрен көсәйтеп буламы?**

- Алдараҡ әйткәнебеҙсә, эфир тәне физик тәнде бермә-бер ҡабатлай, унда һәр бер ағзаның күсермәһе бар. Кешенең йыһан менән бәйләнешкә инә торған каналдарын аса алһаҡ, уның теләһә ҡайһы ағзаһының регенерация мөмкинлектәрен көсәйтә аласаҡбыҙ. Миңә дауаланырға бер ҡатын килгәйне, ул үҙе табип, медицина фәндәре кандидаты. Проблемаһы шундай: инә ятҡылығында бик ҙур киста үҫеп сыҡҡан. Ни барыһы 5 сеанстан һуң уның кистаһы юҡҡа сыҡты. Иглиндән килгән бер уҙаман тайып йығылып, ҡулын һындырған. Уны ла дауаланым. Аҙаҡтан ул миңә шылтырата, рентгендан ҡараған табип уға "Һинең ҡулың һынмаған бит, һынған урыны булһа, рентген күрһәтер ине", тип әйткән.

Космоэнергетика өсөн тағы ла бер ҡыҙыҡлы нәмә - кешене алыҫтан тороп та дауалап була, бының өсөн уның фотоһы ла етә. Белореттан бер бәләкәй ҡыҙ бала бәүел итә алмай интеккән. Табиптарға йөрөйҙәр, төрлө дарыуҙар ҡулланып ҡарайҙар - һөҙөмтә юҡ. Шул баланың фотоһын ебәрҙеләр, сеанстарҙы арауыҡ аша башҡарҙым. Эске күреүем (интуиция, тип тә әйтеп булалыр) аша баланың һейҙек ҡыуығында күп кенә ҡабырсаҡ кеүек нәмәләр булыуына төшөндөм. Мин уҙғарған сеанстар барышында ошо "ҡабырсаҡтар" аҡрынлап аҙая башланы һәм бөтөнләйгә юғалды. Бала һауыҡты.

Тағы ла бер миҫал. Учалынан бер әбей шылтыратты, аяғынан яҙған, йөрөй алмай, түшәктә ята. Өфөгә килә алмай. Мин уға берәй туғанын минең сеанстарға ебереү кәрәклеген аңлаттым. Бер йәш кенә туғаны, студент, 6 сеанста булды. Ике айҙан һуң әлеге әбей тағы шылтыратып, рәхмәт уҡыны: ул аяғына баҫҡан, үҙаллы йөрөй башлаған.

**Кеше Йыһанға үҙаллы мөрәжәғәт иткән хәлдә Йыһан көстәренән ярҙам алып буламы?**

- Бының өсөн ныҡ инанған кеше булырға кәрәк. Дини кешеләр ҙә Аллаһы Тәғәләнән шәфҡәт көтөп, уға намаҙ ҡылалар, ярҙам һорайҙар. Бер кемде лә көсләп дауалап булмай, тик мөрәжәғәтеңдең ихлас һәм тәрән хисле булыуы кәрәк.

**Космоэнергетика дини инаныстарға ҡаршы килмәйме?**

- Юҡ, килмәй. Байтаҡ йылдар элек Мәскәүҙә космоэнергетика буйынса съезд булып уҙғайны. Унда саҡырылған ҡунаҡтар араһында Ислам һәм христиан руханиҙары ла булды. Мулла ла, поп та үҙҙәренең сығыштарында космоэнергетика менән шөғөлләнеүҙең дингә ҡаршы килмәүе, бер ниндәй ҙә ҡапма-ҡаршылыҡтар булмауы хаҡында белдерҙе.

**Һеҙ "Мөғжизәләр заманы. Космоэнергетика һәм һаулыҡ" тигән китап авторы. Бала саҡта барыбыҙ ҙа мөғжизәләргә ышанып йәшәйбеҙ. Йылдар уҙа барған һайын мөғжизәләр юҡҡа сыға. Ни өсөн шулай?**

- Ә бит бынан бер быуат элек кенә ата-бабаларыбыҙ мөғжизәләрҙән ваз кисмәгән, ерҙә лә, Йыһан киңлектәрендә мөғжизәле көстәр булыуына ышанып йәшәгән. Улар күҙгә күренмәгән донъялар булыуын, күктең ете ҡатын, параллель донъяларҙағы йән эйәләрен - йәй, ҡыш, ел, урман, өй эйәләре булыуына ышанған. Кирәмәт көсөнә эйә булған суфыйҙар хаҡында ишеткәнебеҙ бар. Мин Һиндостанға Саид Бабаны күрергә барғайным. Уның янында булғандан һуң бөтә йәнем-тәнем бер ләззәтле халәткә инде, сөнки уның күкрәгендәге һөйөү кристалы бар тирә-яҡты һәм уның янындағы барса кешеләрҙе лә һөйөү көсө менән нурландыра. Мин шуға тиклем дә, унан һуң да шундай рәхәтлекте кисерә алғаным булманы - бына ошо үҙе үк донъяла мөғжизәләр булыуын раҫлап тора. Киләсәктә төрлө мөғжизәләр күрһәтә алған кешеләр күбәйә барасаҡ. Мөхәббәт кристалы һәр кемдә бар, тик уны нурландырырға өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, кисен йоҡлап китер алдынан үҙегеҙҙе йәш егет йә иһә йәш ҡатын-ҡыҙ итеп күҙ алдына килтереп, ошо күҙгә күренмәгән кристалл менән эфир тәненде нурландырырға өйрәнһәң, төн буйына үҙеңде йәш һәм һаусәләмәт итеп тоясаҡһың.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яңы йыл алдынан космоэнергет Рауфан Мортазин уҡыусыларыбыҙға бына нимәләр теләне: "Һәр кем был ергә тикте юҡҡа килмәгән, һәр кешенең тәғәйенләнеше бар. Тәбиғәт һәм йыһан менән гармонияла йәшәп була. Үҙегеҙҙең йән һәм тән мөмкинлектәрен асырға, һәләттәрегеҙҙе үҫтерергә ынтылығыҙ - һуң инде тимәгеҙ. Киләсәккә ышанып йәшәү зарур. Ҡурҡып, хәүефләнеп йәшәү, туҡтауһыҙ борсолоу кешене ҡартайта. Кеше өсөн иң файҙалы фекер: "Барыһы ла яҡшы буласаҡ!"**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

✔ *Әйҙәгеҙ, хәшәрәтлеккә, һәр төрлө күңелһеҙлектәргә, мәрхәмәтһеҙлеккә, яньял ҡубарыуға саҡырған, кеше йәнен ҡыйыуҙарға, зина ҡылыуҙарға ҡоролған китаптарҙы уҡымайыҡ, ундай фильмдарҙы ҡарамайыҡ!*



ӘЙҘӘГЕҘ, УҠЫМАЙЫҠМЫ?

**"Уҡып - мулла, суҡып ҡарға булмаҫһың" ти халыҡ мәҡәле. Ысынлап та, мулла булыр өсөн уҡыу ғына етмәйҙер, күрәһең, сөнки һәр уҡыған кеше мулла булып китә алмайҙыр. Мулла булыр өсөн иң беренсе нәүбәттә Аллаһҡа тәрән ышаныу, иманлы, күңеленән саф булыуы талап ителәләр. Өҫтәүенә, үҙенән артындан башҡаларҙы дини юлға әйҙәр өсөн тәбиғи һәләтең дә, юлбашсылыҡ талантың да талап ителәләр һ.б.**
**Ә инде суҡыуға килгәндә, барыһы ла ябай ғына аңлашылып тора: бөтә ҡоштарҙың да суҡышы бар, улар барыһы ла суҡый белә, әммә уларҙың ҡарғалары ғына ҡарға тип атала.**

# УҠЫУ АҠЫЛЛЫЛЫҠ БӘЛӘҺЕМЕ?



...Тыуған ауылымда ике егетте белә инем. Инем, тиеүем шунан, уларҙың икеһе лә хәҙер ысын донъяла. Егеттәрҙең икеһе лә бәләкәй саҡтарынан алып китап, гәзит-журнал уҡыуға әүәҫ инеләр. Мәктәбебеҙ, ауылыбыҙ китапханаларында улар уҡымаған китап ҡалмағандыр. Әҙәби китаптар уҡыу ғына етмәй, улар ҡулдарына эләккән теләһә ниндәй китапты йотлоғоп уҡыны. Бик тә бик уҡыр китап йә журнал булмаһа, улар төрлө кластарҙың физика, география, алгебра, математика, химия дәреслектәрен булһа ла ҡулдарына алып ултырыр булды. Эрудиттар ҙа ине үҙҙәре. Үҙәк телевидениенан "Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?" ("Что? Где? Когда?") тапшырыуы башланыуы була, ундағы эрудиттарға бирелгән ҡатмарлы һорауҙарға шундуҡ яуаптарын да табып аптырата торғайнылар. Һәр төрлө кроссвордтарҙы сисеү ҙә улар өсөн бер ни торманы.

Аҡыллылыҡ бәләһеме, күп уҡыу ғәләмәтеме, егеттәрҙең икеһе лә тормошта үҙ урынын таба, тәбиғи һәләттәрен бойомға ашыра алманы. Уларҙың береһе ул саҡтағы Башҡорт дәүләт университетының тәүҙә химия факультетына уңышлы имтихан тапшырып уҡырға инде лә, күп тә тормаҫтан, уны ташлап, икенсе йылына физика-математика факультетына күсте, унда ла оҙаҡ уҡыманы. Аҙаҡ Михайловка ҡасабаһында умартасыға уҡыны ла, тыуған яғына ҡайтып китте.

Икенсе ауылдашым ул саҡтағы Башҡорт дәүләт педагогия институтының филология факультетына уҡырға инде. Унын башлы икәнлеген шундуҡ аңғарҙы уҡытыусылары, аспирантураға йүнәлтмә бирҙеләр. Уҡыуын тамамлағас, төбәктәге юғары уҡыу йорто филиалында ла уҡытып йөрөнө. Кандидатлығын яҡлап өлгөрмәне, баҡый донъяға күсте.

Егеттәрҙең икеһенең дә белмәгән нәмәләре булманы, улар физика, математика, химия, тарих, философия, астрономия, философия, теология фәндәрендә иркен йөҙҙө, башҡорт, рус, донъя әҙәбиәтен ятҡа белде - әммә үҙ-әҙерәнең тәбиғи һәләте, тәғәйенләнеше буйынса төп юҫыҡтарын табып, үҙҙәрен бойомға ашыра алманы, һөҙөмтәлә йәшәүҙең ҡыҙығын таба алмай, "йәшел йылан" йоғонтоһона ла ныҡлап бирелеп, баҡый донъяға китеп барҙылар.

Хәҙер генә уларҙың хәлдәрен аңларлыҡмын. Беҙҙә бала саҡтан белем алырға, уҡырға өндәнеләр. Әммә уҡыуҙың һәр осраҡта ла уңышҡа килтермәүе хаҡында ғына иҫкәртмәнеләр. Ни өсөн тигәндә, уртаса алғанда кеше үҙ ғүмерендә өс меңләп китап уҡый алыуын күҙ уңында тотһаҡ, был осраҡта кешенең үҙенә иң кәрәкле булған китаптың уҡымауын да иҫтә тоторға тейешбеҙҙер. Әгәр ҙә беҙ китапты аңһыҙ рәүештә, маҡсатһыҙ, текст менән эске диалог ҡороп уҡымаһаҡ, уҡығаныбыҙҙы зиһен фильтры аша үткәрмәһәк, ул китап беҙгә белем шишмәһе булыуҙан туктаясаҡ. Был осраҡта уҡығаныбыҙ шундуҡ онотоласаҡ, хәтеребеҙҙә лә, йөрәгебеҙҙә лә тороп ҡалмаясаҡ. Бындай китаптар беҙҙең тормошҡа ынғай тәьҫир итмәй, донъяны танып белеүебеҙгә йоғонто яһамай, беҙҙе зиһенле лә, тәрән белемле лә итмәй.

Былар барыһы ла бындай уҡыуҙың өҫтә генә ятҡан зыяны. ***Ысын зыяны тағы ла тәрәнерәк: ул беҙҙең фекер йөрөтөү структураһын үҙгәртә. Әгәр ҙә беҙ мәғлүмәтте анализлыҙ, икеләнеүһеҙ, проблемаһыҙ ҡабул итергә өйрәнһәк, өҫтән-мөҫтән генә фекер йөрөтөп, мәсьәләнең асылын аңларға тырышыуҙан баш тартып, әҙер формулалар, матур һүҙҙәр менән генә риза була башлайбыҙ. Һөҙөмтәлә һәр бер яңы мәғлүмәтте беҙ реклама рәүешендә һыҙланыуһыҙ, хәҡиҡәт итеп ҡабул итәбеҙ.*** Артабан инде беҙ һәр бер осраҡлы мәғлүмәтте еңел генә ҡабул итеп, уны инаныуыбыҙ итеп таныйбыҙ. Тап ошо саҡта кешенең тормошонда етди хаталары башлана ла инде, әммә беҙ был саҡта ул хаталарҙың сәбәбен аңларлыҡ хәлдән күпкә алыҫлашып өйрәнәбеҙ. Ярар әле, ул хата һинең үҙеңә генә ҡағылһа, күп осраҡта унан башҡалар, иң беренсе нәүбәттә яҡындарың, туғандарың зыян күрә.

***Тормошоңда практик әһәмиәте булмаған китаптарҙы уҡыуың да айырыуса зыянлы.*** Был осраҡта кеше күберәк иллюзияға бирелә башлай. Реаль хәрәкәттәр булмаған осраҡта иллюзиялар бушҡыуыҡ булып ҡалыусан. Кеше бындай саҡта яйлап булғаны менән ризалаша, хыялдан баш тарта, унын ихтыяр көсө кәмей.

***Үҙенең статусын күтәреү, башҡалар алдында үҙен белемле итеп күрһәтеү өсөн уҡыусылар ҙа юҡ түгел.*** Иҫегеҙҙә булһа, совет осоронда хатта фатирҙарҙа ҡуйылған китап кәштәләрендә том-том китаптарҙың үҙҙәре түгел, ә алдатҡыс һүрәттәре, мишуралары ғына торҙо. Йәнәһе, был фатирға килеүселәр ошо китап һүрәттәренә ҡарап, хужаларҙың интеллектуаль кимәле хаҡында фекер йөрөтә булып сыға инде.

Китап уҡырға яратмаусылар бындай шөғөлдөң ете зыянын билдәләй. Уларҙың юмор менән әйтелгәнен дә аңлауы ауыр түгел:

- Ысынбарлыҡтан алыҫлашыу.
- Китап уҡыусы һыҙланыу, күңел ҡайтыуҙары кисерә.
- Дөрөҫ булмаған ҡағиҙәләргә өйрәнә.
- Килтерелгән мәғлүмәт менән генә риза булыу.
- Ваҡытынды һәм аҡсаңды бушҡа сарыф итәһең.
- Ҡорбан булыуҙы дөрөҫ тип ҡабул итеү.
- Китап уҡыусы мәғлүмәттең төбөнә төшмәй, бары тик сит кешенең фекерҙәрен һәм теләктәрен генә үҙенә йөтә.
- Мауығыусы китабын ҡосаҡлап диванда ятҡан арала унын ысын тормошо янынан ғына үтеп тә китә. Ул уҡығанынан практик файҙа алмай, бер ниндәй ҙә ғәмәл башҡармай, бары тик мейеһен кәрәкмәгән мәғлүмәт менән тыңҡыслап тултыра ғына.

***Әйе, ысынбарлыҡтан айырылған эстеттар ҙа, романтиктар ҙа китап уҡырға ярата.*** Минә айырым йүнәлештә дини тәғлимәт менән шөғөлләнеүселәрҙең бер тәртибе ныҡ оҡшай: уларҙа мөрит тик мөршите әйткән китаптарҙы ғына уҡып белем ала, ул ҡушҡан ғәмәлдәрҙе генә башҡара. Бындай тәртиптең ни өсөн шулай ҡуйылыуы һүҙһеҙ ҙә аңлашыла: әгәр ҙә мөрит башҡа сығанаҡтарҙан белем ала башлаһа, үҙе нисек теләһә, шулай ҡыланһа, унын йүнәлеше лә үҙгәрәсәк. Бәлки, төп йүнәлеште ныҡытыу маҡсатында сағыштырыу һәм ғибрәт алыр өсөн башҡа юҫыҡтағы мәғлүмәтте лә үҙләштереү кәрәктер. Тик был осраҡта сит мәғлүмәтте һәм уларҙың миҡдарын әлеге лә баяғы мөршит, беҙҙенсә, уҡытыусы билдәләргә тейештер.

***Китаптың икенсе һөйләмен уҡығанда тәүге һөйләмен онотҡан, нимә уҡығанын белмәгән, наркоман һымаҡ уҡыу процесынан ләззәт алған битараф уҡыусылар ҙа була.*** Бындай уҡыусыларҙан киләсәктә кемдәр килеп сығыуын уйлауы ла ҡурҡыныс. Сөнки онотторн тип уйлаған тәүге һөйләмдәр һис тә онотолмай, кешенең аң төбөнә, аҫҡы аңына инеп ятып, һаҙлыҡ төбөнә батып һаҫып ятҡан үлән һымаҡ ҡасандыр бер килеп уҡыусыны һаҙ төбөнә һурып ала.

Яҙылғандарҙы аныҡыҙ аша үткәреп, үҙегеҙ һығымталар яһағыҙ, хөрмәтле уҡыусылар. Донъя негатив мәғлүмәткә лыҡа тулғанда бигерәк тә үҫеп килгән быуынға: "Әйҙәгеҙ, хәшәрәтлеккә, һәр төрлө күңелһеҙлектәргә, мәрхәмәтһеҙлеккә, яньял ҡубарыуға саҡырған, кеше йәнен ҡыйыуҙарға, зина ҡылыуҙарға ҡоролған китаптарҙы уҡымайыҡ, ундай фильмдарҙы ҡарамайыҡ!" тип өндәшке килә!

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*әйҙә...*

# БЫЛ КӘҢӘШТӘРГӘ ЛӘ ҠОЛАҠ ҺАЛ!

**Минең өлкән апайым деменция менән 8 йыл йәшәне. Деменция ул хәтер юғалыуҙы ғына түгел, ә башҡа төрлө аралашыу-фекерләү (телмәр, фекер итеү, үҙенең торған, йөрөгән урынын белеүе, һанау-иҫәпләү) һәләттәренең дә боҙолоуын аңлата. Апайымда был сир башҡаларҙа ла йыш осрай торған бәләкәй генә билдәләрҙән башланыуын мин аҙаҡ ҡына төшөндөм.**

- ***Тәүге билдә - апайым уҡыуҙан туҡтаны.*** "Күҙҙәрем арый, мәғлүмәттәр былай ҙа бик күп", тине йыш ҡына. Аҙаҡ, табиптар аңлатып биреүенсә, мейе ниндәйҙер көсөргәнеш алмаһа, тарҡала башлай икән. Нейрондар сигналдар алмай башлаһа, улар шундуҡ түгел, ә әкренләп һүнә бара. Лампа һымаҡ: ҡылы янғандан түгел, ә уны башҡаса тоҡандырмағанлыҡтан тоноҡлана.
- ***Тора-бара тышҡа сығып сәф һауала йөрөүҙе лә туҡтатты апайым.*** "Минә өйҙә лә һәйбәт", булыр ине яуабы. Ә ысынында иһә унда күңел төшөнкөлөгө башланған булған. Бер үк күренеш: дүрт яғындағы дүрт диуар, өйҙәге бер үк маршрут, бер үк еҫтәр - һәм мейе тормошҡа үҙенең ҡыҙыҡһыныуын, дәртен юғалта. Ҡартлыҡ - ул кешенең йәш һаны түгел, ә тормошонан яңылыҡтың юғалыуы. Бер-береһенә оҡшаш көндәр үтә тора, һәм мейе башҡаса яңырып тороуҙың кәрәге юҡ, тип уйлай.
- ***Дуҫтарына шылтыратыуҙан туҡтаны:*** "Ваҡыттары юҡ, уларҙы борсомау хәйерле". Ә бит тап ошо килтерә лә инде һүнеүгә. Гарвард ғалимдарының 75 йыллыҡ тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, социаль бәйләнештәр мейене витаминдарға ҡарағанда көслөрәк һаҡлай икән. Яңғыҙлыҡ нейрондар сылбырын өҙә. Кеше хәтерен түгел, ә үҙен тере итеп тойоу һәләтен юғалта.
- ***Аҙаҡ мин апайымдың көлөүҙе лә онота барыуын абайланым.*** Көлөү - нейрондарҙың ҡатмарлы эшмәкәрлеге: һулыш, хис-тойғо, моторика, юмор кәйеф күрһәткесе генә түгел, мейе һығылмалығы ла ул. Апайымдың берәй хәлгә шундуҡ, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә торған реакцияһы юғалды. Ул һирәгерәк ғәжәпләнә башланы. Тимәк, тормош менән кире бәйләнеш туктай барған тиген һүҙ ине был.
- ***Һәр яңы нәмәнән баш тартты:*** "Минә был ҡыйын, уға башым етмәҫ..." Унын һәр бер яңыны кире ҡағыуы - нейрондар араһындағы юлға тағы бер минус ине. Йылдар үтеү менән мейе бер ни ҙә эҙләмәй, ә иҫкене ҡабатлай башлай. Шулай итеп, деменция ҡапыл ғына килмәй, ул кешелә ҡыҙыҡһыныу һүнә барған һайын көсәйә генә.

**Иван ЛОГИНОВ.**
**Социаль селтәрҙән.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШ ҺӨЙӨҮСЕЛӘР...
## сәләмәтлеген дә хәстәрләһен

■ Ғалимдар раҫлауынса, норманан артыҡ эшләү һәм эштә оҙаҡ ултырыусылара араһында йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары менән ауырыусылар күберәк осрай. Лондондың университет колледжы белгестәре билдәләүенсә, аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүселәрҙә инсульт хәүефе 33 процентҡа юғарыраҡ. Был ғәҙәти, 35-40 сәғәт аҙналыҡ эш ваҡыты менән сағыштырғанда шулай. Күп эшләү йөрәк һәм ҡан тамырҙары торошона йоғонто яһай, шуға эш һөйөүселәргә офис эштәрен генә түгел, ә сәләмәтлеген дә хәстәрләргә ҡуша табиптар. Бының сәбәптәре төрлө: стресс та, хәрәкәт һәм спорт етешмәү ҙә, насар ғәҙәттәр ҙә сәләмәтлекте ҡаҡшата. Ғалимдар әйтеүенсә, йөрәк һәм ҡан тамырҙары өсөн ултырып эшләү бигерәк насар тәьҫир итә.

■ Үҙҙәрен агрессив тотҡан ир-егеттәрҙең үҙ-үҙенә ышанысы түбән була. Дөйөм алғанда, бөтөн ир-аттарға ла ирҙәрсә ҡылыҡтар, мәҫәлән, үҙенде хәүеф аҫтына ҡуйыу, психоактив матдәләр ҡулланыу, агрессияға бирелеү хас. Атланталағы ауырыуҙарҙы контролдә тотоу һәм профилактикалау үҙәге тикшеренеүселәре үҙен ысын ир-егет итеп тоймаған ир-аттарҙың ҡылыҡтарын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге 600 кеше ҡатнашҡан. Улар үҙҙәренең ҡылыҡтары тураһында һөйләгән, уның фекеренсә, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға ла яуап биргән. Ғалимдар асыҡлауынса, кем үҙен етерлек кимәлдә ҡыйыу һәм көслө тип иҫәпләмәй, улар күпкә агрессивыраҡ булған. Ундайҙар үҙенә ҡорбан табып, уға зыян килтереүҙән дә тартынмай, алкоголде лә йышыраҡ ҡуллана.

■ Күңел төшөнкөлөгөнән яфаланһағыҙ, китап уҡығыҙ, ти Британия ғалимдары. Кем дә кем стресс кисергән мәлендә китап уҡый, улар был хәлде еңелерәк кисерә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙы тәүҙә стресс тыуҙыра торған тест үтергә саҡырғандар. Һуңынан улар үҙ теләге буйынса стрестан ҡотолоу ысулын һайлаған. Теге йәки был сараның эффектын пульс һәм мускулдар тонусы торошо буйынса билдәләгәндәр. Һөҙөмтәлә, китап уҡыу стресс кимәлен 68 процентҡа түбәнәйткән. Пульс нормаға килһен, мускулдар көсөргәнештән арынһын өсөн бер нисә бит китап уҡыу ҙа еткән. Бындай мәлдә музыка тыңлау ҙа яҡшы, был саҡта стресс кимәле 61 процентҡа түбәнәйә. Тынысланыу өсөн йәйәү йөрөү, сәй йәки ҡәһүә эсеп алыу ҙа файҙалы.

■ Иртә торорға мәжбүр булыусыларҙа был күренеш шатлыҡлы тойғолар уятмай. Уяныуҙы еңелерәк кисерергә ҡайһы бер ысулдар ярҙам итәсәк. Йоҡлағанда баш мейеһе эшләүҙән туҡтап тора, тип уйларға ярамай, ул бары тик беҙҙең аңыбыҙҙы икенсе төрлө хәлгә генә күсереп тора. Кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһе әүҙемлектең бер нисә стадияһын кисерә, улар сама менән 1,5 сәғәт һайын алышынып тора. Шуға ла йоҡо ваҡыты ошо ваҡытҡа бүленергә тейеш, мәҫәлән, 6 йәки 7,5, 9 йәки 10,5 сәғәт йоҡларға кәрәк. Уятыусы көй һеҙгә оҡшарға тейеш. Уянғас та торорға кәрәк, торғас, тиҙ генә кирелеп алығыҙ, был организмды эш көнөнә көйләй, шулай уҡ тән мускулдарын яҙа. Иртә йоҡларға ятырға ғәҙәтләнегеҙ, был бигерәк тә һалҡын миҙгелдәрҙә актуаль. Иртән тәмле итеп сәй эсеү ҙә көндө бик көйлө башлап ебәрергә ярҙам итә.

БАЙРАМ ТАРИХЫНАН

# ЯҢЫ ЙЫЛ - ЯҘҒЫ ЙОЛАМЫ?



**Яңы йыл килеүен ҡаршылау - бөгөнгә тиклем килеп еткән иң боронғо ритуалдарҙың береһе, шуға күрә уны кешелектең тарихи байрамдары рәтенә индереп була.**

Был байрам нисек барлыҡҡа килгән һуң? Бының өсөн боронғо ҡәүемдәрҙең ваҡыт төшөнсәһен аңлай башлауы тәү шарт булып торған. Билдәле булыуынса, боронғо кешеләр аңында ваҡыт төшөнсәһе миҙгелдәр алышыныуы, тәбиғәттә йыл һайын ҡабатланып торған үҙгәрештәрҙе күҙәтеү нигеҙендә формалашҡан. Аңдары үҫешә барған кешеләр үткән ваҡытты иҫәпләү өсөн бик ҡулай булған үлсәм - йыл төшөнсәһен булдыра. Архаик замандарҙа һәр яңы йыл ерҙәге барса тереклектең яңырыу осоро - яҙ миҙгеле етеү менән башланған, һәм был мәңгелек күктең, тәбиғәттең кисектергеһеҙ ҡануны рәүешендә ҡабул ителгән. Кешеләр аңында яҙ башы - яңы йыл башы - яҙғы ерҙең сираттағы йәнләнеше, яңырышы рәүешендә сағылыш тапҡан. Тап шуның өсөн дә боронғо халыҡтар яңы йыл башын март айында байрам иткән.

Иң боронғо яҙма сығанаҡтарҙан булған Муса бәйғәмбәр закондарында (б.э.т. 2 мең йыл әүәл) Яңы йылды "авив" (башаҡ) айынан һанай башлау тураһында әйтелә, был март-апрель тирәләренә тура килә. Урта Азияла, Иранда, Афғанстанда һәм башҡа ҡайһы бер илдәрҙә бик боронғо дәүерҙәрҙән бирле Яңы йылды яҙ килеү менән байрам итеү йолаһы хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалып, Наурыҙ (Новруз, Нооруз) исемен йөрөтә. Был һүҙ боронғо пехлеви телендә "яңы көн" тигәнде аңлатыуы хаҡында фараз бар. Бәлки, төркисә "навруз" һүҙе яҡынса "нав арз"дан алынып, "яңы дөгө", "яңы ризыҡ" ("арз" - ғәрәпсә дөгөнө, йәғни ер ризығын белдерә) мәғәнәһендә ҡулланылғандыр. Шул уҡ дөгөнән бешерелгән былау ошо байрамдың иң изге һыйы итеп иҫәпләнгән. Әйткәндәй, беҙҙең "Иҫке ауыҙға - яңы аш", тигән әйтемебеҙ ҙә бик боронғонан ҡалғанға оҡшай, яҙ көнө үлән-фәлән, йәйен - еләк-емеште ауыҙ иткәндә шулай тибеҙ бит. Был байрам 21-22 мартҡа - көн менән төн тигеҙләшкән ваҡытҡа тура килә.

Әйтегеҙ әле, боронғо кеше яҙ килеү менән нимәгә шатланырға тейеш? Әлбиттә, ҡояшҡа, йылыға. Тимәк, Наурыҙ байрамында ата-бабаларыбыҙ бер-береһен яңы ҡояш, яңы ырыҫ, яңы ҡот (русса: новый год) һәм, әлбиттә, яңы йылы менән ҡотлаған-тәбрикләгән. Тарих төпкөлөндә йәшәгән башғарт атамалы ҡанбабаларыбыҙға ҡан-ҡәрҙәш остготтарҙың илаһы ла юҡҡа ғына Гот тип аталмағандыр ул.

Яңы йылдың яҙ байрамы булыуҙан туҡтауы Рим императоры Юлий Цезарь менән бәйле. Б.э.т. 45 йылда ул хәҙер юлиан календары тип аталған йыл иҫәпләү системаһын индерә. Тап шул ваҡыттан башлап Рим империяһында "календа"лар байрамы, йәғни Яңы йыл 1 ғинуарҙа билдәләнә башлай. Ғинуар (january, январь) атамаһы римлылар табынған ике йөҙлө илаһ Янустың исеменән алынған: уның йөҙөнөң бер яғы уҙған йылға ҡараһа, икенсеһе алдағы йылға төбәлгән була.

Яңы йылда бер-береңде ҡотлап, бүләктәр биреү ҙә бик боронғо күренеш икән. Шул уҡ Рим граждандары бер-береһенә Яңы йылда Янус илаһтың һүрәте төшөрөлгән тимер аҡсалар, башҡа бүләктәр тапшырған. Яңы йыл төнөндә ҡолдар хужалары менән бергә күңел асҡан, ашаған-эскән. Ә иң ҡиммәтле бүләктәр императорға тәғәйенләнгән. Император Калигула Яңы йылдың тәүге көнөндә үҙ һарайы алдындағы майҙанда римлыларҙан бүләктәр ҡабул иткән, кемдең ниндәй бүләк килтергәне махсус исемлеккә теркәп ҡуйылған.

Урта быуаттарҙа Англияла ла Яңы йыл 1 мартта байрам ителгән. 1752 йылдың Яңы йыл башын 1 марттан түгел, ә 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләү тураһында Англия парламенты махсус ҡарар ҡабул иткәс, ҡатын-ҡыҙҙар зыҡ ҡупҡан. Бер төркөм ҡатын-ҡыҙ парламент спикерына килеп, парламенттың ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер юлы бер нисә тиҫтә көнгә ҡартайтырға хоҡуғы юҡ, тип белдергән. Спикер ҙа аптырап ҡалмаған: "Һеҙҙең әйткәнегеҙ бер ни ҙә түгел, бары ҡатын-ҡыҙ логикаһының классик өлгөһө генә", -тип яуаплаған, имеш.

Рәсәйҙә шулай уҡ төрлө дәүерҙәрҙә йыл хисабын алып барыу һәм Яңы йыл башын билдәләү төрлөсә булған. Боронғо Рустә Яңы йыл, башҡа халыҡтарҙағы кеүек, 1 марттан башланған, ә йыл иҫәбе донъя яратылған ваҡыттан башлап алып барылған.

1699 йылда Европала оҙайлы сәйәхәттә йөрөп ҡайтҡан Петр I йыл башын 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләүҙе, йыл хисабын донъя башынан түгел, Христос тыуғандан алып барыуҙы талап иткән указ ҡабул итә. "Рәсәйҙә Яңы йылды төрлөсә иҫәпләү булғанлыҡтан, ошо числонан кешеләрҙең башын ҡатырыуҙы туҡтатырға һәм бар ерҙә лә Яңы йылды 1 ғинуарҙан алып иҫәпләй башларға. Ошо изге башланғыс һәм күңел асыу хөрмәтенә бер-береңде, эштә уңыштар һәм ғаилә именлеге теләп, Яңы йыл менән ҡотларға. Яңы йыл хөрмәтенә шыршылар ҡуйырға, балаларға уйындар ҡорорға, тауҙан санала шыуыу ойошторорға. Ә ололарға эскелек һәм танау емереү менән булмаҫҡа - бының өсөн башҡа көндәр ҙә етерлек", тиелә батша указында. Эйе, Петр батшаның был талаптарын беҙ бөгөн дә еренә еткереп үтәһәк, оҙайлы Яңы йыл байрамыбыҙ күңелле һәм ипле генә үтер ҙә китер ине ул...

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕН ҺАЙЛАЙЫҠ!

**Глобалләшеү дәүерендә шуны иҫтә тотоу мөһим: "Үҙебеҙҙекен һайлайыҡ, үҙебеҙҙекен һатып алайыҡ" тигән һүҙҙәр тик лозунг ҡына түгел, ә һаулыҡ, иҡтисад һәм экология тураһында хәстәрлек күреү, башҡорт халҡының милли аш-һыуы менән бәйле йолаларҙы һаҡлау ысулы ла ул.**

Тәүҙә туҡланыу тураһында. Бөтәбеҙ ҙә яҡшы белә: дөрөҫ туҡланыу - ул иң тәүҙә һаулыҡ нигеҙе. Борон атай-олатайҙарыбыҙ үҙҙәре етештергәнде генә ҡулланған, атап әйткәндә, ҡымыҙ, буҙа, ҡаҙы, тултырма, ҡорот, эремсек, һөҙмә, ҡаҡ... Шуға ла ашҡаҙан, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарының күбеһе урап үткән. Бөгөн урындағы етештереүселәрҙең яңы өлгөргән йәшелсәләре, емеш-еләге, һөтө һәм итенә өҫтөнлөк биргәндәр уларҙа консерванттар юҡлығын һәм яҡшыраҡ үҙләштерелеүен билдәләй. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, үҙебеҙ йәшәгән ерҙә үҫкән йәки етештерелгән ризыҡ иммунитетты нығытырға һәм ауырыуҙар хәүефен кәметергә ярҙам итә. Сит илдәрҙән килтерелгән емеш-еләк урынына үҙебеҙҙең миҙгелле йәшелсә, емеш-еләкте һайлайыҡ, тип әйтке килә. Улар арзаныраҡ ҡына түгел, тәмлерәк һәм файҙалыраҡ та. Шуны ҡағиҙә итеп алайыҡ: тәрилкәләге ризыҡтың 50 проценты йәшелсә, емеш, 25 проценты урындағы сығанаҡтарҙан аҡһымдар, ҡалғандары ярма булһын. Был диета түгел, ә энергия һәм яҡшы кәйеф биргән йәшәү рәүеше.

Хәҙер һайлау тураһында. Урындағы аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк биргәндә, беҙ дөрөҫ туҡланыуҙан тыш, үҙебеҙҙең фермерҙарға, урындағы етештереүселәргә лә ярҙам итәбеҙ, "Үҙебеҙҙекен һайлайыҡ" - ул йәмғиәткә инвестиция һалыу тигәнде лә аңлата. Мәҫәлән, районда фермерҙар экологик таҙа аҙыҡ-түлек үҫтерә, эш урындары булдыра һәм тупраҡты һаҡлай. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, агробизнесты яҡлау иҡтисадтың тотороҡлолоғон 20-30 процентҡа арттыра.

Шуға күрә, һүҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтке килә: йәрминкәләргә, фермер баҙарҙарына йөрөйөк йәки "Башҡортостанда эшләнгән" маркаһын һайлайыҡ. Был беҙҙең аҡсаны ғына экономияламай (урындағы тауарҙар импорт тауарҙарынан 15-20 процентҡа арзаныраҡ), шулай уҡ беҙҙең үҙ еребеҙҙең патриоты икәнлекте лә күрһәтә.

**Лена БАРЫЕВА.**

КЕМ НИСЕК?

# МИН ҺӨЙЛӘГӘНДӘРҘЕ ТЫҢЛАҺАҢ...

## хөрәфәт тимә, ҡоҙа



**Яңы йылды Ер шарында йәшәгән халыҡтар төрлөсә ҡаршылай, әммә ул, моғайын, иң тәүге һәм иң боронғо халыҡ байрамы булғандыр. Ғәҙәттә, төрлө мөғжизәләргә бәләкәй балалар ышана. Ә Яңы йыл төнөндә ололар ҙа үҙҙәрен балаларса тота - юғиһә, ошо байрам менән бәйле йола-хөрәфәттәр күп быуаттар дауамында теүәл үтәлә килмәҫ ине.**

Барса халыҡтарға ла хас булған беренсе хөрәфәт - Яңы йыл ҡаршылаған төндә ниндәй ҙә булһа уттар балҡып торорға тейеш. Шыршы ағасы ботаҡтарына янып торған шәмдәр эленгән, өй эстәрендә май һалынған лампаларҙа ут тоҡандырылған, һауаға янып торған уҡтар атылған, урамдарҙа усаҡтар гөрләп янған, фонарҙар янып торған, йылғалар буйлап һыу фонариктары ағыҙып ебәрелгән. Дары уйлап тапҡан ҡытайҙар тәүге осорҙарҙа уны бәләкәй генә мискәләргә һалып шартлатһа, һуңынан ракеталар осора башлаған, был йола хәҙер бар донъяға таралып киткән.

Байрам булғас, яңы йыл кисендә иң тәмле аштар, төрлө ризыҡтар әҙерләнә. ***Итальяндар,*** яңы йылдың уңышлы булыуын теләп, 13 төрлө аш-һыу әҙерләгән. Өҫтәлдә мотлаҡ ыуылдырыҡ, сәтләүектәр, виноград һәм һыра булырға тейеш. Яңы йыл төнөндә улар тәҙрә аша иҫке-моҫҡо әйберҙәрен урамға бырыктырыуҙы тормоштарын яңыртыу йәһәтенән бик тә ҡулайлы ысул тип иҫәпләгән.

***Францияла*** яңы йыл шыршыһы тирәләй сантондар тип аталған, ағастан йә иһә балсыҡтан эшләнгән һындар ҡуйылған. Балалар өсөн француз Ҡыш бабайы - Пер Ноэль бүләктәре аяҡ кейемдәре эсенә һалынған.

***Японияла*** яңы йылға ҡаршы төндә балаларҙың мендәрҙәре аҫтына 7 сихырсы төшөрөлгән елкәнле карап һүрәтен һалғандар, был бәхеттең ете ҡурсалаусыһын аңлатҡан. Өйҙәр бамбук һәм ҡарағай ағастарының ботаҡтары менән биҙәлгән, беренсеһе - оҙон ғүмер, икенсеһе тоғролоҡ символы итеп ҡабул ителгән. Яңы йылға ҡаршы төндә өр-яңы кейем кейгәндәр, яңы йылды уйнап, ҡысҡырып көлөп ҡаршылаһаң, йыл уңышлы була, тип юрағандар. Махсус ҡыңғырауҙы 108 мәртәбә ҡаҡҡандар, уның һәр яңғырауы менән кешеләрҙең бер яҙығы юҡҡа сығарылған. Бамбуктан эшләнгән тырмалар бүләк итеү киң таралған - йәнәһе, ошондай тырмалар менән бәхетеңде әләктереп алыу мөмкин була, тип уйлағандар.

***Ҡытайҙа*** Яңы йылды ике мәртәбә ҡаршылайҙар, беренсеһе - 1 ғинуарҙа, ул рәсми байрам. Ысын Яңы йылды ҡытайҙар Чунцзе тип атай, ул ысынбарлыҡта яҙҙы ҡаршылау байрамы. Ай календары буйынса ул 21 декабрҙән һуң килгән икенсе яңы ай башынан ай тулған көнгә тиклем 15 көн буйына байрам ителә. 2026 йыл Ҡытайҙа 17 февралдән башлана. Ошо көн алдынан ҡытайҙар ишектәренә парлы иероглифтар яҙылған ҡыҙыл ҡағыҙҙарҙы беркетеп ҡуя, унда изге теләктәр белдерелә. Шулай уҡ өй ишегенә "бәхет" һүҙен белдергән иероглиф баштүбән яҙылып ҡуйыла, сөнки ҡытайса "бәхет түңкәрелде" тигән иероглиф "бәхет килде" тигәнде аңлата. Ҡытай ҡатын-ҡыҙҙары Чунцзе байрамы алдынан иҙән һепермәй, сүп сығармай һәм киҫә-сәнсә торған предметтарҙы йыйы ҡулланмаҫҡа тырыша.

***Дания*** кешеләре үҙҙәренең яҡындарының ишек алдында иҫке һауыт-һабаны ватыу аша уларға бәхет юраған. Улар Яңы йыл төнөндә һикерешеп ярышалар: кем бейегерәк һикерә, шул уңышҡа өлгәшә.

Датчандарҙан ***гректар*** ҙа ҡалышмай: өй янында бөтә ғаилә йыйылғас, ғаилә башлығы һутлы гранат емешен бар көсө менән бинаның стенаһына бәрә: гранат емеше орлоҡтары ни тиклем йыраҡҡараҡ сәсрәй, ғаилә шул тиклем бәхетле буласаҡ икән. Гректарҙа һуған - уңдырышлылыҡ һәм яңы тормош символы, шуға күрә улар ишектәренә һуған элеп ҡуя. Ул ғына ла етмәгән, яңы йыл төнөндә йоҡлап киткән балаларының башына еңелсә генә һуған менән һуҡҡылап, уларҙы уяталар: ошолай итеп, Яңы йылда уларға бәхет теләйҙәр.

***Микронезияла*** (Океания утрауҙары) аборигендарға Яңы йыл алдынан исемдәрен алыштырыу хас: улар шул рәүешле ҡара көстәрҙең башын бутап, алдағы йылды именаман ғына үткәрә алыуға ышана.

***Колумбияла*** ҡайһы бер кешеләр сумаҙандарын әйбер менән тултыра һәм, үҙҙәренең өйҙәрен уратып, бер нисә ҡат йөрөп сыға: йәнәһе, алдағы йылда ҡыҙыҡлы сәйәхәткә сығып китеү мөмкин буласаҡ.

***Куба*** граждандары ла колумбиялардан ҡалышмай. Сумаҙандары төбөнә металл тәңкәләр һалып сығалар, карнавалдан да тороп ҡалмайҙар. Яңы йыл куранттары һуҡҡан саҡта йөҙөм ҡабалар. Сәғәт 12 тулғас, тәҙрәләренән йә иһә балкондан урамға һыу һибәләр.

Океан ярҙарында йәшәгән ***Бразилия*** кешеләре тулҡындар аша һикерә, 7 тапҡыр һикереп сыға алһаң, алдағы йыл бәхет килтерәсәк.

***Аргентинала*** иҫке документтарҙы ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртып, тәҙрә аша ташлайҙар. Португалияла кәстрүл ҡағалар.

***Болгарияла*** куранттар ҡағып бөткәс, байрам мәжлесендә уттарҙы һүндерәләр. Шунан һуң ҡараңғыла кемде теләйһең, шуны үбергә рөхсәт ителә!

***Шотландияла*** элек виски һаҡланған иҫке мискәләрҙе дегет менән буяп, ут төртәләр һәм урам буйлап түбән яҡҡа тәгәрәтәләр. Ҡараңғы төндә янып тәгәрәүсе мискәләрҙән дә ҡыҙыҡлыраҡ нимә бар һуң?

***Филиппинда*** өй эсенә түңәрәк әйберҙәрҙе - еләк-емеште, алма һәм әфлисун-мандариндарҙы өҫтәлдәргә ҡуялар, кеҫәләргә металл тәңкәләр һалалар, ҡатын-ҡыҙҙар "борсаҡлы" биҙәк төшөрөлгән күлдәктәрен кейә. Ай-һай, донъялары, ысынлап та, түңәрәкләнә бит!

***Эквадорҙа,*** тап беҙҙең Рәсәйҙә Масленица байрамындағы кеүек, ҡурҡылыҡ-ҡурсаҡтарҙы яндырып, уҙған йылдағы барсы яман нәмәләрҙе юҡ итәләр.

***Мьянмала*** Яңы йыл көндәрендә аяуһыҙ эҫе - кем ҡаршында осрай, шуны һыу менән ҡойондораһың. Күңелле, ишеү етмәһә аҙмы-күпме һыуынып алып була.

***Швецияла,*** тап Рәсәйҙәге кеүек, байрам 13 ғинуарға тиклем дауам итә. Улар ҡуйы итеп дөгө бутҡаһы бешерергә әүәҫ. Бутҡалары ла ябай түгел - унда миндаль емеше һәм тимер тәңкәләр бар. Кемгә миндаль сәтләүеге эләгә - шул мөхәббәтен таба, ә аҡса эләккәндәргә байлыҡ вәғәҙә ителә.

**Әйҙәгеҙ, хөрмәтле милләттәштәребеҙ, беҙ ҙә етеп килгән Яңы 2026 йылды изге өмөттәр менән ҡаршылайыҡ, хөрәфәттәргә ышанмаған хәлдә лә, алдағы тормошобоҙҙың яҡтыраҡ һәм бәхетлерәк булыуын теләйек.**

Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Ҡарағанат
**(Обыкновенный жулан)**



Ваҡ һайыҫҡандар ғаиләһенә ҡараған бәләкәй йәки урта ҙурлыҡтағы был ҡоштарҙың ҡойроғо оҙон, суйышы бер аҙ аҫҡа бөгөлөп тора, күҙҙәре аша ҡара һыҙат үтә. Ҡанаттары киң, ҡыҫҡа.

Ҡарағанат иһә сыйырсыҡ ҙурлығында. Арҡаһы - алһыу-ерән, ата ҡоштарҙың башы һәм ҡойроғоноң аҫты көлһыу, ҡорһағы алһыуыраҡ аҡ, ҡойроғо - ҡаралы-аҡ. Инә һәм йәш ҡоштарҙың ҡабырғаларында ҡара арҡыры һыҙат бар.

Урман ситендә, баҡса һәм парктарҙа оя ҡора. 4-7 йомортҡа һала. Бөжәктәр менән туклана, бәләкәйерәк ҡоштарға, кимереүселәргә һунар итә ала. Ризығын аҙаҡҡа һаҡлап ҡуйыр өсөн уны ағас ботаҡтарына сәнсеп ҡуя. Үҙенә яраҡлы шарттар булған бөтөн ерҙә лә осрай. Өфө тирәһендә лә бар.

### Алағанат
**(Чернолобый сорокопут)**



Сыйырсыҡ ҙурлығында, маңлайы ҡара, ҡорһағы алһыу. Осҡан сағында ҡанатындағы аҡ төҫтәге өсмөйөшлө таптары асыҡ күренергә була.

Ағас өңдәрендә, ҡыуаҡлыҡтар араһында оя ҡора. Ояһын әрем һәм башҡа үсемлектәрҙең ботаҡтарынан яһай. 5-7 йомортҡа һала. Бөжәктәр һәм үрмәкселәр менән генә туклана.

В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин алағанатты Урал алдында осратмай, шуға ла уны осоп китеп барышлай ғына туҡтап китә торған ҡош тип иҫәпләй. Урал арьяғында Таналыҡ йылғаһының үрге ағымында, Талҡаҫ күлендә таралған. Беҙ уны Шишмә районында тимер юлдан йыраҡ түгел урында, Дим йылғаһы буйында тап иттек. Был 1962 йылдың июне ине. Ошонан һуң алағанатты күргәнебеҙ булманы.

### Ваҡ һайыҫҡан
**(Серый сорокопут)**



Оло ҡоштоң арҡаһы көлһыу, ҡайһы саҡта ерән. Кәүҙәһенең аҫҡы яғы аҡ. Суҡышынан күҙҙәре аша ҡолағына ҡара һыҙат үтә. Ҡойроғо, шулай уҡ суҡышы, тәпәйҙәре ҡара. Тышҡы ҡиәфәте менән һайыҫҡанға оҡшап тора, шуға ла рус телендә ул "сорокопут" тип атала һәм "путать с сорокой" тигән мәғәнәне бирә.

Беҙҙең кинлектәрҙә оя ҡороп йәшәгән ҡош, шулай ҙа бар ерҙә лә осрамай. Шуға ла ул Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китаптарына индерелгән. Өфө платоһында, Ләмәҙә, Сим йылғалары бассейнында, Юрүҙән йылғаһы үрендә осрай. Урал арьяғында оя ҡормай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЯРҘАМ ЮЛҒА СЫҠТЫ

**Башҡортостандан Махсус хәрби операция зонаһына 168-се гуманитар конвой юлға сыҡты. Был хаҡта республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов хәбәр итте.**



Гумконвой Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса власть органдары һәм ирекмәндәр көсө менән ойошторолған. Ул хәрби подразделениелар яугирҙарына броняҙы "Урал" машиналары, ағас материалдар, автозапчастар, инструменттар, аҙыҡ-түлек, дарыуҙар һәм шәхси гигиена саралары тупланған алғы һыҙыҡта кәрәкле әйберҙәрҙән тора.

Шулай уҡ Бөрйән районы халҡы ла республика хәрбиҙәре өсөн сираттағы гуманитар ярҙам йыйған. Алғы һыҙыҡҡа "Нива" автомобиле, алты мобиль мунса, тәгәрмәстәр, таҡталар, ОСБ-плитәләре, автономлы йылытҡыстар, кер йыуыу машинаһы, газ баллондары, маскировка селтәрҙәре, йылы ойоҡбаш һәм бейәләйҙәр, туғандарынан һәм яҡындарынан посылкалар оҙатылған.

Илеш районынан сыҡҡан гумконвой Курск өлкәһенә юлланған. Район хакимиәте башлығы Илдар Мостафин белдереүенсә, посылкалар, аҙыҡ-түлек, маскировка селтәрҙәре, инструменттар һәм яугирҙарҙың үтенесе буйынса йыйылған башҡа әйбер тейәлгән хәрбиҙәр өсөн тәғәйенләнгән ике "Нива" юлға сыҡҡан.

# ТОРЛАҠ - СИРАТТАН ТЫШ

**Рәсәйҙә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы бер нисә категория хәрби хеҙмәткәрҙәргә сираттан тыш торлаҡ алыу хоҡуғы бирелә. Законға Президент Владимир Путин ҡул ҡуйған.**

Документҡа ярашлы, бала саҡтан инвалид булған бер йәки бер нисә балаһы булған хәрби хеҙмәткәрҙәргә сираттан тыш торлаҡ йәки ҡуртымға алынған торлаҡ менән тәьмин итеү хоҡуғы бирелә.

Шулай уҡ торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн аҡса бүленә. Был хоҡуҡҡа хәрби-табиб комиссияһы тарафынан хәрби бурысын үтәгәндә алған яралары йәки ауырыуҙары арҡаһында һаулыҡ торошо буйынса хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ йәки сикләнгән яраҡлы тип танылған, дәүләт наградалары булған һәм хәрби хәрәкәттәр ветерандары булып торған хәрби хеҙмәткәрҙәр эйә.

Икенсе законға ярашлы, РФ-ның дәүләт сиген һаҡлау буйынса һәм МХО барған биләмәгә сиктәш төбәктәрҙә хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булыу сәбәпле ата-әсә ҡарауынан ҡалған балалар торлаҡ менән тәьмин итеүҙә дәүләт ярҙамы саралары менән файҙалана ала.

# БАТЫРҘАРҘЫ ДАНЛАП

**Кушнаренко районы үҙәге Кушнаренко ауылында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар хөрмәтенә арт-объект асылды. Ул Еңеү паркы алдында урын алды. "Яугир булыу - мәңгелеккә юл!" тип яҙылған унда.**

Сарала Кушнаренко районы хакимиәте башлығы Марат Латипов, райондың хәрби комиссары Александр Кулагин, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар, ветерандар һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, студенттар, уҡыусылар һәм урында йәшәүселәр ҡатнашты. "Был билдәнең ҡуйылыуы - геройҙар тураһындағы хәтерҙең йәшәйәсәген һәм буласаҡ быуын вәкилдәре өсөн һаҡланасағын күрһәткән сағыу өлгө. Арт-объект һәр кем үҙенең Ватаны тарихына хөрмәт һәм уның хәүефһеҙлеге һағында тороусыларға теләктәшлек белдерә алған урын буласаҡ", - тип билдәләне район етәксеһе.

Сараға килеүселәр арт-объектҡа сәскәләр һалды һәм, бер минутҡа тын ҡалып, һәләк булған яугирҙарҙы хәтергә алды.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫНҒА СӘБӘП ҠЫЛМАҒЫҘ!

**31 декабрҙән Башҡортостанда республика Хөкүмәте ҡарары менән янғынға ҡаршы махсус режим индерелә. Был осорҙа пиротехниканы махсус урындарҙа ғына атырға мөмкин. Өфөлә фейервек осороу өсөн түбәндәге майҙансыҡтар билдәләнде:**

**Дим районы.** "Дим" мәҙәниәт һәм ял паркы, Евгений Столяров урамындағы 2-се йорт ҡаршыһындағы асыҡ майҙансыҡ һәм Карьер күле ҡаршыһындағы өс майҙансыҡ.

**Калинин районы.** Александр Спивак урамындағы асыҡ майҙансыҡ, "Ал сәскә" скверы һәм "Машинстроитель" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙан.

**Киров районы.** "Кояшлы" пляжы, "Торатау" конгресс-холлдан түбән Ағиҙел йылғаһы буйы, Әй урамы, 16-сы йорт ҡаршыһындағы асыҡ майҙансыҡ.

**Ленин районы.** Әсхәт Мирзаһитов урамындағы "8 Март" торлаҡ комплексы һәм "Водник" стадионы янында асыҡ арауыҡта урынлашҡан ике майҙансыҡ.

**Октябрь районы.** Максим Рыльский һәм Өфө йылғаһы Яры киçелешендәге асыҡ майҙансыҡ, СССР-ҙың 50 йыллығы урамындағы Башҡортостан Лайфстайл үҙәге араһындағы аллея һәм "Карауан" сауҙа үҙәге ҡаршыһында.

**Орджоникидзе районы.** "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексына төшөү урыны һәм Ш.Руставели урамындағы Ладыгин һәм Рәсәй урамдары араһындағы асыҡ майҙансыҡ.

**Совет районы.** Фейерверктар осороу өсөн рәсми рөхсәт ителгән майҙансыҡтар ҡаралмаған.

"Ҡышҡы айҙарҙа фажиғәле әҙемтәләргә килтергән янғындар һаны, ҡыҙғаныска ҡаршы, йыл һайын арта бара. Бындай осраҡтарға юл ҡуймау маҡсатында, Янғынға ҡаршы хеҙмәттең инструкторҙары урындарҙағы хакимиәт вәкилдәре менән берлектә көн һайын янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен тотоу буйынса иҫкәртеү рейдтары үткәрә һәм граждандарға торлаҡты янғындан һаҡларға, уны хәүефһеҙ итергә һәм янында һәләк булыуға юл ҡуймаҫҡа ярҙам итә", - ти Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов.

"Гаджетты төнгөлөккә зарядҡа ҡуйып ҡалдырыу уңайлы кеүек тойола. Асылда, һин янғын сығанағын розеткала ҡалдыраһың. Йоҡлап ятҡанда зарядлау ҡулайламаһы арҡаһында янғын секунд эсендә башланыуы ихтимал", - тип иҫкәртәләр ведомствоның матбуғат хеҙмәтенән.

**Ни өсөн был хәүефле:**

- ҡулайлама йәки ҡеүәт блогы артыҡ ҡыҙыуы ихтимал;
- селтәрҙә көсөргәнеш ҡапыл күтәрелгән осраҡтар була;
- зарядлау ҡулайламаһының төҙөк булмауы ла мөмкин.

**Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы:**

- ҡорамалдарҙы көндөҙ һәм күҙәтеү аҫтында ғына зарядларға;
- кесә телефонын яҫтыҡ аҫтында ҡалдырмаҫҡа;
- тик оригиналь зарядлау ҡулайламаларын ғына ҡулланырға тәҡдим итә.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы тюбингта хәүефһеҙ шыуыу ҡағиҙәләре тураһында иҫкәртә.**

Билдәләнеүенсә, тюбингтың тормоздары юҡ, ул сәғәтенә 40 км-ға тиклем тиҙлек ала. Уны аяҡ йәки ҡул менән контролдә тотоуы бик ауыр, күп осраҡта мөмкин түгел. Ял ҡыуанаслы һәм хәүефһеҙ булһын өсөн ошо турала бер нисә мөһим ҡағиҙәне тотоу мотлаҡ:

- Махсус йыһазландырылған битләүҙәрҙә ултырып ҡына шыуығыҙ. Аяғоҫта баҫмағыҙ!
- Шыуып китер алдынан мотлаҡ алға күҙ һалығыҙ - юл буш булырға тейеш.
- Түбәнгә ынғайлаған саҡта тюбингтың ҡабырғаларына ныҡ тотоноғоҙ.
- Тюбингтарҙы бер-береһенә бәйләп шыумағыҙ.
- Бер "ватрушка"ла ике кеше йәки тотош компания менән шыумағыҙ - был трассанан осоп сығыу хәүефен арттыра.
- 20 градустан да артыҡ ауыш булмаған һәм түбәндә туҡтау өсөн етерлек урын булған битләүҙәрҙә һайлағыҙ.
- Бер ҡасан да тюбингты ҡаргиҙәрҙәргә, квадроциклдарға йәки машиналарға таҡмағыҙ.
- Әгәр һеҙ "ватрушка"ны һыуыҡта өрҙөрһәгеҙ, уны йылы бинаға йәки автомобиль салонына индерер алдынан бер аҙ тынын сығарығыҙ. Юғиһә, йылыла эсендәге һауа киңәйеп, камера шартлауы ихтимал.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 - 30 декабрь "Аҡ ҡанатлы хыялым"** (А.Симуков, Р.Насибуллина инсц. Ф. Ғарипов), әкиәт. 6+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 декабрь "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 10:00, 12:00, 14:00 һәм 16:00. 6+

**26 декабрь "Зимняя небылица",** музыкаль әкиәт. 11:00, 13:00, 15:00 һәм 17:00. 6+

**27 декабрь "Холодное сердце"** (В. Гауф, М. Күлбаев), әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 6+

**27 декабрь "Новый год наоборот",** әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 0+

**28 декабрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 10:00 һәм 12:00. 0+

**29 декабрь "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хакимов), фэнтези. 10:00 һәм 12:00. 6+

**29 декабрь "Зимняя небылица",** музыкаль әкиәт. 11:00, 13:00 һәм 15:00. 6+

**30 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажаралы ваҡиға. 10:00 һәм 12:00. 6+

**30 декабрь "Зимняя небылица",** музыкаль әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 6+

**31 декабрь "Зимняя небылица",** музыкаль әкиәт. 11:00. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**26 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 10:00, 13:00, 15:00 һәм 18:00. 0+

**27 декабрь "Кар бабай һәм Ҡояшҡай"** (А.Малахов). 10:30. 0+

**27 һәм 28 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 12:00, 15:00 һәм 18:00. 0+

**28 декабрь "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 10:30. 0+

**29 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 15:00 һәм 18:00. 0+

**30 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+

**31 декабрь "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 12:00. 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 - 30 декабрь "Блогер в царстве Кощея"** Өфөнөң балалар өсөн төп Яңы йыл байрам сараһы. 11:00 һәм 13:00. 0+

**27 декабрь "BABY-Ёлка"** өс йәшкә тиклемге балалар өсөн Яңы йыл байрамы. 12:00 һәм 14:00. 0+

**28 декабрь "BABY-Ёлка"** өс йәшкә тиклемге балалар өсөн Яңы йыл байрамы. 12:00, 14:00 һәм 15:00. 0+

**31 декабрь "Ах, ты, Зимушка-зима"** яратҡан әкиәттәр буйлап музыкаль сәйәхәт. 12:00. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**26 - 30 декабрь "Снежная Королева"** (Г.Андерсен, Р.Ғәйнуллина), әкиәт. 6+

## А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**26 - 29 декабрь "Как лиса счастье под елкой нашла"** Яңы йыл әкиәте. 6+

*Бөгөн йүнле генә йырҙар ҙа юҡ түгелме һуң? Ни моңо, ни һүҙҙәре... Көй сығарыусылар ҙа, шиғыр яҙыусылар ҙа күп; көйөн дә, куплеттарҙы ла үҙҙәре яҙып, үҙҙәре башҡарыусылар ҙа бар - әҫәрләнеп тыңларлыҡ йыр ғына юҡ.*

БЕЛЕГЕҘ!

# МИЛЛИ КЕЙЕМ БАҺАЛЫ

**Әстерхан өлкәһендә "Этностиль" Бөтә Рәсәй милли кейем конкурсы үтте. Быйыл сара онлайн-форматта уҙҙы һәм Дағстан, Башҡортостан, Бүрәт, Коми, Сыуаш республикаларынан, шулай уҡ Курск, Әстерхан, Архангельск, Волгоград, Мәскәү, Тула өлкәләренән һәм Ямал-Ненец автономиялы округынан ҡатнашыусыларҙы берләштерҙе. Тажикстан һәм Үзбәкстан оҫталары ла үҙҙәренең эштәрен тәҡдим итте.**

Конкурс эштәрен дүрт номинацияла рус халыҡ костюмын йыйыусы һәм тикшереүсе Сергей Глебушкин рәйеслегендәге халыҡ кейеме һәм дизайны өлкәһендәге төп белгестәрҙән торған жюри баһаланы. Халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Этнографик костюм" номинацияһында Василә Камалетдинова - I, Гөлсөм Хөсәйенова - II, Әлфинә Ғәбиҙуллина III дәрәжә лауреат булды. Әлиә Аллағолова, Гөлнур Сөләймәнова һәм Сәриә Ғәбитова дипломдар менән билдәләнде. Был оҫталарҙың барыһы ла - төрлө йылдарҙа уҙғарылған "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсы лауреаттары. "Бөтә Рәсәй конкурсында юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән оҫталарҙы ҡотлайбыҙ. Һеҙҙең сәнғәт - оҫталыҡ ҡына түгел, башҡорт халҡының мәҙәни мираҫына тәрән ихтирам билдәһе лә", - тип белдерҙеләр республика Халыҡ ижады үҙәгендә.

Конкурс Рәсәй халыҡтарының традицион кейемен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән, оҫталарҙың, модельерҙарҙың, педагогтарҙың һәм уҡыусыларҙың халыҡ кейемен өйрәнеүгә, һаҡсыл ҡарауға һәм ижади үҫтереүгә ҡыҙыҡһыныуын арттырыуға, шулай уҡ тәжрибә уртаҡлашыуға йүнәлтелгән. Һәм бындай бәйге-конкурстарҙа башҡорт милли кейеме һәр саҡ юғары баһаларға лайыҡ - шуныһы мөһим.



ШАЯРТЫУ ҘА БАР!

# ҠАРҺЫЛЫУ ХИСТӘР УЯТА...

**Яңы йыл яҡынлаша, йәмәғәт! Бар мәшәҡәттәрҙе ситкә ҡуйып, йыл да ҡабатлана торған байрамса кәйеф солғанышында, бала саҡтағылай, әкиәт донъяһына сумып, үҙебеҙҙе мөғжизәләр барлығына тағы бер тапҡыр ышандырып, күмәкләп ҡаршылаясаҡбыҙ шыршылы, Ҡыш Бабайлы, Ҡарһылыулы Яңы йылды.**

Эйе, бөтәһе лә элеккесә: әкиәт персонаждары бер үк, шыршынан да шул уҡ ылыҫ еҫе килә, кешеләр ҙә тик яңы йыл алдынан ғына була торған мәшәҡәттәргә сумып, байрам ҡаршыларға әҙерләнә. Бары ла элеккесә, тик... Тик хәҙер ниңәлер Ҡыш Бабай йәшерәк тойола, Ҡарһылыу бала саҡта апай һымаҡ ине, әле байрамса кейенгән сибәр ҡыҙ кеүек. Һәм тағы бер үкенес: Һыуыҡ Бабай элеккеләй саф башҡортса һөйләшмәй, Ҡарһылыу иһә өнһөҙ ҡалыуҙы хуп күрә. Мин уға арнап, шиғыр ҙа яҙғайным, тик ул әлегә яуап бирмәне:

*Яҙғы елдәр һиңә ҡағылмаған,*
*Ҡулың йомшаҡ шуға - аҡ ҡына.*
*Яндарыңда өнһөҙ баҫып торам*
*Өркөтмәйем, тиеп, һаҡ ҡына.*

*Йылытмаған һине ҡояш нуры,*
*Һөйөү уты шуға ят һиңә.*
*Ялҡынымды әгәр яҡын күрһәң,*
*Күҙҙәремә ҡара - юҡ, тимә.*

*Һылыуҙарға хасмы ни һалҡынлыҡ?*
*Һалҡыныңды өтһәм ялҡында,*
*Аңлай алырһың, тим, ер егетен.*
*Ҡара миңә, ҡара яҡындан.*

*Бир ҡулыңды, бергә алып китәм,*
*Ҡулдарыңды һалсы усыма.*
*Әкиәтеңдән тартып алам да,*
*Әйләндерәм һине ысынға…*

Ярай, Ҡыш Бабай - өлкән персонаж, ә Ҡарһылыу шиғри хистәр уятырлыҡ түгелме ни?..

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЙЫРҘЫ ЙӨРӘКТӘ ТЫУҘЫРЫҒЫҘ!

**Бөгөнгө йыр сәнғәтебеҙ менән яҡшы таныш түгелмен. Үкенескә күрә, "Башҡорт йыры", "Юлдаш йыры" концерттарына ла йөрөй алмайым, сөнки баш ҡалабыҙҙан ситтәрәк йәшәгәс, төнгә ҡалып ҡайтыуы, бигерәк тә ҡара көҙ йә ҡышҡы һыуыҡ мәлдәрҙә, бик уңайлынан түгел.**

Бер ыңғайҙан ошо хәлгә ҡағылышлы теләгемде лә әйтеп китәйем: тулы залдар йыйырлыҡ яҡшы концерт һәм кисәләрҙе шәмбе һәм йәкшәмбелә көндөҙгө сәғәттәргә тәғәйенләгәндә, тамашасы күберәк тә йөрөр ине, моғайын. Юғиһә, эш көндәрендә күп кешелә театр-концерт ҡайғыһы юҡ. Ә йөрөргә, республикабыҙҙың мәҙәни тормошо менән танышып барырға бик тә кәрәк.

Әйтә торған төп фекерем йыр тураһында ине. Иртәнге-киске сәғәттәрҙә һис юғы "Юлдаш"ты тыңларға тырышам. Үпкәләштән булмаһын, әммә шундай һорау тынғы бирмәй: бөгөн йүнле генә йырҙар ҙа юҡ түгелме һуң? Ни моңо, ни һүҙҙәре... Көй сығарыусылар ҙа, шиғыр яҙыусылар ҙа күп; көйөн дә, куплеттарҙы ла үҙҙәре яҙып, үҙҙәре башҡарыусылар ҙа бар - әҫәрләнеп тыңларлыҡ йыр ғына юҡ. Ҡайһы бер "йыр сығарыусы"лар билдәле генә берәй әҫәрҙән "хәмсеп" алырға ла тартынмай, икенселәре иһә, үҙ ерлегендә моң таба алмай, үзбәк, чечен, төрөк мотивтарын файҙалана. Быныһы менән инде бөтөнләй килешеп булмай.

Башҡорт моңон башҡа халыҡтарҙыҡы менән бутап, "винегрет" яһамағыҙсы, көй сығарыусылар! Заман башҡа - заң башҡа, тиһәләр ҙә, боҙмағыҙ йыр-көйҙәребеҙҙе. Бәғерҙәргә үтеп инерлек ысын йыр ижад иткән өлкән быуын композиторҙарҙың әҫәрҙәрен тыңлап ҡарағыҙ, исмаһам: Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Рәүеф Мортазин, Таһир Кәримов, Рафиҡ Сәлмәнов, Абрар Ғабдрахманов, Роза Сәхәүетдинова, Рим Хәсәнов, Айрат Ҡобағошов... Һәр береһе ҡабатланмаҫ моң, талант эйәһе. Һәр береһенең исемен әйтеү менән йыр-моңдары сыңлай башлай күңелдә. Ә хәҙер бармы шундай композиторҙар? Ҡайҙа улар ижад иткән йырҙар? Моңдо, көйҙө бит уны заманса инструменттар сығарған ноталарҙан ялғап-йолғап ҡорарға түгел, ә йөрәктә тыуҙырырға, унан ғына инструментҡа һалырға кәрәк, шунда ғына ул күңел ҡылдарын сиртәсәк.

**Гөлфиә МИҘХӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮНДӘМЛЕККӘ ӨЙРӘНЕҮ...

## үҙең өҫтөнән хакимлыҡ итеү ул

Һаран кешенең ишегенән эт баҡмаҫ, төнлөгөнән ел ҡаҡмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ йыш ҡына ваҡ-төйәккә генә ҡәнәғәт ҡалабыҙ, ваҡ-төйәккә генә бошонабыҙ.

**(Блез Паскаль).**

Йылғаның ағышы унын инештәренә бәйле түгел...

**(Жан Кокто).**

Ҡайһы бер осраҡтарҙа һинең яңылышыуҙарың уңыш та килтереүе мөмкин.

**(Альфред Норт).**

Һәр кем йылына бер тапҡыр ғына булһа ла даһиға әйләнә.

**(Георг Лихтенберг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике йәш кеше Остазға килеп:**

**- Беҙҙе шәкерт итеп ал, зинһар. Һинән донъяуи ғилемдәргә өйрәнергә теләйбеҙ, - ти.**

**- Ярай, - ти Остаз. - Берегеҙ һауыттағы һыуҙы икенсе һауытҡа алмаш-тилмәш ҡойһон, икенсегеҙ бынау ташты бер урындан икенсе урынға алмаш-тилмәш күсерһен…**

**Йәштәр эшкә тотона. Ләкин күп тә үтмәй, уларҙың береһе ташты урындан урынға күсереүҙән ялыға һәм Остазға:**

**- Ташты бер урындан икенсеһенә күсереп һалыуҙың бер мәғәнәһен дә күрмәйем - был күңелһеҙ һәм файҙаһыҙ шөғөл. Миңә бер һауыттан икенсеһенә һыу ҡойорға рөхсәт итегеҙ әле, - ти.**

**Остаз йәш кешеләргә урындарын алышырға рөхсәт итә. Оҙаҡламай башта бер урындан икенсеһенә таш күсереп һалыуҙан, аҙаҡ бер һауыттан икенсеһенә һыу ҡойоуҙан ялыҡҡан йәш кеше тағы телгә килә һәм:**

**- Был шөғөлдәр миңә һис оҡшамай. Һин миңә ысынлап та ниндәйҙер ғилемгә өйрәтә торған эш ҡуш, - ти.**

**- Һин бит былай ҙа ниндәйҙер ғилемгә өйрәнәһең… - ти Остаз.**

**- Ташты күсереп ҡуйып йәки һыу ҡойоп, мин ниндәй ғилемгә өйрәнә алам?- тип аптырай йәш кеше.**

**- Күндәмлек һәм түҙемлек сифаттарығыҙ бармы икән, тип белергә иткәйнем, - ти Остаз. -Һәр ғилем ошоларҙан башлана. Кем тәү ҡарашҡа мәғәнәһеҙ генә тойолған эште күндәм башҡара, тәрән мәғәнәле эшкә башланғыс һала. Иң ҙур мәғәнә ниҙә - йөкмәткеһен аңламайынса, аҡыллы хат яҙыуҙамы, әллә ташты бер урындан икенсеһенә күсереп, ниндәйҙер фекер тыуҙырыуҙамы - быны берәү ҙә белмәй. Ә һин түҙемһеҙ - был теләһә ниндәй ғилемдең оло дошманы…**

**Эйе, үҙеңде күндәмлеккә һәм түҙемлеккә өйрәтеү - үҙең өҫтөнән хакимлыҡ итеү тигән һүҙ ул".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 25051

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99**
**Матбуғат таратыу 252-39-99**
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 25.12.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 25.12.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 26.12.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 2392